ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

20-26 ғинуар (һыуығай) 2018

№3 (785)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Исемендә әйт...



ә мин һинең кем икәнеңде әйтәм

3

Башҡорттар



7

Йөҙ ҙә бер ғүмерем...



8-9,11

Күңелдән сыҡҡан көй...



тамашасыһын мотлаҡ табасаҡ

10

ТВ-программа 14

***Бөркөт - ситлеккә һыймаҫ, башҡорт - сит-ят ерҙе һөймәҫ. Бөркөткә - ҡаяларҙа үҙ ояһы, һауаларҙа йыһан киңлеге ҡәҙерле, башҡортҡа - ата-баба төйәге, тауҙар-яландар иркенлеге ғәзиз. Бөркөт - ҡанаттары менән күктә, ә башҡорт төбө-тамыры менән тыуған ергә бәйләнгән...***

***Ярулла ВӘЛИЕВ.***

*АФАРИН!*

# ТУҒАН ТЕЛЕҢДЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Ошо көндәрҙә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Башҡорт теле буйынса төбәк-ара олимпиада уҙғарылды. Унда Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Ҡурған, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән 251 уҡыусы ҡатнашты.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**



*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Өфө кешеһенә хас булған сифаттарҙы, фиғел-ҡылыҡтарҙы барлап ҡарайыҡмы?

***Айҙар ХӨСӘЙЕНОВ, яҙыусы, "Истоки" гәзитенең баш мөхәррире:*** Мин Өфө кешеһен ҡылыҡһырлаусы 125 пункттан торған билдәләмә яҙҙым. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен тәҡдим итәм.

Һәр өфөлөнөң бөйөк яҡташтарына ниндәйҙер дәғүәһе бар.

Өфө кешеһе менән идара итеүҙең берҙән-бер юлы - уны туҡтауһыҙ шелтәләү.

Ул әлеге ваҡытта кем менән һөйләшеп тора, тик шуны ғына ихтирам итә.

Өфөлөнөң ниндәй ҙә булһа идеяһы - тик уныҡы ғына, ә ҡалған кешенең фекере - дөйөм.

Бер Өфө кешеһе икенсе Өфө кешеһе менән һауа торошо тураһында һөйләшә алһын өсөн улар бер-береһен егерме йыл тирәһе белергә тейеш.

Нимә генә ишетһә лә, ул: "Мин ҡаршы!" - тип әйтергә әҙер.

Өфөләгә ҡышын һыуыҡ, йәйгеһен эҫе, яҙ көнө - бысраҡ, көҙөн яуынлы һәм ҡараңғы.

Ул ғәҙелһеҙлек менән бер төрлө генә көрәшә - тыныс ҡына көтә.

Шағир менән осрашҡанда Өфө кешеһе мотлаҡ: "Мин дә шиғыр яҙам", - тип әйтәсәк.

Үҙенеке - тик уныҡы, ә дуҫтары һәм туғандарыныҡы - дөйөм.

Үҙен яҡшы кеше тип һанаған өфөлө, нисек теләйем, шулай эшләйем, тигән хоҡуҡҡа эйәмен, тип уйлай.

Өфөлө башҡаларҙың уңышын һәм үҙенең еңелеүен танымай.

Унын менән бәхәсләшеү - дегет мискәһенә бал ҡойоуға бәрәбәр, балды күберәк һалған һайын, дегет күбәйә бара.

Ул бөтә нәмәне лә тиҙ һәм еңел эшләргә теләй.

Өфөлә йәки үпкәләй, йәки үҙе кемдеңдер хәтерен ҡалдыра.

Барыһы ла ҡыҙыҡлы һәм бушлай булһын тигән теләк - Өфө кешеһенә хас холоҡ. Унын өсөн хәбәрҙең мөһимлеге ул хәбәрҙең кем ауыҙынан сығыуына бәйле.

***Булат ҒӘЛИЕВ, журналист:*** Бер нисә йыл элек билдәле журналист, блогер һәм фото төшөрөүсе Илья Варламовтың һорауы буйынса Өфө халҡы тураһында үҙ фекерҙәремде яҙғайным. Әлбиттә, уларҙы һәр өфөләгә тап килгән универсаль билдәләр итеп түгел, ә ниндәйҙер кимәлдә юмор аша ҡарарға кәрәк. Шулай итеп, киттек.

Беҙ барыбыҙ ҙа "Хрусталь", "Восьмиэтажка" һәм "Йүрүҙән"де беләбеҙ, ә ысынында ундай туҡталыштар юҡ.

Нефткә бай республикала йәшәүеңде беләһең, ләкин ни өсөн бензинға хаҡ илдә иң юғарылар рәтендә икәнен аңламайһың.

"Макдоналдс"ҡа ресторанға йөрөгән кеүек йөрөйһөң.

Өфөлә билдәле урындар юҡ тиерлек, тип үкенес белдерәһең, ә ошоно уҡ ситтән килеүсе әйтһә, ауыҙҙан төкөрөк сәсеп, киреһен иҫбатларға тырышаһың.

Һәр ваҡыт ҡала башлығын әрләйһең, ләкин үҙең бер ҡасан да өмәләргә сыҡмайһың. Ҡаланың бер районынан икенсеһенә барыуҙы күрше ҡалаға барған кеүек ҡабул итәһең.

"ПАЗ" маршрут автобустарында кондуктор күрһәң, ныҡ аптырайһың.

Үҙәк телевидениенан Шевчукты йәки Земфираны күрһәтһәләр, ғорурлыҡ менән: "О, яҡташтар!" - тип ҡысҡыраһың.

Ҡаланың ойошма һәм предприятиеларында етәксе вазифаһы мөмкинлектәргә ҡарап түгел, ә васыятнамә буйынса тапшырыла икәнен беләһең һәм быны ғәҙәти хәл итеп ҡабул итәһең.

"Башнефть"тә, бик тә булмаһа, республика Башлығы хакимиәтендә эшләү тураһында хыялланаһың.

Өфөлөнөң өҫтәлендә һәр ваҡыт бал һәм сәк-сәк бар.

Барыбыҙҙың да Илгиз һәм Гөлназ исемле танышыбыҙ бар.

Хоккейҙы донъялағы беренсе спорт төрө тип иҫәпләйһең, сөнки һин "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн төп көйәрмән.

Парктарҙағы балалар аттракциондарында ял көндәрендә хаҡ ике тапҡыр ҡыйбатыраҡ булғанына аптырамайһың...

***Булат ҒАЙСАРОВ, студент:*** Мин беҙҙең ғаиләнең Өфөлә йәшәүсе өсөнсө быуын вәкилемен. Төрлө илдәрҙә булдым, әллә күпме ҡалаларҙы күрҙем, ләкин Өфөнән дә яҡыныраҡ урын юҡ. Ошо ҡалала тыуып үҫкән кеше булараҡ, Өфө кешеһенә түбәндәгесә ҡылыҡһырлама бирер инем.

Беҙ "Өс шөрөп" тигәндә, Ер шарының ҡайһы өлөшөндә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, мотлаҡ Өфө тураһында уйлайбыҙ.

"Свобода" урамының ошондай уҡ атамалы тыҡырыҡҡа барып тоташҡанын Өфөлә йәшәүсе һәр кем белә.

Әгәр ҙә Һупайлы биҫтәһендә йәшәһәң, ямғыр ҡойоп яуған ваҡытта өйҙән сыҡмау хәйерлерәк икәнен дә яҡшы төшөнгәнбеҙ.

Ҡаланың бер осонан икенсеһенә тиклем барып еткәнсе, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрен уҡып бөтөргә мөмкинбеҙ.

Беҙгә килгән ҡунаҡтарҙы мотлаҡ Салауат Юлаев һәйкәлен күрһәтергә алып барабыҙ...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо юлдарҙы уҡыусылар ҙа Өфө кешеһенә хас ҡылыҡ-фиғелдәр тураһында яҙып ебәрә ала. Әйҙәгеҙ...**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

12+

✓ *"Мисс России" титулына эйә булған ҡатын-ҡыҙ әсәләргә һорауҙар бирә журналист. Ленин кем ул? "Идиот" романын кем яҙған? Ер Ҡояш тирәләй әйләнәме, әллә - киреһенсәме? Ошондай ябай ғына һорауҙарға яуап бирә алманы әсәләр.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# САУҘАГӘР ҘӘ БУЛҺЫН...

***Фәрит ВАХИТОВ, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, журналист:*** Яңы йылды ҡаршылағанда, ғинуар каникулдарында ҡатыным Наилә менән БСТ-лағы матур башҡорт программаларын тамаша ҡылдыҡ. Бигерәк тә балаларыбыҙҙың сығыштары - бейеүе, йырлауы, ҡурай уйнауы һоҡландырҙы. Эйе, бигерәк талантлы балаларыбыҙ һәм уларға ошо талантарын сағыу балҡытырға бар мөмкинлектәр тыуҙырылған. Әммә... Мине уйландырғаны шул булды: балаларыбыҙ йырлап-бейеп йөрөп кенә милләтте һаҡлай алырмы? Милләтте һаҡлар өсөн тәү сиратта илен, ерен һаҡларға бурыслы бит башҡорт балаһы. Ә уның өсөн улар мәктәптә уҡығанда уҡ сәнәғәт тармаҡтары, хоҡуҡ һаҡлау, эшҡыуарлыҡ тураһында ла белем алырға, глобалләшеү, баҙар иҡтисады шарттарында йәшәргә өйрәнергә тейеш. Борон Демидовтар, Пашковтар, тағы әллә кемдәр килеп, беҙҙә сәнәғәт тармаҡтарын үҫтергән, ошо мөхиткә хужа булған, улдарыбыҙ-ҡыҙҙарыбыҙҙы үҙҙәренә бил бөктөргән, шул күренеш һаман дауам итә бит...

Бәлки, мин дөрөҫ фекерләмәйемдер, ләкин һаман үҙ донъябыҙға, үҙ мөхитебеҙгә хужа була алмауыбыҙ бошондора. Бер генә миҫал. Баҡса тултырып картуф-йәшелсә үҫтерәбеҙ, ҡура тултырып мал аҫырайбыҙ. Әммә ошо продукция менән баҙарҙарыбыҙҙа ер аяғы ер башынан килгәндәр һатыу итә. Ниңә һаман үҙебеҙ етештергән тауар менән сауҙа итергә өйрәнмәйбеҙ һуң беҙ? Сөнки сауҙагәрлекте маҡсат итмәйбеҙ, был шөғөл беҙҙеке түгел, тип ҡарайбыҙ. Бер нисә йыл элек "Ағиҙел" журналында бер ханымдың балаһын емешеләк һатыуҙан тыйыуы тураһында яҙып сыҡтым. Ул миҫалда: "Нимә эшләп ул емеш-еләк һатып ултырырға тейеш? Унан килеп, башҡортҡа килешәме шул эш? Әҙәпһеҙлек бит был, уҡыһын, белем алһын", - тип көйә ҡатын. "Бала һатыу эшенә тотона икән, үҙенә мал туплай, тимәк, уның йәшәргә рәте, көсө була, ҡайҙа ғына барһа ла аҡса эшләп, үҙ йүнен үҙе күрә, милләтенә файҙалы, иленә кәрәкле эшкә лә үҙ өлөшөн индерә", - тип аңлаттым был ханымға. Барыбер ризалашманы. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, сауҙа итеүгә, эшҡыуарлыҡҡа күптәрҙең мөнәсәбәте шулай беҙҙә. Ә бит үҙендең кемлегеңде йыр-бейеүгә һөйөү менән генә түгел, сәнәғәт, иҡтисад, сауҙа, сәйәсәт өлкәһендәге уңыштар менән дә раҫларға була. Юғиһә, башҡорт милләтенә файҙа килтергән эште башҡорттан башҡа береһе лә эшләмәйәсәк.

Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына Ишембай районының энциклопедияһын уҡып сыҡтым. Унда Шәкетауҙың 1940 йылда төшөрөлгән фотоһы ла бар ине, һоҡланып ҡарап ултырҙым. Шул бейек, матур тауҙы юҡҡа сығарҙыҡ. Ә башҡорт халҡына Шәкетауҙы юғалтыуҙың, Европа күләмендә иң ҙур сода комбинаты эшләтеүҙең файҙаһы өс тинлек булһа булғандыр. Бындай ҙур предприятиелар милләтте үҫтереүгә үҙмаҡсатлы сығымдар бүлергә тейеш тә бит. Бының өсөн, әлбиттә, шундай юғары кимәлдәге мәсьәләләрҙе хәл итә алған, сауҙа, баҙар иҡтисадын яҡшы белгән башҡорт йәштәре булыуы шарт. Шуны иҫтә тотайыҡсы әле.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ!

# ТЫУАСАҠ БАЛАЛАРЫМДЫҢ...

## туған телен тартып алдырмам!

**Мин - Башҡортостан Республикаһында башҡорт атай-әсәйҙән тыуған башҡортмон. Өйҙә башҡорт телендә һөйләшәбеҙ. Ғаиләлә башҡорт тәрбиәһе алып үҫтем. Мостай Кәримдең башҡорт телендәге әҫәрҙәре аша китаптар менән таныштым. Рәми Ғарипов шиғырҙары яҙыусының исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға барырға илһамландырҙы.**



Бала саҡтан башҡорт йырҙарын яратам. Әле лә Ғәзим Ильясов, Ирек Ноғоманов, Рөстәм Ғиззәтуллин, Сәғиҙулла Байегет, Радик Юлъяҡшин, Мс Баш һәм башҡаларҙы кинәнеп тыңлайым. Иң тәүҙә ошо егеттәргә саҡырыу ташлайым: һеҙ ҙә бөгөн башҡорт телен мәктәптәрҙә туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу тирәләй килеп тыуған проблеманан ситтә тормағыҙ, балаларығыҙҙы туған телдә уҡытығыҙ, сөнки телде юғалтһаҡ, һеҙҙең йырҙарҙы бит берәү ҙә тыңламаясаҡ, аңламаясаҡ.

Башҡорттоң тарихы бай, хатта рус теленә тәржемә иткәндә тарихи материалдарҙың төп йөкмәткеһе баҙыҡланғандай тоям. Шуға күрә, мин тарихты башҡорт телендә уҡыуға һәм өйрәнеүгә өҫтөнлөк бирәм. Ә "Урал батыр" эпосынан күпме һабаҡ алырға мөмкин? Ул - бөйөк ҡомартҡыбыҙ беҙҙең!

Мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙан баш тартыу менән генә белем биреү өлкәһе һөҙөмтәле эшләй башлар тип уйламайым. Ул нисек тиҫтәләрсә йылдарға артта ҡалған булһа, шулай ҡаласаҡ та. Бында эҙемтәләрҙе яйларға түгел, ә төп сәбәпте табырға һәм уны бөтөрөргә кәрәк. Ғәҙәттә, шундай ҡарарҙар менән властар йәмғиәттең реакцияһын тикшерә һәм шау-шыу аҫтында икенсе эштәрҙе тормошҡа ашыра. Шуға күрә, был фекерем буйынса бәйләнә ҡалһалар, Төп Закондың 29-сы статьяһын да яҙып үтәйем: "Һәр кемгә фекер һәм һүҙ азатлығы гарантиялана. Бер кем дә үҙ фекерен һәм инаныуҙарын белдереүгә йәки уларҙан баш тартыуға мәжбүр ителергә тейеш түгел. Башҡортостан Республикаһында һәр кем ирекле рәүештә законлы юл менән мәғлүмәт эҙләргә, табырға, яҙырға һәм таратырға хоҡуҡлы. Киң күләм мәғлүмәт азатлығы гарантиялана". Тимәк, мәғлүмәтте һәр кем, шул иҫәптән социаль селтәрҙәрҙә лә, ҡыйыу рәүештә яҙа, тарата ала.

Башҡортостанда башҡорт телен өйрәнергә кәрәкме, тип бәхәс ҡуптаралар икән, ышаныслы итеп: "Кәрәк!"- тип яуаплайым. Кем ниндәй ҡараштa булғанын әйтә алмайым, әммә мин тыуасаҡ балаларымдың туған башҡорт телен өйрәнеү хоҡуғын тартып алырға юл ҡуймаясаҡмын!

**Динар ШАҺИЕВ,**
**эшҡыуар.**
**Әбйәлил районы**
**Ишҡол ауылы.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# УҠЫМАҺАҢ...

**Мәғлүмәтте хәтереңә, аңыңа һеңдергең килһә, уны аҡ ҡағыҙҙан уҡыу кәрәк, тигән хәҡиҡәт яҡлы булһам да, ҡайһы саҡта телевизор ҡарау, интернет донъяһында гиҙеү ҙә шәп булып ҡала. Йәғни улар аша аҡ ҡағыҙға теркәлер фекерҙәр ауларға мөмкин, тимәксемен.**



Бына әле Яңы йылдан һуңғы оҙайлы ял көндәрендә "Рәсәй-1" каналында "Сто к одному" тигән уйын ҡараным. Журналист Александр Гуревич алып бара уны. Опера һәм эстрада йырсыларынан торған ике команда ярыша. Алып барыусы уларға ябай ғына шундай һорау бирә: "Йоҡларға йәки ял итергә ятыр алдынан эргәгеҙгә ниҙәр алаһығыҙ?" Бик оҙаҡ хитланғандан һуң, шундай яуаптар ишетелә: телефон, телевизор пульты, стакан менән һыу, күҙлек... Мин иң тәүге булып әйтер һүҙҙе улар... алып барыусы бик оҙаҡ ныҡығандан һуң ғына иҫенә төшөрҙө: китап.

Тағы мине төңөлдөргән бер миҫал: интернетта йөрөй был "Быуындар деградацияһы" тигән видео. "Мисс России" титулына эйә булған ҡатын-ҡыҙ әсәләргә һорауҙар бирә журналист. Ленин кем ул? Леннон кем? "Идиот" романын кем яҙған? Ер Ҡояш тирәләй әйләнәме, әллә - киреһенсәме? Ошондайыраҡ ябай ғына һорауҙарҙың береһенә лә яуап бирә алманы йәш әсәләр. Атаһы япон милләтенән, әсәһе рус булған, әлеге көндә Японияла йәшәгән һылыуҡайға "Хиросима менән Нагасаки ниндәй ваҡиға менән билдәле?" тигән һорау бирелде, әммә тағы дөрөҫ яуап алынманы. Иң аптыратҡаны шул булды: журналист бәйгенең төп еңеүсеһенә, үҙе балалар үҫтергән Анна исемле йәш әсәгә һорау бирә: "Кем ул Агния Барто?" "Белмәйем, минең кеүек әсәй кешелер" - була яуап. "Ә Самуил Маршак кем?" "Белмәйем..."

Иҫ киткес! Хәҙерге быуын уҡымай, тигәнгә тағы бер раҫлау түгелме ни былар! Тәүге миҫалдағылар минең быуын ҡулдан төшөрмәй торған ки-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы республиканың тулы хоҡуҡлы вәкиле вазифаһын башҡарыуҙы Олег Матыцинға йөкмәтеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Ошо уҡ указ менән Олег Матыцин вице-премьер вазифаһынан бушатылды, алдан хәбәр ителгәнсә, Премьер-министрҙың яңы урынбаҫары һәм Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты етәксеһе итеп быға тиклем республика башлығы аппараты хакимиәтенең эштәр менән идара итеүсеһе булып эшләгән Андрей Трухан тәғәйенләнде.

✓2018 йылда республика властарына хоҡуҡ һаҡлау органдары менән берлектә алданған өлөшсөләрҙең хоҡуҡтарын яҡлауға бәйле мәсьәләләрҙең күпселек өлөшөн хәл итергә кәрәк. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Прокуратура хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы йыйылышта билдерҙе.Төбәк етәксеһе уҙған йылда намыҫһыҙ төҙөүселәрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу буйынса ҡаты саралар күреүҙәрен хәбәр итте. Өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыусыларҙың хоҡуҡтарын боҙоуға бәйле 10 енәйәт эше ҡуҙғатылған.

✓Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы Президент һайлауҙа тауыш биреү өсөн һайлау бюллетене формаларын ҡарай. Тауыш биреү көнөнә бюллетендәр - 7 мартҡа, ә алыҫ райондарҙа һәм сит илдәге һайлау участкаларында ваҡытынан алда тауыш биреүҙе тәьмин итеү өсөн 25 февралгә әҙер булырға тейеш. Сит илдә йәшәгән рәсәйҙәр өсөн 1,87 миллиондан ашыу бюллетень әҙерләнә. Рәсәй Федерацияһы Президентын һайлау 18 мартта уҙа, 2017 йылдың 18 декабрендә рәсми рәүештә һайлау кампанияһы башланды.

✓Республикала эшһеҙлек буйынса уртаса пособие күләме ноябрь менән сағыштырғанда бер аҙға артҡан һәм 4132 һум тәшкил итә. Иң түбән пособие күләме хәҙер - 977,5 һумға, иң күбе 5 635 һумға тиң. "1 ғинуарға ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, төбәктә эшһеҙлек буйынса иң түбән пособиены - 5,6 мең кеше, иң юғарыны 11,4 мең рәсми теркәлгән эшһеҙ ала", - тип хәбәр итә Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте.

*✓ Туғыҙынсы класта уҡый башлау менән иптәштәрем Ғәйфулла - Гришаға, Сәйфулла Сашаға әйләнеп китте. Башҡорт малайы Шәкирйән Мөхәмәтйәновтың Александр Матросовҡа әйләнеп китеүенең сәбәбе лә аңлашыла торғандыр.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Күптән түгел поликлиникала булырға тура килде. Табипҡа инергә сират еткәнен көтөп ултырғанда яныма башҡорт йөҙлө йәш ҡатын менән биш йәштәр самаһы бала килеп ултырҙы. Әҙерәк ултырғас, баланан исемен һорамаҡ булып, "Ты кто?" тип өндәштем. Ҡыҙыҡай исемен әйтеү урынына "Я - русская" тип яуап бирҙе. "Мин бит һинең исемеңде һорайым", тигәс: "Я - Кристина", - тип яуапланы.**

# ИСЕМЕҢДЕ ӘЙТ...



## ә мин һинең кем икәнеңде әйтәм

Ҡыҙыҡайҙың Кристина исемле булыуы иғтибарымды йәлеп итте һәм мин һораулы ҡарашымды ҡатынға йүнәлтеп: "Ә үҙегеҙ башҡортҡа оҡшағанһығыҙ", - тинем. Йәш ҡатын мине нимә ҡыҙыҡһындырғанын аңлап: "Мин башҡортмон, иремдең атаһы башҡорт, әсәһе мәрйә, Артем исемле улыбыҙ ҙа бар", - тине. "Ә туған телегеҙҙе - башҡорт телен - беләһегеҙме?" тигән һорауыма: "Я так себе, а ирем вообще ничего не знает", - тип әйтеп һалды.

Ошо юлдарҙы уҡып, минең нимә тураһында һүҙ башларға уйлағанымды аңлағанһығыҙҙыр. Ысынлап та, ассимиляцияның көсәйгәндән-көсәйә барыуының төп сәбәбе - туған телебеҙҙә һөйләшмәү һәм исем-фамилияларыбыҙҙы урыҫлаштырыу ул. Шуны иҫбатлар өсөн ошо күренеште тикшереп ҡарайыҡ әле. Башлайыҡ ҡатнаш никахтарҙан. Күреүебеҙсә, егеттәребеҙ мәрйә ҡыҙына өйләнһә лә, ҡыҙҙарыбыҙ урыҫ егеттәренә кейәүгә сыҡһа ла, уларҙан Олялар, Юлялар, Сашалар, Пашалар тыуа, ә Гүзәл, Ринат, Айгөл, Ришат исемдәренә урын табылмай...

Минең менән күп йылдар бергә эшләгән Хәниф ағайҙы тормош иптәше Николай тип йөрөттө. Икеһе лә күптән мәрхүмдәр. Уларҙың ике ҡыҙҙарының береһе Любовь Николаевна булһа, икенсеһе Нина Николаевна булып йөрөй. Ә балалары Валера, Юра, Евгения исемдәрендә.

Әйткәндәй, исем-фамилияларыбыҙҙы урыҫлаштырыу таҙа башҡорт ғаиләләрен дә урап үтмәй. Беҙ, башҡорт балалары, ауылыбыҙҙа һигеҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, урыҫ милләте күпселекте тәшкил иткән ауылға урта мәктәпкә уҡырға барҙыҡ. Туғыҙынсы класта уҡый башлау менән иптәштәрем Ғәйфулла - Гришаға, Сәйфулла Сашаға әйләнеп китте. Башҡорт малайы Шәкирйән Мөхәмәтйәновтың Александр Матросовҡа әйләнеп китеүенең сәбәбе лә аңлашыла торғандыр шулай булғас.

Инде фамилияларыбыҙға күсәйек. Иғтибар итегеҙ. Уларҙың ҡайһы берҙәренең бер генә хәрефен икенсегә алыштырһаң йәки төшөрөп ҡалдырһаң да, урыҫса яңғыраш ала. Үҙенең, балаларының тормошо уңышлыраҡ булыр тип хыялланғандар доминант милләткә күсеүҙе хуп күреп шулай эшләй ҙә инде.

Тағы ла исемдәргә әйләнеп ҡайтам. Башҡорт исемдәре китабын асып ҡарағыҙ. Иҫ киткес матур исемдәр бик күп - боронғоса ла, хәҙерге замандыҡы ла - күңеленә ятҡанын һайларға була. Гөлназ, Ләйсән, Азат, Азамат исемдәре бер яғы менән дә Снежана, Анжела, Коля, Толя исемдәренән кәм түгел, киреһенсә, әйтелештәре менән фамилияларына, аталары исеменә тап килеп тора.

Рәсәйҙә ике йөҙләп милләт йәшәй. Тәбиғәт уларҙың барыһына ла үҙҙәренә генә хас изге сифат итеп телдәр, исем-фамилиялар биргән. Ғорур халыҡтар шул изге сифаттарын һатмай, һаҡлай белә, быуындан-быуынға тапшыра килә. Беҙ, башҡорттар, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған ғорурлыҡты һорау аҫтына ҡуймаһаҡ ине, шәжәрәләребеҙҙе яһалма рәүештә ҡыйратмай, исем-фамилияларыбыҙҙы ҡомартҡыбыҙ, васыят итеп ҡабул итһәк ине. Килешмәгән эштәр ҡылып, милләтебеҙҙе, халҡыбыҙҙы рәнйетмәһәк, йәберләүгә, кәмһетеүгә юл ҡуймаһаҡ, үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлмәһәк ине. Йәнебеҙгә гонаһ алмайыҡ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бөгөнгө көндә БСТ каналы республикабыҙҙың 100 йыллығына арналған "Башҡортостандың 100 исеме" тигән бик изге тапшырыу күрһәтә. Рәхмәт ойоштороусыларға. Ҡарағыҙ, Башҡортостаныбыҙҙы данлаған шәхестәрҙең исем-фамилияларына - араларында яһалмаларын таба алмаҫһығыҙ. Һүҙемде яҡташымдың, халыҡ шағирының һүҙҙәре менән тамамлағам килә.**

***Бел һин, кеше, бел һин шуны:***<br>
***Иң ауыры үҙең булып ҡалыу,***<br>
***Иң насары - алмашыныу...***

**Р. ДАУЫТОВ,**<br>
**Бөрө ҡалаһы һәм районы башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты ағзаһы.**

тапты ял иткән саҡтағы иң кәрәкле әйбер исемлегенә индермәй, икенсе миҫалдағылар китап уҡымау арҡаһында бөтөнләй наҙан ҡалған. Тәүгеләре, эйе, опера һәм эстрада йырҙары өлкәһендә профессионалдарҙыр, икенселәре лә йөҙ һәм һын матурлығы хаҡында барыһын да беләләр. Әммә... Уҡымаған, ябай ғына һорауға ла яуабы булмаған наҙанлыҡ биҙәйме һуң уларҙы? Улар хатта ғалимдарҙың, йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә бер генә бит булһа ла китап уҡырға кәрәк, аҡ ҡағыҙ битендә яҙылған фекер аша уйҙарға, хыялдарға, тормош асылына, төрлө фәлсәфәүи төшөнсәләргә, рухиәткә юл асыла, тигәнен дә белмәйҙер...

Ҡулына гәзит-журнал, китап тотоп та ҡарамаған бер танышым бар. Шул тиклем томана, шул тиклем ваҡ, шул тиклем буш һәм вайымһыҙ ул. Уның менән бер нәмә тураһында ла һөйләшеп булмай. Хатта уны күреү менән эргәһенән ҡасыу теләге тыуа. Һаумы-иҫәнме, тип әйтер өсөн генә тотҡарланып ҡалаһың да, тиҙерәк ситкә китергә тырышаһың...

Хәйер, хәҙер күптәр ошо танышым хәленә ҡалып бара бит. Барыһы ла уҡымау арҡаһында... Ошо сәбәпле тағы ниндәй ҡиммәттәребеҙ юҡҡа сыҡты һуң? Беренсенән, ваҡытты файҙалы итеп үткәреү ғәҙәтен онота барабыҙ, имеш. Мәҫәлән, телевизор төймәләрен алмаш-тилмәш баҫҡылап, көндәр буйы диванда аунап ятыу - заяға үткән ваҡыт бит инде ул. Ә компьютерҙа уйын уйнау?.. Икенсенән, аҡ ҡағыҙҙан айырылып, фекерләү ҡеүәһен торған һайын нығыраҡ юғалта барабыҙ. Шуға өҫтәп, уйлана, аҡыллы һығымталар яһау ҡеүәһен дә. Бәй, кеше асылының нигеҙен тәшкил иткән ҡиммәттәр китә икән дә беҙҙе ҡалдырып, һиҙәһегеҙме?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***26-сы күҙәтеүем.*** Әле генә булған ваҡиғаны онотҡан хәтерһеҙ, тарҡау, иғтибарһыҙ (С. Маршактың "Вот такой рассеянный" шиғырын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ) кешеләрҙе күргәнегеҙ бармы? Әммә уларҙы иҫәүән тип атарға ҡабаланмағыҙ. Ундайҙар донъялағы иң иғтибарлы кешеләр: сөнки улар бар иғтибарын бер генә объектҡа йүнәлтеп, башҡаларына иғтибар ҙа итмәй. Тимәк, иғтибарһыҙлыҡ айырата диҡҡәт билгеһе.

***27-се күҙәтеүем.*** "Юлдаш" егеттәре балаһыҙлыҡ өсөн һалым түләү мәсьәләһе буйынса һөйләшеү ойошторҙо. Минең фекер шулайыраҡ: бала Хоҙайҙың әмере буйынса, үҙ ризығы менән тыуа икән, балаһыҙлыҡ өсөн һалым түләтеү Хоҙайға штраф һалыуға тиң.

***28-се күҙәтеүем.*** Әбйәлил районында машина һатып алған бер егет Магнитогорскиға барған автобусҡа ултырып, ҡала осонда төшөп ҡалып, йәйәүләп юлдағы билдәләрҙе, боролоштарҙы, светофорҙарҙы, ҡайһы урында нимә эшләргә ярағанын-ярамағанын өйрәнеп, тикшереп йөрөп сыҡҡан. Ауылына ҡайтҡас, машинаһы менән ҡалаға китеп, разведка яһаған маршруты буйынса уңышлы ғына йөрөп ҡайтҡан. Эх, әгәр ҙә алдағы ғүмергә лә ошо рәүешле разведка яһап булһа, беҙ бик күп хаталарҙы яһамаҫ инек...

***29-сы күҙәтеүем.*** Артыҡ кәүҙә ауырлығынан (һимеҙлектән) ҡотолоу юлын дуҫым, Өфөнөң "ҡар кешеһе" Анатолий Львович Легкота шунда күрә ине: "Ябығыр өсөн әллә ниндәй методикалар эшләйҙәр, китаптар яҙалар, махсус институттарҙа ғалимдар ошо проблеманы өйрәнеп, фән дәрәжәһенә өлгәшә. Ә бит ябығыуҙың юлы ап-анһат ҡына, 3 һүҙҙән генә тора - әҙерәк ашарға кәрәк!"

***30-сы күҙәтеүем.*** Ҡоштар күп төрлө, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенсә һайрай. Үҙенсә моң атҡара. Тағы ла шуныһы: тик ата ҡоштар ғына һайрай. Улар бының менән инә ҡоштарҙы ғаилә ҡororға, бергәләп балалар үҫтерергә саҡыра. Әгәр ҙә ҡоштар һайрауынан туҡтаһа, улар бер-береһен таба алмай, юҡҡа сығырҙар ине. Өсөнсөнән, һабантурғайҙың йырына һандуғас, һандуғастың һайрауына кәнәри ҡош килмәй. Тимәк йыр, һайрау ҡоштарға үҙ затын (милләтен) һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Кешеләр генә тәбиғәттең ошондай гармониялы илаһиәтенән әллә ҡасан уҡ айырылған. Үкенес!

***31-се күҙәтеүем.*** Мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырауҙар яңғырар алдынан магазиндарҙа спиртлы эсемлектәр һатылмаясағы хаҡында хәбәр иттеләр. Радио һәм телевидение аша һанда-һаяҡ ҡына, барлығы өс мәртәбә был хаҡта ишеттем. Дөрөҫөн әйткәндә, бындай иғландар мәктәпте тамамлаусылар өсөн: "Ул көндө спиртлы эсемлектәр һатылмай, шуға күрә алдан запасланып ҡалығыҙ!" - тигәнде лә аңлатыуы мөмкин. Тыйыу ул иң шәп реклама! Минеңсә, тыйыу дөрөҫ булһа ла, был хаҡта иғлан итергә кәрәкмәйҙер.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**<br>
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓БР Башлығы Рөстәм Хәмитов "Республика Башкортостан" гәзите ойошторған "Йыл кешеһе" конкурсында еңеүселәр менән осрашты. Баймаҡ районынан пенсионер Фәйзрахман Усманов әңгәмә барышында тирә-яҡ мөхитте һаҡлау темаһын күтәрҙе. Уның башланғысы буйынса "Таҙа Һаҡмар" тигән ҙур экологик акция ойошторолған. Ә Учалы районынан 92 йәшлек Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ғарифулла Зөлҡәрнәев үҙ аҡсаһына йүкә аллеяһын ултыртҡан һәм мәсет эргәһен төҙөкләндергән.

✓Башҡортостан Урман хужалығы министрлығында 2017 йылдың 27 ноябренән 31 декабренә тиклем уҙғарылған "Шыршы-2017" операцияһына йомғаҡ яһалды. Тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә 107 законһыҙ урман, шул иҫәптән ылыҫлы йәш ағастар ҡырҡыу осрағы асыҡланған. 64 осраҡ административ тәртиптә ҡаралған, 43 законһыҙ ҡырҡыу осрағы Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 260-сы статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыу өсөн сәбәпсе булған. Урман фондына килтерелгән дөйөм зыян күләме 3,4 миллион һумдан артҡан.

✓Өс "көмөш" һәм бер "бронза". Шундай һөҙөмтә менән Өфө спортсыһы Семен Елистратов Германияның Дрезден ҡалаһында шорт-трек буйынса Европа чемпионатын тамамланы. Башҡортостандың баш ҡалаһынан 27 йәшлек конькиҙа йүгереүсе 1000 метр арала Рәсәй йыйылмаһында тәүге көмөш миҙалды яуланы, икенсене - 1500 метрҙа, өсөнсөнө - ярыш йомғаҡтары буйынса. Елистратов күп бәйгелә "бронза" алды.

✓Сатлама һыуыҡтарҙан һуң һыу ятҡылыҡтарында боҙ нығынды. Йылға аша йәйәү сығыу өсөн боҙ 7 сантиметр ҡалынлыҡта булырға тейеш, балыҡ тотоу өсөн - 10 сантимер, ҡаргиҙәрҙә йөрөү өсөн - 12 сантиметр, еңел автомобилдә - 20-30 сантиметр, бөтә ерҙән үтә алған машина өсөн - 30-38 сантиметр. Мәғлүмәттәргә ярашлы, баш ҡалала Дуҫлыҡ монументы тирәһендә Ағиҙелдә боҙ 22 сантиметрға еткән, Сипайлово янында Ҡариҙелдә - 12 сантиметр.

✓Республика статистары баш ҡалала бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтарҙың артыуын теркәгән. 29 декабрь менән сағыштырғанда, 9 ғинуарға Өфөләге яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-92 маркалы бензин 0,7 процентҡа ҡиммәтләнгән - уртаса 37, 49 һум. АИ-95 һәм АИ-98 маркалы бензиндарҙың хаҡы 0,6 һәм 0,5 процентҡа артып, бер литры 40,51 һәм 44,49 һумға еткән.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# МАТДИ ХӘЛДЕ ЯЙЛАП...

✓ **Башҡортостанда аграр йүнәлештәге уҡыу йорттарын тамамлағандарға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең күләме артты, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.** Мәҫәлән, юғары һөнәри белем алғандар өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең суммаһы - 500 мең һумға тиклем, профессиональ белем биреү ойошмаларын тамамлағандарға 300 мең һумға ҡәҙәр артты. Ведомствола билдәләүҙәренсә, аграр сәнәғәт комплексы өлкәһендәге эштең абруйын күтәреү, йәш белгестәргә ярҙам итеү мәсьәләләре бөгөн өҫтөнлөклө дәүләт бурыстарының береһе булып тора. Әлеге ваҡытта Башҡортостандың аграр сәнәғәт комплексы системаһындағы вакансиялар банкында 2,3 мең самаһы эш урыны иҫәпләнә. Иң кәрәкле белгестәр исемлегенә агрономдар, ветеринарҙар, зоотехниктар, бухгалтерҙар, механизаторҙар, комбайнсылар, машина менән һауыу операторҙары, шулай уҡ малсылар, үҫемлекселек белгестәре етәкләй.

✓ **Республика Хөкүмәте Президиумының сираттағы ултырышында көндөҙгө бүлектә бюджет нигеҙендә уҡыусы студенттарға стипендия һәм (йәки) социаль стипендия тәғәйенләү тәртибе раҫланды.** Хәҙер аҙ тәьмин ителгән, тулы булмаған ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе бөтә студенттар ҙа элеккесә дәүләттең социаль ярҙамына иҫәп тота ала. Шул уҡ ваҡытта студент академик ялда булғанда (армияла хеҙмәт итеү, бала ҡарау буйынса ял осоронда) социаль түләү туҡтатыла. Был закон проектын ҡабул иткәнгә ҡәҙәр тулы ғаиләлә тәрбиәләнеүсе 16 меңгә яҡын студент бындай хоҡуҡтан мәхрүм ителгәйне, тип билдәләнеләр төбәк Хөкүмәтендә. Социаль пособие алыу өсөн Башҡортостанда белем алыусы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булған уҡыусыларға һәм студенттарға Республиканың халыҡҡа социаль ярҙам итеү үҙәге йәки Күп функциялы үҙәк филиалдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓ **Федерация Советы әсәлек капиталы программаһын 2021 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтҡан законды хупланы.** Документ әсәлек капиталын мәктәпкәсә белем биреү сектөрендә мәғариф программаларына түләүгә йүнәлтеүҙе, ипотека өсөн түләүгә иғәнә булараҡ файҙаланыуҙы йәки уның менән торлаҡ буйынса башҡа кредиттарҙы ҡаплауҙы күҙ уңында тота. Быны балаға өс йәш тулғансы эшләргә мөмкин. Дәүләт ярҙамына беренсе бала тыуғандан һуң өс йыл үткәс икенсе, өсөнсө йәки артабанғы балалары донъяға килгән ғаиләләр дәғүә итә ала. Закон Рәсәй Президенты Владимир Путин тарафынан парламенттың түбәнге палатаһына индерелгән. Уның фекеренсә, әсәлек капиталы бала табыу өсөн һәйбәт стимул булды. Программа 2018 йылдың декабрь аҙағында тамамланырға тейеш ине.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАЛА ЙӨҘӨ НИНДӘЙ БУЛЫР?



**Йыл һуңында ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Өфөнөң алдынғы архитекторҙары менән осрашты.**

Сара барышында бөгөн мегаполистың архитектура мәсьәләләрендә яңы идеяларға мохтаж булыуы билдәләнде. Ирек Ишмөхәмәт улы донъя тәжрибәһендә ҡала төҙөлөшө менән архитектурала ғына түгел, инженер селтәрҙәре, таҙартыу ҡоролмалары системалары буйынса ла уңышлы ҡулланылған миҫалдар килтерҙе. Осрашыу барышында мәҙәни-тарихи мираҫ мәсьәләләре лә ҡаралды. Әгәр 2012 йылда Өфөлә 400 мәҙәни мираҫ һәйкәле булһа, бөгөн уларҙың һаны 800.

- Мин был мәсьәлә менән илдең төрлө дүрт ҡалаһында ҡыҙыҡһындым. Стокгольмда ни бары бер ике ҡатлы ағас йорт һаҡланған. Белгестәр ағас таштай ҡатһын өсөн уға инъекция индереп тора. Миланда - кем хужа - шул яуап бирә. Беҙҙә мәҙәни-тарихи мираҫ объекттары шәхси ҡулдарҙа. Ҡағиҙә булараҡ, улар хужалары тарафынан юҡҡа сығарыла, - тип билдәләне Ирек Ялалов. Ул шулай уҡ архитектура һәйкәлдәренең хужаларына яуаплылыҡ, шул иҫәптән финанс яуаплылыҡ, индереү кәрәклеген билдәләне.

Донъя тәжрибәһе күрһәтеүенсә, ҡайһы бер урындарҙа уларҙы бөтөнләй алалар, ҡайҙалыр күсермәләрен төҙөйҙәр. "Беҙ "алтын урталыҡ"ты табырға тейеш. Яңы килгән команда менән архитектура берлеге, архитектура цехының ветерандары һәм йәштәре менән диалог ҡора алырбыҙ тип уйлайым", - тине ҡала хакимиәте башлығы. Сарала ҡатнашыусылар баш ҡаланың архитектураһы төрлө булырға тейеш, шул ваҡытта ғына ул ҡыҙыҡлы буласаҡ, тигән уртаҡ фекергә килде.

# ШИФАХАНАЛАР ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ!

**"Шифаханаларҙы хосусилаштырыу күҙалланмай. Беҙ үҙебеҙҙең йәки республика ҡаҙнаһы аҡсаһы иҫәбенә уларҙың эшен әүҙемләштереү һәм үҫтереү маҡсатын ҡуйғанбыҙ", - тип һөйләне Башҡортостан хөкүмәте вице-премьеры - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев.**

Уның билдәләүенсә, 2017 йылда төбәктәге барлыҡ шифаханалар дәүләт унитар предприятиеларҙан акционерҙар йәмғиәте йәиһә яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте тип үҙгәртелгән. Республиканың Ҡырымдағы шифаханаһын "Янғантау" шифаханаһы балансына индерергә хәл ителгән, ул, уҙ сиратында, йә филиал, йәиһә бүлендек йәмғиәт асып, уҙ иҫәбенә Ҡырымда балаларҙы дауалауҙы тәьмин итергә тейеш. "Янғантау" өсөн дә үҫеш программаһы ҡаралған: яңы корпус, ошонда эшләгән табиптар өсөн йорттар һалыу күҙаллана. Евгений Гурьев белдереүенсә, республика шифаханаларҙы үҙаллы үҫтерә ала. Бының өсөн көс тә, аҡса ла етә. Магнитогорск металлургия комбинатынан "Ҡайынҡай" шифаханаһын һатып алыу буйынса килешеү төҙөлгән, ул иһә "Яҡтыкүл" балансына ҡабул ителгән. "Башҡортостан Республикаһы өсөн был - өҫтәмә эш урындары, халыҡ, йәшәүҙән тыш, дауаланыу мөмкинлегенә лә эйә буласаҡ. Магнитогорск металлургия комбинаты һатыуҙан килгән аҡсаны Яҡтыкүлдең, Абҙаҡтың инженер структураһына, ошо комплексҡа илткән юлдарға инвестицияларға йүкләмә алды", - тип өҫтәне вице-премьер.

# ТАҒЫ ЛА ШИХАНДАР ТУРАҺЫНДА

**Йыл аҙағында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа үткән "Башҡортостан экологияһы һәм тәбиғәт ресурстары" темаһына "Хөкүмәт сәғәте"ндә парламентарийҙар республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыевҡа биргән һорауҙарҙың береһе Стәрлетамаҡ Шихандарының статусына ҡағылды.**

Ведомство етәксеһенән тәбиғәт ҡомартҡыларын сәнәғәт эшкәртеүенә тапшырыу мөмкинлеге тураһында һоранылар. "Әйтеп үтергә кәрәк, бөгөн төбәк тәғәйенләнешендәге ҡомартҡылар, уларҙың яҙмышы республика ҡулында, - тине министр. - Бер ниндәй федераль орган да Шихандарҙың яҙмышын хәл итә алмай. Республиканың ҡарашы бына шундай: улар тәбиғәт ҡомартҡылары булды, бар һәм буласаҡ. Бөгөн уларҙан ҡомартҡы статусын алыу тураһындағы һорау законға дәлилләнмәгән. Федераль, республика ҡануниәтендә тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын бөтөрөү механизмы юҡ, - тип аңлатма бирҙе Илдар Һаҙыев. - Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре һәм ҡомартҡылары өлкәһендә экологик закондар иҡтисад ҡанундарынан өҫтөн. Шуға күрә статусты алыу мөмкин түгел, эшкәртеүгә тапшырыу өсөн хоҡуҡи нигеҙ юҡ".

# ҺАУАНЫ БЫСРАТЫУСЫЛАР

**Башҡортостанда етештереүҙең һәм автомобилдәр һанының артыуы арҡаһында атмосфераға сығарып ташланған зарарлы матдәләрҙең иҫәбе артҡандан-арта бара.**

Республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы биргән мәғлүмәттәр буйынса, атмосфераға сығарылған бысратыусы матдәләрҙең дөйөм күләме 918,6 мең тонна тәшкил иткән, ул былтырғыға ҡарағанда 33,3 мең тоннаға күберәк. Зарарлы матдәләрҙең яртыһы тиерлек - сәнәғәт предприятиеларынан, икенсе яртыһы - автомобилдәрҙән. Тәбиғәтте һаҡлау ведомствоһы етәксеһе Илдар Һаҙыев Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының тәбиғәттән файҙаланыу һәм аграр мәсьәләләр буйынса комитет ултырышында төбәктә атмосфера һауаһын бысратыуҙы контролдә тотоусы тағы ике автоматик станция барлыҡҡа килеүен һөйләне. Уларҙың береһе Сипайлово "Ҡашҡаҙан" паркы биләмәһендә төҙөлә. Станция Лихачев сәнәғәт узелы предприятиеларының - "Өфө моторҙар эшләү берекмәһе", "Өфө фанера комбинаты", "Дубитель", "Өфөхимчистка", "Өфө ит-консерва комбинаты" ойошмаларының һәм башҡаларҙың һауаға ташлауын контролдә тотасаҡ. Икенсе станция Салауатта ҡала бюджеты иҫәбенә төҙөлә. Әлеге ваҡытта төбәктә дүрт аналитик контроль станцияһы урынлашҡан: икәүһе Өфөлә һәм икәүһе Стәрлетамаҡта. Киләсәктә станцияларҙың иҫәбен унға еткереү күҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөлә "112 ҡотҡарыу хеҙмәте" үҙ эшмәкәрлеген туҡтатты. Ведомствола аңлатыуҙарынса, баш ҡалалағы граждандарҙы яҡлау идарaлығы үҙгәртеп ҡоролдо: хәҙер ул - айырым муниципаль бюджет учреждениеһы. Уның составына бөтөрөлгән хеҙмәттең өс бүлеге: мәғлүмәт-диспетчер үҙәге, эҙләү-ҡотҡарыу отряды, гәҙәттән тыш фонд индерелә.

✓ Һалҡындар мәлендә баланың уҡырға барыу-бармауын, һауа шарттарына ҡарап, ата-әсә үҙе хәл итә, тип аңлаттылар Башҡортостандың Мәғариф министрлығында. 23 градус һалҡында - ауылда, 25 градуста ҡалала 1, 2, 3 һәм 4 класс уҡыусылары дәрес ҡалдыра ала. Һауа температураһы 25 градустан түбәнәйһә - ауылда, 27 градус һыуыҡта ҡалала 5-9 класс уҡыусылары өсөн дәрестәр булмай. Ауыл мәктәптәренең өлкән класс уҡыусыларына - 30, ҡаланыҡыларға иһә 32 градус һыуыҡта мәктәпкә бармаҫҡа мөмкин.

✓ Өфө тирәләй "йәшел билбау" урман-паркы барлыҡҡа киләсәк, тигән ҡарарға килделәр республиканың Дәүләт Йыйылышында. Баш ҡаланы уратып алған Өфө районында "йәшел билбау" майҙаны 1,7 мең гектар тәшкил итә. Ҡарар ҡала тирәһендә йәшел массивтар бынан алып һаҡ аҫтына булыуын күҙаллай. Уларҙа тәбиғәттән файҙаланыуға һәм хужалыҡ эшмәкәрлегенә сикләү билдәләнәсәк.

✓ Башҡортостанда 2017 йылда ауыл хужалығы йәрминкәләрендә 1 миллиард һумлыҡ аҙыҡ-түлек һатылған. Республика Ауыл хужалығы министрлығының мәғлүмәттәре буйынса, былтыр ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәр 6,7 мең тонна картуф, 2,3 мең тонна һуған, 1,3 мең тонна кәбеҫтә, 503 тонна кишер, 285 тонна сөгөлдөр, 700 тоннанан ашыу бал, 1,6 мең тонна ит (978 тонна һыйыр ите, 511 - сусҡа ите, 115 - йылҡы ите, 94 - һарыҡ ите), 300 тонна самаһы ҡош ите һатҡан.

✓ Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы Бөрйән район хакимиәте, Урал арьяғы агросәнәғәт колледжы, "Мәргән уҡсы" төркөмә, Бөрйән районының мәҙәниәт бүлеге менән берлектә 27 ғинуар көнө "Урал батыр байрамы"н үткәрә. Белешмә өсөн телефондар: 8 (34755) 3-60-33, 8-927-303-24-00, 8-927-938-65-75.

✔ *Мохтаж ғаиләләргә әсәлек капиталын айлыҡ түләүҙәр рәүешендә лә алып тороу мөмкинлеге тыуҙырыласаҡ", - тине ил етәксеһе. Был мәсьәләне шулай уҡ адреслы хәл итеү ҡарала.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҒАИЛӘ МӘНФӘҒӘТЕ - ҮҘӘКТӘ



**Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо көндәрҙә генә Балалар мәнфәғәтендә милли стратегиялар ғәмәлен бойомға ашырыу буйынса Координация советы ултырышында ғаиләләргә ярҙам һәм тыуымды арттырыу буйынса яңы саралар хаҡында белдерҙе.**

2018 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә социаль түләүҙәрҙең яңы төрө - **тәүге балаһы тыуған ғаиләләргә пособие** барлыҡҡа килде һәм ул ай һайын, балаға 1,5 йәш тулғансы түләнәсәк. Пособиеның күләме, В. Путин белдереүенсә, ил буйынса 10,5 мең һум тәшкил итәсәк һәм баланың һәр төбәктә билдәләнгән йәшәү минимумына тигеҙ. Шуныһын да әйтергә кәрәк, бындай адреслы түләүҙәрҙе һәр бер ғаилә лә ала алмаясаҡ. Президент әйтеүенсә, "Тәү сиратта ысынлап та иң мохтаждарҙы хәстәрләү ғәҙел булыр".

Тәүге балаға пособиены йән башына уртаса килем күләме эшкә һәләтле кешеләрҙең бынан алдағы йылдың икенсе кварталындағы йәшәү минимумынан (ә уның күләме урындағы төбәк властары тарафынан билдәләнә) 1,5 тапҡырҙан артмаған ғаиләләр ала. Айлыҡ түләүҙең үҙенең хаҡы балаларҙың бынан алдағы йылдың икенсе кварталындағы йәшәү минимумына тигеҙ. Дөйөм алғанда, 2017 йылдың II кварталында ил буйынса эшкә яраҡлы халыҡтың йәшәү минимумы 11 163 һум, ә балаларҙыҡы 10 160 һум булды. Президент һүҙҙәре менән әйткәндә, 2018 йылда илдә был пособиеның уртаса күләме - 10 523 һум. 2019 йылда - 10 836 һум, 2020 йылда 11 143 һум буласаҡ, тип көтөлә. Тағы ла шуныһы: пособиеға тәүге балаһы 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған ғаиләләр генә өмөт итә ала.

Шул уҡ ваҡытта В. Путин 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң икенсе йәки өсөнсө балаһы тыуған ғаиләләр өсөн **ипотеканың социаль программаһын** булдырырға тәҡдим итте. Беренсел баҙарҙа торлаҡ һатып алған йәки элек алынған ипотека кредиттарын ҡайтанан ҡарағанда бындай ғаиләләр йыллыҡ процент ставкаһының 6 проценттан ашыуын дәүләт субсидиялауына эйә була ала.

Ултырышта сығыш яһап, Рәсәй Президенты **балалар поликлиникаларының торошо** мәсьәләһенә лә туҡталды һәм хөкүмәтте, шулай уҡ төбәктәр властарын балалар поликлиникаларын, дауаханаларҙыҡын да иҫәпкә алып, ҡайтанан яңыртып төҙөү һәм капиталь йүнәтеү графиктарын тиҙ арала эшләргә саҡырҙы. Уның иҫәпләүҙәренсә, балалар поликлиникаларын төҙөү, ремонтлау һәм ҡорамалдар менән тәьмин итеү өсөн 50 миллиардтан ашыу самаһы аҡса кәрәк буласаҡ. Был мәсьәләне төбәктәр үҙ көстәре менән генә атҡарып сыға алмаясаҡ, тине ил етәксеһе. "Шуның өсөн яҡындағы өс йылда ошо сумманың төп өлөшөн, йәғни йыл һайын 10-ар миллиардлап, федераль бюджет тәьмин итәсәк," тип белдерҙе В. Путин.

Шул уҡ ваҡытта Президент киләһе йылда тамамланырға тейеш булған **әсәлек капиталы программаһын 2021 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыу** хаҡында ла белдерҙе һәм уны файҙаланыуҙа өҫтәмә мөмкинлектәр булдырыу хаҡында ла әйтеп китте. "Ныҡ мохтаж ғаиләләргә әсәлек капиталын айлыҡ түләүҙәр рәүешендә лә алып тороу мөмкинлеге тыуҙырыласаҡ", - тине ил етәксеһе. Был мәсьәләне шулай уҡ адреслы хәл итеү ҡарала. Бынан тыш, Әсәлек капиталын хәҙер мәктәпкәсә белем биреү хеҙмәттәренә түләүгә, йәғни сабыйҙы ике айлыҡ сағынан ҡарауға тотонорға була. "Бындай сараға ихтыяж ҙур икәнен беләм, сөнки ул сакта, мәҫәлән, әсә кеше эшен йәки уҡыуын дауам итә аласаҡ", - тип асыҡлыҡ индерҙе В. Путин.

ҺӘМ ТАҒЫ...

# ЭШЛӘМӘГӘН ПЕНСИОНЕРҒА - социаль өҫтәмә



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында 2018 йылға пенсияға социаль өҫтәмә күләмен билдәләү маҡсатында Башҡортостан пенсионерының йәшәү минимумы күләме 2017 йылғы 8 015 һум урынына 8 320 һум итеп раҫланды.**

1 ғинуарҙан республиканың эшләмәгән 146 меңдән ашыу пенсионеры пенсияһына федераль социаль өҫтәмәне яңы күләмдә аласаҡ. Шуларҙың 7 меңе бындай өҫтәмә хоҡуҡҡа тәүгә эйә була. Өҫтәмә түләүҙең был төрө бер ҡайҙа ла эшләмәүсе пенсионерҙарға 2010 йылдың 1 ғинуарынан булдырылғайны. Социаль өҫтәмәнең күләме һәр пенсионер өсөн айырым һәм ул һәр кемдең матди тәьминәт кимәле ( пенсияһын һәм бөтөн өҫтәмә түләүҙәрҙе ҡушып) пенсионерҙың йәшәү минимумы күләменән күпмегә кәм булыуына бәйле.

2018 йылдың 1 ғинуарынан социаль өҫтәмә тәғәйенләү өсөн ғариза был хоҡуҡҡа тәүгә эйә булыусылар тарафынан ғына яҙыла һәм ул пенсияны алған урындағы Пенсия фондына былтыр декабрҙә тапшырылырға тейеш ине, сөнки социаль өҫтәмә уға ғариза яҙылған айҙан һуңғы айҙың тәүге көнөнән иҫәпләнә. Социаль өҫтәмә18 йәше тулмаған йәштәге пенсия алыусыларға бындай ғаризалар яҙмаһа ла тәғәйенләнәсәк.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, былтырғы 10 ай эсендә социаль түләүҙәр өсөн федераль бюджет сығымдары 2 млрд 456 млн һум тәшкил итте.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ҠЫҪҠАСА

# МАШИНАҢДЫ ГАЗҒА КӨЙЛӘ!

✔ **1 ғинуарҙан Башҡортостанда газ-мотор яғыулығындағы автомобилдәр өсөн транспорт һалымы буйынса ташламалар күләме арттырылды.** Хәҙер ул элекке 20% урынына 50% тәшкил итә. Автопаркының "йәше" уртаса 10 йылдан уҙмаған ойошмалар ташлама менән ҡуллана ала. Был ташлама экологик транспорт хужаларына ла ҡағыла, тик газда бер нисә машина булған осраҡта берәүһенә генә льгота бирелә. "Рәсәй транспорты" форумы даирәләрендә (2017 йылдың декабрендә Мәскәүҙә үтте) Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала газ тултырыу станциялары селтәрен үҫтерергә кәҙаллауҙы белдергәйне. Хәҙер улар 15, уларҙың 4-һе Өфөлә. Экологияны һиҙелерлек итеп яҡшыртыу өсөн газ баллонлы транспорт өлөшөн кәмендә 10% еткерергә кәрәк, тип билдәләне төбәк етәксеһе.

✔ **Рәсәйҙең Юстиция министрлығы илдең Мәғариф һәм фән министрлығының 2018 йылда берҙәм дәүләт имтиханын, дәүләт сығарылыш имтиханын һәм төп дәүләт имтиханын уҙғарыу теҙмәһен раҫлаған бойороғон теркәне.** Бойороҡҡа ярашлы, быйыл берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу - 21 марттан 11 апрелгә тиклем, төп этап - 28 майҙан 2 июлгә ҡәҙәр һәм өҫтәмә этап 4-нән 15 сентябргә тиклем дауам итә. Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда биреү һәм төп этаптар география, информатика һәм МКТ буйынса һынауҙарҙан башлана. 9 класс уҡыусылары ла төп дәүләт имтиханын ваҡытынан алда (20 апрелдән 8 майға ҡәҙәр), төп (25 майҙан 29 июнгә тиклем) һәм өҫтәмә этапта (4-22 сентябрҙә) тапшыра ала. 2018 йылда рус теленән һәм математиканан насар билдә алған мәктәп тамамлаусыларға өҫтәмә осорҙа (4-15 сентябрҙә) үткәрелгән имтиханда ҡатнашыу мөмкинлеге бирелә.

✔ **Ғинуар айында страховка пенсияһының уртаса күләме арттырылғандан һуң 13 423 һумға етте.** 1 ғинуарҙан страховка пенсияһы, шул иҫәптән эшләмәгән пенсионерҙарҙың билдәләнгән түләүе 3,7 процентҡа индексацияланды. Индексациялауҙан һуң билдәләнгән түләүҙең күләме айына 4 982,9 һум тәшкил итә, пенсия балының хаҡы - 81,49 һум (2017 йылда - 78,58 һум).Республика пенсионерҙары 3 ғинуарҙан арттырылған пенсия ала башланы. 12 ғинуарҙан, килешеүҙәрҙә билдәләнгән срокта, пенсиялар һәм социаль түләүҙәр халыҡтың иҫәбенә кредит ойошмалары аша күсерелә, тип өҫтәнеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.

✔ **2022 йылға ипотека кредитлауы ставкаһының йылына 6 процентҡа тиклем төшөүе ихтимал, тип белдерҙе Рәсәйҙең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Михаил Мень.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 10 ғинуарҙа Рәсәй Хөкүмәте 2018 йыл башынан 2022 йылдың аҙағына тиклемге осорҙа заемсыларҙың икенсе йә иһә өсөнсө балаһы тыуғанда өс йәки биш йыл дауамында ипотека буйынса ставканы 6 процентҡа тиклем субсидиялау ҡағыҙҙәрен раҫланы. Программа беренсел баҙарҙа торлаҡ һатып алғандарға һәм элекке кредиттарын рефинансларға теләгәндәргә ҡағыла. Михаил Мень һүҙҙәренсә, ставканы субсидиялау программаһында 620 мең ғаиләгә ҡатнашыу мөмкинлеге бар. 730 ғаилә булған ипотека кредитын рефинанслай ала.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һары мәтрүшкә майын үҙең яһа

❖ Яңы ғына йыйған мәтрүшкә сәскәләрен банкаға тултырырға, өҫтөн ҡаплағансы үҫемлек йә зәйтүн майы ҡойорға ла тәҙрә төбөнә ҡояшҡа ҡуйып, ҡуйы ҡыҙыл төҫкә ингәнсе торорға. Ике аҙнанан һуң һөҙөп алып, һалҡын урынға ҡуйырға. Был май бешкән урынды, яраларҙы тиҙ төҙәлтә, тимерәүҙән дә файҙаһы ҙур. Муйын ауыртҡанда майҙы йылытып бәйләп, өҫтөнән яулыҡ йәки шәл менән ҡаплап һауығырға була.

## Боҙ менән ышҡы

❖ Баш бармаҡ менән имән бармаҡ араһын боҙ менән ышҡығыҙ, иплләп кенә массаж яһағыҙ. Шул рәүешле теш һыҙлауы ла, урт ауыртыуы ла бөтәр.

## Ангина

❖ Яран гөлө майының составындағы фитонцидтар танау тонғанда, йүткергәндә яҡшы ярҙам итә. Быны өсөн эфир майын есҡәргә кәрәк. Үҫеп ултырған яран гөлөнөң япраҡтарын өҙөп алып, ҡул менән иҙеп есҡәһәң дә була.

## Алма һуты эс

❖ Ҡан баҫымы юғары булған кешеләргә алма һутын һығып көн дауамында эсеү килешер, баҫым тиҙ уҡ нормаға килер.

## Күҙҙәр кипһә

❖ Оло йәштәге кешеләрҙә йыш күҙәтелгән был ауырыу менән эш кешеһе лә яфаланырға мөмкин. Был осраҡта өйҙә һәм эш урынында һауаны бер аҙ дымландырып торорға кәрәк. Күҙ кибеүенә сәбәп булған дарыуҙарҙы алмаштырырға, эштә ярты сәғәт һайын өс минутҡа тәнәфес яһарға һәм шул саҡта тәҙрәгә ҡарап, күҙҙәрҙе йомоп та ултырырға. Табибҡа күренергә лә онотмағыҙ.

## Танау тонһа

❖ Ҡулдарҙы терһәккә тиклем 10-15 минут йылы һыуға тығығыҙ.

❖ Вьетнам бальзамын күрһәтмәһен уҡып, танау ситтәренә, әҙ генә эсенә һөртөгөҙ.

❖ Танау ситтәренә баҡыр аҡса ҡуйығыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Өхөд һуғышы

Өхөд һуғышында мосолмандарҙың етмешкә яҡын яугиры һәләк була, ике йөҙләгән кеше яралана. Ҡөрәйштәрҙән егерме дүрт кеше үлә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәҙинәгә ҡайтыу менән өммәтен йыйып ала ла, телмәр тота. Мосолмандарға ул уның үлеме тураһында ишетеү менән ҡаса башлауҙарына үпкә һүҙҙәре әйтә. Мосолмандар Мөхәммәт бәйғәмбәр өсөн түгел, Ислам дине өсөн һуғышырға тейеш, ти ул. Ә ул үҙе, бәйғәмбәр булһа ла, башҡалар кеүек үк ябай кеше һәм башҡаларҙыҡы кеүек үк Илаһи китапта уның фани ғүмеренең тамамланыр көнө билдәләнгән. Мосолмандар иһә ул йән биргәндән һуң да Ислам тәғлимәтен таратыу эшмәкәрлеген дауам итергә тейеш. Еңелеү иһә мосолмандарҙың матди байлыҡҡа ҡыҙығыуҙары арҡаһында барлыҡҡа килде. Тау башындағы уҡсылар дошмандан ҡалған байлыҡ тураһында уйламаһа, үҙ урындарын ташлап китмәҫ ине. Ләкин мәрхәмәтле Алла мосолмандарҙы был юлы һынап ҡына ҡараны, шуға ла тулыһынса ҡыйралыуға юл ҡуймады, тип һөйләй Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Уның һүҙҙәре хаҡ була. Ысынлап та, бөтөн мосолмандар ҙа баһадир Хәмзә, Ҡөзмән, Ғәли кеүек, табыш өсөн түгел, ә еңеү өсөн һуғышһа, һәр береһе еңеү өсөн үҙ ғүмерен йәлләмәһә, уҡсылар үҙ урынынан китмәһә, был яуҙа мосолмандарҙың һөжүмен бер ниндәй көс тә туҡтата алмаҫ ине. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең был вәғәзен тыңлаған мосолмандарҙың күңелдәрендә яңынан көрәш сәме арта һәм еңеүгә ынтылыш көсәйә.

### Әмир, нәҙир ырыуҙары менән көрәш

Өхөд һуғышынан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр яратҡан олатаһын - баһадир Хәмзәне ерләй. Яу барышында уны Вәхши исемле ҡара тәнле ҡол үлтерә. Вәхшиҙең хужаһы уға Хәмзәне үлтергән осраҡта азатлыҡ вәғәҙә итә. Яу барышында Вәхши Хәмзәне тиң алышта еңә. Баһадир Хәмзәнең кәүҙәһе лә, был яуҙа һәләк булған башҡа мосолмандарҙыҡы кеүек үк, зәғифләндерелгән була, мәжүсиҙәр уның йөрәген дә ҡырҡып алып, ситкә ташлап китә.

Өхөд һуғышынан һуң дүрт ай үткәс, 625 йылдың июль айында, Мөхәммәт бәйғәмбәр янына әҙәл һәм әл-ҡара ырыуҙарының илселәре килә. Был илселәр үҙ ырыуҙаштарының Ислам динен ҡабул итергә әҙер булыуҙары, тик уларға был тәғлимәттең ҡанундарын һәм ҡағиҙәләрен аңлатыусы, шулай уҡ Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡырға өйрәтеүсе белгестәр кәрәклеге тураһында хәбәр итәләр. Мөхәммәт бәйғәмбәр алты өммәттәшен уларға эйәртеп ебәрә. Тик юлда был илселәр мосолмандарҙың үҙҙәрен генә ҡалдырып китәләр ҙә, был турала шунда уҡ ҡөрәйштәргә дуҫ, ә мосолмандарҙың ҡан дошманы булған хузайл ырыуына хәбәр итәләр. Хузайл яугирҙары килеп етеп, мосолмандарҙы ҡамап алалар. Мосолмандарға яуһыҙ бирелеп, ғүмерҙәрен һаҡлап алып ҡалырға тәҡдим ителәә. Ләкин яу әсиргә эләгеүгә ҡарағанда, намыҫ менән үлеүҙе артыҡ күрә һәм еңеүгә бер ниндәй ҙә өмөт булмауға ҡарамаҫтан, ҡоралға йәбешә. Өсөһө шунда уҡ һәләк була, ҡалған өсәүһен иҫәңгерәтә һуғалар ҙа, бәйләп, Мәккәгә алып китәләр. Юлда уларҙың береһе, аңына килеп, бәйҙән ысҡына. Шунда уҡ яугирҙарҙың береһенә ташланып, ҡоралын тартып ала. Телегәнә ирешә ул, ҡулына ҡорал тотҡан килеш, дошмандарына ҡаршы һуғышып, һәләк була. Тороп ҡалған ике мосолманды Мәккәгә алып килеп, яуҙа һәләк булған ҡөрәйштәрҙең туғандарына бик ҙур аҡсаға һаталар. Уларҙың икеһен дә Ҡәғбә янында язалап үлтерәләр. Был язаны күҙәтеп торған Әбү Суфияндың да, башҡа ҡөрәйштәрҙең дә мосолмандарҙың яза ваҡытында үҙҙәрен бик тыныс тотоуы, Ислам диненә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәргә булған тоғролого хайран ҡалдыра.

(Дауамы бар).

АФАРИН!

# ТУҒАН ТЕЛЕҢДЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



(Башы 1-се биттә).

Башҡорт теленән төбәк-ара олимпиада туған телен белеү кимәлен һынарға килгән уҡыусы өсөн тулҡынландырғыс, ҙур яуаплылыҡ талап иткән бәйге. Өс этаптан торған олимпиадала улар инша, тест һорауҙарына яуаптар яҙа, әҙәби текстҡа анализ яһай. Элегерәк балаларҙың телмәр оҫталығын һынау маҡсатында өсөнсө этапта шиғыр һөйләү, баһалама ағзаларының башҡорт халҡының әҙәбиәте, мәҙәниәте, тарихы буйынса һорауҙарына телдән яуап биреү талабы ҡуйыла ине. Ҡыҙғанысҡа күрә, хәҙер һәр бала менән былай күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеү, фекер алышыу, танышыу тәртибе юҡ. Бына ошо йәнле аралашыу мөмкинлеге биргән этап менән бергә, ни өсөндөр, олимпиаданың ҡото киткән кеүек тойолдо. Беҙ бит балалар көндәлек тормошта тиҫтерҙәре менән дә, ғаиләһендә лә башҡортса һөйләшһен, тип телəйбеҙ. Шуға, был олимпиадала ҡатнашҡан үҫмерҙәр өсөн тәү сиратта башҡорт әҙәби телендә шыма һөйләй белеү оҫталығы мөһим булырға тейештер. Хәйер, был турала быйылғы ҡатнашыусылар үҙҙәре лә әйтте. Сөнки улар араһында шиғыр һөйләү конкурстарында, "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын яттан һөйләү конкурстарында әүҙем ҡатнашҡан талантлы балалар күп ине. Шуларҙың береһе, Ишембай ҡалаһындағы Башҡорт кадет корпусының ун беренсе синыф уҡыусыһы Әлфиә Ғайсина ярыштың әһәмиәте тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашты: "Олимпиада республика өсөн мотлаҡ кәрәк, сөнки ул туған телебеҙгә һөйөү, рухыбыҙҙы һәм илһөйәрлегебеҙҙе арттыра. Мин төбәк-ара кимәлендә өсөнсө йыл рәттән көсөмдө һынайым, ике тапҡыр призер, бер тапҡыр еңеүсе булдым. Олимпиадала ҡатнашыу маҡсатында башҡорт телен ныҡлап өйрәндем, хәҙер үҙем башҡаларҙы өйрәткем килә, уҡытыусы булырға хыялланам", - тине ул.

Күңелдәрендә бындай хыял йөрөткән үҫмерҙәр менән олимпиада үткән көндәрҙә Башҡорт дәүләт университеты һәм М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессорҙары, яҙыусылар һәм шағирҙар махсус осрашты. "Үҙем йәшәгән осорҙоң билдәле шәхестәре менән ошолай осрашып, уларҙың абруйлы һүҙен тыңлап ултыра алыуыма бик ҡыуанам, - ти Сибай ҡалаһы "Ирәндек" лицейының 11 синыф уҡыусыһы Ләйсән Ғибәҙуллина. - Улар туған телде үҙебеҙ һаҡларға тейеш булғанды тағы бер ҡат иҫкә төшөрҙө, шиғыр уҡыны, юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен артабан өйрәнеп, ҡайҙа эшкә урынлашырға, ниндәй йүнәлештә үҫешергә мөмкин булыуы тураһында ентекле һөйләне".

Башҡорт теле буйынса олимпиада 9-11 синыф уҡыусыларын бергә туплаған сара, бында һәр ҡыҙыҡһындырған һорауға ололарса етди яуап ишетергә мөмкин. Был юлы бик күптәргә "Башҡорт телен ғаиләләме, әллә мәктәптә өйрәтергә кәрәкме?" тигән һорау менән мөрәжәғәт итеп, бөтәһенән дә тиерлек "Тәү сиратта, ғаиләлә атаәсәләр балалары менән башҡортса һөйләшергә тейеш. Беҙҙең ғаиләлә шулай итәләр", - тигән яуап алыуы күңелгә май булып яғылды. Бигерәк тә Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләренән килгән милләттәштәрҙең ошо һүҙҙәрҙе әйтеүен ҙур ҡыуаныс менән ҡабул иттек. Быйыл олимпиадаға сит өлкәләрҙән барлығы ун өс уҡыусы килгәйне, улар араһында Ырымбур өлкәһе Тәйләгән районынан Аллабирҙе урта дөйөм белем биреү мәктәбенең 9 синыф уҡыусыһы Гүзәл Мөхәмәтшина беренсе урын яуланы. Шулай уҡ яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеүсе Ҡурған өлкәһе "Сәләймән урта дөйөм белем биреү мәктәбе" учреждениеһы филиалы Надеждино төп дөйөм белем биреү мәктәбенең 9 синыф уҡыусыһы Рәмил Талипов менән әңгәмәләшкәндә ул: "Башҡорт теленән дәрестәр беҙҙә беренсе синыфтан алып уҡытыла. Ғаиләлә лә башҡортса һөйләшкәс, олимпиадаға әҙерләнеү артыҡ ауыр булманы. Урыҫ мөхитендә йәшәгәс, беҙҙең башҡорт телен белеүебеҙҙе ғәҙәттән тыш нәмә итеп ҡабул итәләр. Ә мин уны үҙебеҙҙең тел булған өсөн белергә кәрәк, тип һанайым", - тип һөйләне.

Әйткәндәй, быйылғы олимпиадала туғыҙынсы синыф уҡыусылары араһында Әлшәй районы М. Буранғолов исемендәге Башҡорт лицейы уҡыусыһы Әлиә Хөсәйенова, Туймазы ҡалаһының 6-сы һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы Дилара Ғабдрафиҡова, Баймаҡ районы Түбә ауылы урта мәктәбе уҡыусыһы Маргарита Александрова беренсе урын яуланы. Унынсы синыф уҡыусылары араһында ошондай уҡ тәртип буйынса шулай уҡ өс айырым еңеүсе асыҡланды: Сибай ҡалаһы гимназия-интернаты уҡыусыһы Алтынай Мусина, Илеш районы Бишҡурай ауылы мәктәбе уҡыусыһы Айнур Ғилманов, Баҡалы районы Баҡалы ауылы 1-се мәктәбе уҡыусыһы Лиана Павлова. Ә бына 11 синыф уҡыусылары араһында иң юғары баһаға Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө Башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Илназ Әхмәтшин, Ҡариҙел районы Байҡыбаш мәктәбе уҡыусыһы Ынйы Хәертдинова, Октябрьский ҡалаһы 9-сы һанлы мәктәбенән Илина Бабенко лайыҡ булды.

- Мин Башҡорт теле буйынса төбәк-ара олимпиадала өсөнсө тапҡыр ҡатнашам һәм ниһайәт, быйыл маҡсатыма ирештем - беренсе урын алдым. Был еңеүҙе яулау өсөн етенсе синыфтан алып әҙерләндем, тырышлығым бушҡа булманы. Киләсәктә лә тап ошо предмет менән бәйләргә, тел өйрәнеү йүнәлешендә уҡырға ниәт итәм, шуға шатмын, - тип һөйләне Илназ Әхмәтшин. - Быйыл мин иншаны Р. Ғарипов ижады буйынса "Тормош беҙҙе артыҡ шаяртманы" темаһына яҙҙым. Тест һорауҙарына яуапты ла еңел таптым, текстҡа анализды Әхиәр Хәкимовтың әҫәренән килтерелгән өҙөк буйынса эшләнем. Әйткәндәй, текстҡа анализ яһағанда быйыл биремдәр булманы, шуға һәр кемдең белеме тулыһынса тикшерелде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле буйынса төбәк-ара олимпиада еңеүселәрен тәбриклəү тантанаһында БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, уның урынбаҫары Гүзәл Шаһиева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты секторы мөдире Рәйсә Күзбәкова, баһалама комиссияһы ағзалары булған шәхестәр ҡатнашты. РБ мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова дәртле бейеү көйө аҫтында сәхнәгә сыҡҡан уҡыусыларға маҡтау ҡағыҙҙары тапшырҙы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты әҙерләгән иҫтәлекле бүләктәр беренсе урын алған уҡыусыларға бирелде.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

*ТАРИХИ СЫҒАНАҠ*

**Башта автор тураһында белешмә. И.Г. Георги 1729 йылда Трептов ҡалаһы янындағы ҙур булмаған Ваххгольцхаген ҡаласығында, протестант динле рухани ғаиләһендә тыуған. Штеттин ҡалаһындағы урта мәктәпте тамамлағас, үҫмер егет Упсаль университетында химия, медицина, минерология, ботаника, география фәндәрен тәрәндән өйрәнә. Университетты тамамлағандан һуң, үҙенең тыуған ҡалаһына фармацевт булып ҡайта. 1770 йылда Георгиҙы Петербург Фәндәр академияһына академик экспедицияларҙа ҡатнашырға саҡыралар. Ул И.П. Фальк менән берлектә, бер нисә йыл буйы Рәсәй регионлары буйлап халыҡтарҙың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнергә ғилми экспедицияға сыға. Башҡортостанда ла булырға тура килә. Башҡорт халҡын ентекләп өйрәнгәндән һуң, Георги, үҙенең ғилми эштәре араһына "Башҡорттар" исемле очеркын да индерә. Һеҙҙең иғтибарға ошо очерктан өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

# БАШҠОРТТАР



«Башкирка». И.Г. Георги «Описание всех обитающих в Российском государстве народов». - СПб.: при Имп. Акад. наук, 1799.

Башҡорттар борон үҙҙәрен генә түгел, нуғайҙарҙы ла башҡорт тип атаған. Үҙҙәренең аңлатыуынса, был исем ҡорт, бал ҡорто атамаһынан, ә нуғайҙар, бүре һүҙенән килеп сыҡҡан, тип иҫбатлай. Ҡырғыҙҙар уларҙы истәк, йә булмаһа, үтәк тиғән.

Ҡайһы бер яҙыусылар башҡорттарҙы нуғайҙарҙан, икенселәре уларҙы боронғо болғарҙарҙан килеп сыҡҡан тип тә раҫлай. Әбүл Ғәзи Болгарияны Дәште Ҡыпсаҡ тип атай. Ҡыпсаҡ улысы Башҡортостанда бөгөнгө көндә лә бар. Бәлки, улар, ысынлап та, ҡыуылған болғарҙарға һыйынған нуғайҙарҙыр. Ләкин бер ҙә татарҙарға оҡшамағандар. Ҡарттар йәшәгән ерҙәрен Башҡорт йә Пашҡатыр ере тип атай, был боронғо Болғар ере була инде. Боронғо заманда улар үҙҙәренең хандары етәкселегендә Көньяҡ Себер буйҙарын гиҙгән. Ләкин, Себер яғы хандары уларҙы ҡыҫырыҡлағанға күрә, Волга һәм Урал буйҙарына килеп, ошонда таралып, Ҡазан ханлығы аҫтында йәшәй башлаған.

Хәҙерге Башҡортостанға Урал тауҙарының көньяғы инә. Был тау буйындағы ерҙәр уңдырышлы ҡара тупраҡҡа, урманға, балыҡлы йылғакүлдәргә бик бай. Ул электән Ҡазан, Себер һәм Нуғай даруғаһына бүленгән.

Рус дәүләте батшаһы Иван Васильевич Ҡазан батшалығын ҡыйратҡандан һуң, башҡорттар үҙ теләктәре менән Рәсәйгә ҡушылды һәм, рус дәүләте ҡушыуынса, Өфө ҡалаһын төҙөнө. Ошонан һуң улар йыш ҡына Рәсәй дәүләтенә ҡаршы баш күтәрҙе, бигерәк тә 1676, 1708, 1735 йылдарҙы әйтеп китмәү мөмкин түгел. Рәсәй дәүләте йыш ҡына болаларҙы баҫтырып торҙо. Бынан һуң башҡорттар көсһеҙләнде, ләкин күпмелер ваҡыттан аяҡҡа баҫҡас, тағы ла баш күтәрә ине. Рус батшаһы Башҡорттарҙың фетнәһенә ҡаршы торор өсөн Башҡортостан ерлегенә ҙур булмаған ағас ҡәлғәләр төҙөттө. Был атта һыбай көйө генә һүғышҡан башҡорттар төркөмөнә ҡаршы тора алырлыҡ ине. 1774 йылда, алдан йыш ҡына ризаһыҙлыҡ белдереп торған башҡорттар, ҙур бер төркөмгә йыйылып баш күтәрҙе, ләкин, еңелгәндән һуң улар Рәсәй дәүләтенә кире баш эйҙе.

Башҡортостан ере улыстарға бүленә, ҡайһы бер улыстар үҙ-ара аймаҡтарға берләшеп йәшәй һәм, билдәле бер кимәлдә, ер менән идаралыҡ итә. Уларҙың боронлан инде хандары юҡ. Хатта дворяндары ла бик аҙ ҡалған, баш ихтилалдарҙан һуң улар күпкә кәмегән. Ул осорҙа һәр улыс үҙҙәренең араһынан бер йә бер нисә старшина һайлап, үҙҙәренә башлыҡ итеп ҡуя. Һәр старшинаға Ырымбур губернаһы канцелярияһынан, мишәрҙәр тарафынан хаттар, указдар һәм башҡа ҡағыҙҙар бирелә. Старшина был хаттарҙы халыҡҡа уҡып, аңлатып ҡына ҡалмай, ҡушылған эштең үтәлеүенә лә яуаплы. Улар бөтәһе 34 улыстан, һәм 1770 йылда иҫәпләнеүенсә, 27000 аймаҡтан тора.

Башҡорттар йәҙгә бер аҙ татарҙарға оҡшай, ләкин бер аҙ яҫыраҡ йөҙлә. Күҙҙәгә лә улар мыҡтыраҡ. Ҡолаҡтары ҙурыраҡ, күҙҙәре бәләкәй, ирҙәре һары һаҡаллы. Улар тәбиғәт тарафынан иҫ киткес аҡылға эйә, шулай уҡ уларға үҙһүҙлелек, саялыҡ, ышанмаусанлыҡ, ҡырыҫлыҡ та хас. Шул яғы менән ҡурҡыныс был халыҡ...

Телдәре татар теленә оҡшаш, ләкин Ҡазан яҙмалары менән бөтөнләй тап килмәй. Уҡытыу эштәре лә бында ул тиклем алып барылмай. Сөнки дин әһелдәрен, уҡытыусыларҙы үҙҙәренең араһынан һайлап ҡуялар.

Һәр ғаиләгә һалым һалына. Улар аҡсалата ғына түгел, ниндәйҙер кимәлдә бал, кәрәҙ һәм башҡа кәрәк-яраҡ йыйып тапшырып торорға тейеш була. 1741 йылда баш күтәреүҙәр баҫтырылғас, башҡорттарға ла, казактар кеүек, ил сигендә хеҙмәт итеү, хеҙмәткә үҙ аттары, кейем-һалым, ҡорал кәрәк-яраҡтары менән барыу ҡаралған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, башҡорттарға, казактарға ҡараған кеүек, нәфрәт менән ҡарағандар. Тоҙ өсөн һалымдан азат ителгәндән һуң, улар, элекке кеүек тоҙҙо йылға буйҙарынан бушлай түгел, ә хөкүмәттән һатып алырға тейеш була.

Хәрби хеҙмәткә үҙҙәренә старшина, унбашы, иллебашы, йөҙбашы һ.б. һайлай. Ә уларға полк башлыҡтары итеп Рәсәй етәкселәре старшиналарҙың иң яҡшыларын ғына һайлап ҡуя.

Башҡорт яугирҙарының һәр береһе үҙенең яу кейеме һәм ҡоралы менән хеҙмәткә бара. Башҡа яугирҙар походҡа ҡылыс, мылтыҡ йә пистолет менән сыҡһа, башҡорт батыры уҡ-ян, һөңгө, тимерҙән баш кейеме, ҡыйбатлы һәм ауыр дүңгәләктәрҙән яһалған тимер күлдәк (бөтәһендә лә булмаған), айыу йә башҡа хайуан тиреһенән яһалған, илле уҡ һыйҙырышлы уҡ һауыты һ.б. яу кәрәк-ярағы менән барған. Уларҙың аттары ла сыныҡҡан һәм өйрәтелгән була. Башҡорт егеттәре атта сабып барышлай уҡтан мәргән ата. Улар аҙ һанлы булһалар ҙа, юлда осраған үҙҙәренән күпкә артығыраҡ ҡырғыҙҙарҙы ҡыйрата алған. Башҡорт ғәскәрҙәре ашау яғына запасһыҙ һәм башҡа кәрәкле әйберҙәрһеҙ оҙаҡ ваҡыт юлда йә ҡырғыҙ далаларында йөрөй алған. Шуға күрә лә рус етәкселәре карауандарҙы талаусы ҡырғыҙҙарға ҡаршы башҡорттарҙы ебәрергә тырышҡан. Башҡорт һуғышсыларының ҡылыҡтары улар өсөн сәйер тойола. Һәр башҡорт һуғышсыһы ниндәй кейем тегеп кейә ала, шул кейемдә йөрөй. Үҙҙәре менән аттарына тағып киптерелгән икмәк ҡатылары, алып йөрөй алғанса, талҡан һ.б. әллә ниндәй ризыҡтар йөрөтә. Һәр йөҙбашының үҙ тамғаһы була. Ләкин һыбайлылар отрядҡа теҙелеп хәрәкәт итмәй. Ялға туҡтағанда ғына һәр кем үҙ отряды менән бергә була.

Башҡорт халҡы Рәсәй дәүләтенә ҡушылғанға тиклем һәм ҡушылғандан һуң да күсмә тормош алып бара. Бик һирәктәре генә ер эшкәртеү менән шөғөлләнә. Улар ҡышын ағас өйҙәрендә йәшәһә, йәй көнө ҡыр тирмәләрҙә йәшәй.

Ҡышҡылыҡҡа ауылдарын һыу буйына төҙөгәнгә ҡарағанда, ағаслыҡ эсенә төҙөүҙе яҡшыраҡ күрәләр. Шуға ла уларға ҡышын ҡар һыуын иретеп эсергә тура килә. Ауылдарҙа 10-дан алып 50-гә ҡәҙәр өй була. Былдағы өйҙәр бүрәнәләрҙән төҙөлгән. Урындыҡ аҫты йыш ҡына йәш мал тотоу өсөн ҡулланыла. Мейес балсыҡ менән һылана ла, һайғауҙар менән уратып алына. Мейескә суйын ҡазан беркетелә. Ишектәр бик тәпәш, хатта сүкәйеп үтергә кәрәк, ә тәрәләргә хайуандарҙың ҡарынын йә майға манылған сепрәк һуҙып элелә. Һәр йортто ҙур булмаған дүрт мөйөшлө келәте була. Әгәр ҙә инде йәшәгән урындарына ҡарағанда башҡа урын нығыраҡ оҡшай икән, әйберҙәрен йыйлар ҙа, шул урынға күсенәләр. Ниндәй старшинаның кешеләре күсә, был урынға шул старшинаның исеме бирелә, мәҫәлән, Солтанов, Әхмәтов һ.б.

Йәйге йәйләүҙәрҙә 5-тән алып 20 тирмәгә тиклем тирмә ҡорола. Ҙур ауылдар бер нисә йәйләүгә бүленә. Тирмәләр түңәрәк формаһында, стенаһы ағас рәшәткәләрҙән дүрт футҡа тиклем төҙөлә. Тирмәне кейеҙ менән көпләйҙәр һәм арҡандар менән нығытыла. Бейек Урал тауы баштарында йәшәгән башҡорттар тирмәләрен дүрт мөйөшлө итеп ҡора. Һарыҡ көтмәгәнгә күрә, тирмәләрен туҙ менән уратып алалар. Тирмә уртаһында усаҡ яғыр өсөн таған, йә булмаһа, ҡазан элер өсөн сынйыр ҡуйыла.

**Иоганн Готлиб ГЕОРГИ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-һинд-иран концепцияһы

Әрмән традицияһында иран этногенетик риүәйәттәре сағылыш тапҡан, уларға ярашлы, арыйҙар дахтарҙан килеп сыҡҡан. Б.А. Литвинский яҙыуынса, daha тамыры "ажидахак составына ингән dahakанан алынған". Л.А. Ельницкий шулай уҡ Ажи-Дахака исемен "даев ҡәбиләһе атамаһына бәйле рәүештә ҡарарға кәрәк", тип иҫәпләй һәм "Турандың ғифрит батыры" тип атай. Ошоларға таянып, С. Хәмиҙуллин бөрйән-берзилдарҙың ата-бабалары иран телле Туран (мәсәғүт) ҡәбиләләренән килеп сыҡҡан, тигән һығымтаға килә.

Б.э.т. IV быуатта көньяҡ Уралдан көньяҡҡа табан дахтарҙың экспанцияһы башлана. Дахтарҙың көньяҡҡа хәрәкәте һәҙәмтәһендә Иранға барып етә, улар парфяндар тип атала башлай. Бушап ҡалған дах далаларын мәсәғүттәр -турҙар биләй. Улар Хорезмдың төньяҡ-көнбайышына күсенеп, яңы ерҙәр биләй, Ҡытай сығанаҡтарында улар Яньцай тип атала. Боронғо Туран урынындағы Ҡанғар (Ҡанғой) дәүләте б.э.т. I быуатта иң көҫәтле осорон кисерә. Ҡытай йылъяҙмаларында Турандың ике өлөшө - Ҡанғой менән Яньцайҙың этник берлеге хаҡында яҙыла.

С. Хәмиҙуллин яҙыуынса, үҫәргән башҡорт ырыуы Ҡанғойҙың мөтәйен этник төркөмө менән бер тамырҙан. Автор фекеренсә, шулай итеп, ҡанғарҙар, үҫәргәндәр, юрматылар, юрмыйҙар, бөрйән-барзилдар боронғо Туран этник мөхитенән сыҡҡан.

Башҡорт ғалимдары Р. Кузеев һәм С. Ғәлләмов башҡорттарҙы иран телле халыҡтар менән бәйләй. Мәҫәлән, С. Ғәлләмов: "Бөрйән исеме һинд-ирандарҙан алынған... Парфян батшалығы дәүерендә Берсизова Авеста һүҙе Бөрйән тип атала башлаған. Бер ниндәй ҙә шик юҡ, Иерусалимдағы иран-парфяндар өсөн Борзен-Михбан башҡорт исемен йөрөткән ырыу утына табыныу ", - тип иҫәпләй. Башҡорт халҡының тарихын өйрәнгәндә нигеҙһеҙ ошондай раҫлауҙар яһау аҙашыуға килтерә.

Пермь ҡалаһы музейындағы экспонаттарҙың аҫтындағы яҙыуҙар сикһеҙ аптырауға һала. Мәҫәлән, алтын ялатылған көмөш һауыт (VII б. - 1967й. Шырҙандан алыҫ түгел Оло Әнәк ауылында табылған) аҫтына "Ирандыҡы" тип яҙып ҡуйылған. Һауытҡа ат өҫтөндәге юлбашсы ҡылыс менән айыуҙарҙы тураҡлай. Шундай уҡ икенсе бер көмөш һауытта юлбашсы уҡ атып ҡырғағай һарыҡ тәкәләренә һунар итә. Был һауытҡа мең ярым йәш, унын аҫтына ла "Ирандыҡы" тип яҙылған. V быуатҡа ҡараған тағы бер һауыт 1936 йылда Бәләкәй Әнәк ауылында табылған. 1909 йылда табылған һауыттың аҫтында ла "Ирандыҡы" тигән яҙыу бар. Унда ҡәлғәгә һөжүм мәле һүрәтләнеш алған.

**(Дауамы бар).**

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНАның әҫәрҙәрен уҡыған кеше, һис шикһеҙ, уның үҙе менән дә ҡыҙыҡһына башлай. Тик был автор хаҡында бер ерҙә лә тулы ғына мәғлүмәт юҡ. Кем ул Гөлсирә Ғиззәтуллина? Уның ҡәләме нисек ошондай һағышлы, тәрән, фәлсәфәүи әҫәрҙәр тыуҙыра? Меңәрләгән уҡыусыны арбарлыҡ күңел нағыштары ҡайҙан әҙибәлә? Ҡыҙыҡмы? Беҙ быларҙың барыһын да Гөлсирә апайҙың үҙенән һораштыҡ.**

# ЙӨҘ ҘӘ БЕР

**Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ яҙыусыларҙың, шағирәләрҙең ижадынан һағыш һарҡып ҡына торғандай. Мәҫәлән, ҡайһы бер шағирәләрҙең шиғырҙарын уҡығас, шул хистәргә йомолоп киткәндәй булаһың. Прозала - һеҙҙеке шулай. Һәм уҡыусы, ирекһеҙҙән, "бәхетһеҙ..." тип уйлай. Уйлап ҡына ла ҡалмайҙар, был һорауҙы уҡыусыларығыҙҙан үҙегеҙгә лә ишетергә тура килә. Һәм был һорауҙы мин дә һеҙгә бирмәйенсә булдыра алмайым.**

- Мостай Кәрим хикәйәләремде уҡығас: "Шул хәтлем дә бәхетһеҙме ни һуң ул?" - тип һораған, ти. Шулай булғас, башҡаларҙа ла шундай фекер тыуыуы тәбиғиҙер, моғайын. Үтә нескә күңелле, йоҡа тиреле булып тыуғанға күрә лә яҙабыҙ бит инде. Мин һүҙҙәрҙәге саҡ ҡына интонация үҙгәрешен дә, ҡараштағы бер генә сағылышты ла, телефондан һөйләшкәндәге паузаны ла һ.б. бик ваҡ һәм һиҙелмәҫ мөнәсәбәт нескәлектәрен тоям, кисерәм һәм ошолар ғына ла ғазапҡа һалыуы ихтимал. Балаларым ундай ваҡытта: "Әсәй, иғтибар итмә, көймә", - тип ҡурсаларға тырышһа, ахырҙа: "Был минең һәләтемдең хаҡы! Мин шуның өсөн түләйем", - тип, көлөп ҡуям. Улар ҙа быны шаярыуға бороп: "Ярай, улай булғас, көйөп ал әйҙә, үҙеңә оҡшағас", - тип ҡуялар.

Тәүге әҫәрҙәремде бөгөнгө күҙлегемдән анализлайым һәм ул саҡта донъяға фажиғә күҙлегенән ҡарағанмын икән, тип ҡуям. Француз философы Монтендең: "Кеше үҙе менән булған ваҡиғаларҙан түгел, ә шул ваҡиғаларға мөнәсәбәте арҡаһында ғазаплана",- тигән ифрат дөрөҫ һүҙҙәре бар. Беҙ үҙебеҙҙең эске донъябыҙҙы үҙебеҙ хасил итәбеҙ. Уны нимәләр менән тултырыу, кемгә инергә рөхсәт итеүебеҙ үҙебеҙгә бәйләнгән. Ҡыҙғанысҡа күрә, мин быны һуңыраҡ аңланым. Хәйер, кеше донъялыҡтың ниндәйҙер төшөнсәләрен аңлау өсөн ергә ебәрелгән рухи зат, тип уйлайым. Шундай бер ҡисса бар: бер фәрештә Аллаһы Тәғәләгә килә лә: "Мин кешеләрҙе бөтөнләй аңламайым, уларҙың ҡылған ҡылыҡтары мине тетрәндерә, мин уларҙы яратмай башланым", - ти. Аллаһы Тәғәлә уға: "Улайһа, бар, кеше сүрәтендә ғүмер итеп ҡара, улар тойғанды тойоп, кисергәнде кисереп кил",- тип, уны был донъяға әҙәм рәүешендә ебәрә.

Тағы ла миңә бер Көнсығыш философияһындағы бер ҡараш оҡшай: беҙ, кешеләр, барыбыҙ ҙа бер океандан яралған, йәғни шул окендың бер тамсыһыбыҙ һәм шул тамсыла океанға хас бөтә сифаттар ҙа бар. Тимәк, беҙҙең барыбыҙға ла бер үк сифаттар, тойғолар хас. Был хистәр һәр беребеҙҙә төрлөсә сағылыш ҡына таба. Мәҫәлән, күптәр мин уйлаған кеүек уйлай һәм фекерләй, әммә уларҙың барыһы ла минең кеүек итеп шуларҙы яҙа ғына белмәй. Йәки һәр кем үҙе йәшәгән, тап булған шарттарға ярашлы ҡыла ҡылыҡты ла. Шуға күрә: "Мин улай булмам, мин был көнгә төшмәм", - тип әйтеү бик хәүефле. "Әҙәм балаһы хатта үҙен-үҙе лә белеп етмәй", тиер ине атайым. Ул Башҡорт кавалерияһы составында хеҙмәт иткән. Һуғышҡа китеп барыуҙарын хәтерләй ине. Һуғышҡа барып эләккәндә ул сағыштырмаса оло, утыҙҙан үткән, донъя күргән кеше була. Ә күбеһе бөтөнләй йәштәр. "Ҡарап-күҙәтеп ултырам: берәүҙәре бәһлеүән кәүҙәле, үткерҙәр, уларға ҡарайым да, был герой булыр инде, тип уйлайым. Бәғзеләре ҡураныс ҡына, шым, баҫалҡы, хатта бахырыраҡ күренә. Ирекһеҙҙән, "Бынан ниндәй һуғышсы сығыр инде", тип тип борсолоп ҡуям. Бер ваҡыт эшелон бомбежкаға эләкте. Өҫтән бомбалар яуа башлай, ҡасып ҡотолор әмәл юҡ. Һәр кемдең ергә һеңгеһе, ер ҡорто булғыһы килә. Шул аяуһыҙ мәлдә һәр кемдең ысын асылы асыла. Кемдең эске рухи көсө бар, шул башын юғалтмай, кемдәрҙер паникаға бирелә, шул арҡала һәләк була. "Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә", тигән һүҙ шундай ваҡытта раҫҡа сыға ла инде". Ошоларҙы һөйләй ҙә атайым, "Бер ваҡытта ла "мин улай итмәм", тип эре һөйләшмә, тип әйтә торғайны.

Ә инде бәхет һәм бәхетһеҙлеккә килгәндә... Минеңсә, бәхет ул оҙайлы тойғо түгел, ә бер арауыҡта ғына, ниндәйҙер бер мәлдә биләп ала торған хис. Ә ижад иткән кешенең, башта әйткәнемсә, тойғолар палитраһы сағыуыраҡ, киҫкенерәктер. Был - булмыш, хатта ниндәйҙер кимәлдә күңел талабы.

Кешене бәхетле, бәхетһеҙ, тип баһалағанда беҙ йыш ҡына ниндәйҙер тышҡы атрибуттарға ҡарайбыҙ. Мәҫәлән, кешенең ғаиләһе лә, балаһы ла юҡ икән, уны мотлаҡ бәхетһеҙ, тип ҡабул итәбеҙ. Бер ваҡыт, бер ижадташым тураһында материал яҙырға барҙым. Яңғыҙ, фатиры ла ялтлап тормай, инде әллә нисәмә йыл ремонтын тамамлай алмай. Ә ниндәй тулы, бай, һоҡланғыс рухи тормош менән йәшәй ул! Уның фекеренең тәрәнлегенә, яһаған һығымталарының мауыҡтырғыслығына, ҡыҙыҡһыныу даирәһененең күплегенә аҡылың етмәй китә хатта. Ә икенсе миҫал: кешенең бөтәһе лә бар - ире, балалары, фатиры, баҡсаһы. Ә ул саҡ һөйрәлеп эшкә килә, сәй эсеп, кеше сәйнәп, арлы-бирле, күңел һалмай ғына яратмаған эше менән шөғөлләнеп, иренә, балаларына, түрәһенә зарланып, йәнә тау аҡтарған кеше кеүек саҡ һөйрәлеп ҡайтып китә, һәм шулай көн һайын. Минеңсә, бына шул ул бәхетһеҙлек.

**Гөлсирә апай, һеҙҙең кеүек тәрән яҙыусыны, һағышлы ҡатынды, төплө фекер эйәһен тыуҙырған ата-әсәләр, балалыҡ йылдарығыҙ тураһында ла белге килә?**

- Мин атайым менән әсәйемдең төпсөк балаһы. Мин тыуғанда атайыма 51, әсәйемә 41 йәш булған. Атайымдың яҙмышы бик фажиғәле. Уның йәшләй өйләнгән тәүге ҡатыны тифтан вафат була. Шул ҡатынынан тыуған улы 14 йәшендә молотилкаға ҡыҫылып үлеп ҡала. Икенсегә өйләнә. Уныһы ла һуғыш ваҡытында һаулығын ныҡ юғалтып, мандый алмай. Атайым үҙе разведканан "тел" алып ҡайтып килгән ваҡытта минаға баҫа, тәнендә шул минаның ун туғыҙ ярсығының ҡурҡыныс эҙҙәре бар ине. Яралары серей башлағас, врачтар уға ҡоро климатта йәшәргә кәрәк тиҙәр. Ғаиләһен алып, Үзбәкстанға китергә мәжбүр була атайым. Шул яҡта ҡатыны мәрхүм була. Ә был ваҡытта әсәйем дә, тол ҡалған фронтовик ҡатыны, балаһы менән шул тарафтарға эшкә юлланған була. Уның да бер генә балаһы 3 йәшлек сағында ҡапыл ғына ауырып китеп, вафат була. Әсәйем шул ваҡытта атайымдың балдыҙҙары менән эшләгән була. Шулар, апалары үлгәс, атайым менән уның әсәйһеҙ ҡалған ун йәшлек һәм дүрт йәшлек улдарын йәлләп: "Шундай шәп абзыйыбыҙ бар, фронттан ҡайтҡан", - тип, әсәйемә атайымды димләйҙәр, тик балалары барлығын ғына әйтмәйҙәр. Әсәйем ҡартайымдың ҡаҙаҡ дуҫында фатирҙа торған була, йәғни тауыҡ кетәгендәй генә булһа ла йәшәр урыны, хатта ул ҡаҙаҡ бабай алып биргән һыйыры булған була. Атайым менән шунда йәшәй башлайҙар, бер көн үтә, ике көн. Һыйырлы тормош һыйлы бит инде. Ә балалары был ваҡытта - кешелә, ярым ас ултыра. Атайымды выжданы ғазаплай. Әсәйем һөйләй торғайны: "Эштән ҡайтып, мейес янында аш бешереп торам. Ишек асылып ябылған һымаҡ булды ла, өндәшеүсе булмағас, үрелеп ҡараным. Атайың бер улын етәкләгән, икенсеһен күтәргән дә, ишек төбөндә ап-аҡ булып баҫып тора. Ҡарашында "Ҡыуып сығарһа, нишләрбеҙ?" тигәндәй ҡурҡыу. Мин аптырап ҡарағанмын да ҡатҡанмын. Шул саҡ ҡулындағы бала миңә ынтылып, "Әсәй!" тине. Алдым да, ҡыҙымды юғалтыу ҡайғыһынан ҡанһырап торған күкрәгемә дауа һымаҡ итеп ҡыҫҡанмын". Шулай йәшәп китәләр, апайым, ағайым, шунан мин тыуғанмын. Әлеге сабый булып килгән ағайым әсәйемдең үҙ әсәһе түгеллеген белмәй үҫә, был хаҡта 16 йәшендә, атайымдың тыуған яғына әйләнеп ҡайтҡас ҡына кешеләрҙән ишетә.

Атайым мине бик ныҡ ятратты, шундай ныҡ иркәләтте, хатта боҙоп, ҡотортоп үҫтерҙе, тип әйтергә була. Ҡот осмалы еңмеш, илаҡ булғанымды хатта үҙем дә хәтерләйем. Апайым менән ағайым да мине ныҡ яратты, Аллаға шөкөр, әле лә шулай, бер-беребеҙ өсөн өҙөлөп торабыҙ. Хәҙер уйлайым ейәнем менән ейәнсәремде иркәләтәм. Элек ҡайһы бер кеше: "Үтә иркә бала иҫәр кеүек булып китә", - тиһә, "Ни тиклем шаштырып үҫтерелгән минән дә йүнле генә кеше сыҡҡан да инде", - тип яуаплай торғайным. Хәйер, әлбиттә талапсанлыҡ та кәрәк, йәненән артыҡ күреп ятраҡанын белһәм дә, атайымдың ҡарашынан уҡ ҡурҡып тора торғайным. Бер һирпелеп ҡарап ҡуйыуы етә, шунда уҡ артығыраҡ ҡыланғанымды аңлай инем.

Әсәйем үтә бипаулап бармай, ҡаты була белә торғайны. Ул бик уҡымышлы кешенең ҡыҙы ине. Олатай Бохарала белем алған мулла, үҙ мәхәлләһе була. Совет власы килгәс, бар милкен властарға тапшыра ла, шул хаҡта ҡағыҙ яҙҙырып алып, оҙон арбаһына бер өйөр балаһын ултыртып, ил буйлап сыға ла китә. Ҡайҙа ғына йәшәмәй улар: Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан ҡалмай. Шулай йөрөп-йөрөп, Октябрьский ҡалаһының төҙөлә башлаған еренә килеп төпләнә. Әсәйем салт зиһенле, эште еренә еткереп башҡара белә торған, бөтмөр, тыныс. Донъялары сынъяһау булды. Атайым умарталар тотто, әсәйем баҡса үҫтерҙе, шундай тәмле итеп бешеренде, ялтыратып таҙалыҡ тотто. Килгән кеше: "Ожмахта йәшәйһегеҙ бит", - тип әйтә торғайны.

Атайым минең һәләттәремә ныҡ иғтибарлы булды, үҫтерергә тырышты, бөтөн күңел байлығын һалды. Апайым менән ағайыма эш ныҡыраҡ тейҙе, әсәйем уларға донъя көтөү серҙәрен күберәк өйрәтеп ҡалған, ә миңә теше үтмәне, сөнки атайым "бала уҡыһын, бала уҡыһын" ти торғайны. Ҡулынан килмәгән эше булмаған ағайым йыш ҡына ғорурлыҡ менән: "Нәйлә әбейҙең университетында уҡыған кеше бит әле беҙ", - тип әйтергә ярата. Шундай саҡта үкенә биреп: "Ә мин ул дәрестәрҙән ҡасып ҡалғанмын", - тип ҡуям. Атайым да, әсәйем дә белем алыуға бик етди ҡарай ине. Аҙаҡтан, йылдар үткәс, уларҙың: "Беҙ һеҙгә байлыҡ ҡалдыра алмайбыҙ инде, балалар. Тик беҙ һеҙгә юғары белем бирҙек, ятраҡан һөнәрҙәрегеҙҙе алдығыҙ. Ҡалғаны үҙегеҙҙән тора", - тигәндәрен хәтерләйем. Әсәйем дә, атайым да йыш ҡына мәҡәл менән һөйләшә торғайны. Әсәйем "Ата малы менән ул тормаҫ, әсә малы менән ҡыҙ тормаҫ", тиер ине. Үҙҙәре байлыҡҡа ҡыҙыҡманы, беҙгә лә шуны һендергәндәр. "Тәрбиәле ашап, уңайлы кейемең булып, гәзит-журнал алдырырға мөмкинлегең булһа, артығы кәрәкмәй инде", тиерҙәр ине. Китап культы булған ғаиләлә үҫкәс, уҡырға иртә өйрәндем.

да, атайым менән әсәйем беҙҙе кеше өсөн иң мөһим булған нәмәгә - яратырға өйрәткәнен төшөнәм. Шулайтып, был донъя тик ятраыуҙан тора, барыһы ла һине ятрата икән тип уйлап үҫкән бала мин. Әлбиттә, ятралып үҫкән бала булыу шәхес булараҡ формалашыуға ныҡ ярҙам итте, был һөйөүҙең йылыһы менән яҡтыһы ғүмерем буйы етте, томошомдоң иң ауыр мәлдәрендә лә бирешмәҫкә ярҙам итте. Әммә кире яҡтары ла булды. Һин, барыһы ла һине ятрарға тейеш, тип уйлап, шул һөйөүҙе башҡаларҙа эҙләп, уларға ярарға, оҡшарға тырышып ыҙалайһың икән. Кемдер ҡырын ҡараһа ла, ҡатыраҡ һүҙ әйтһә лә - трагедия. Ҡырҡ йәштәргә тиклем шул ауырыу менән ауырыным. Эргәмдәгеләрҙән, яҡындарымдан һөйөүҙең күп булғанын теләнем. Миңә йылымыс ҡына хистәр аҙ ине, ә ҡайнап, бешереп алып барғаны кәрәк булды. Хатта әхирәттәремдән дә оло мөхәббәт талап итер инем. Үҙем мөкиббән булам, йәнемде бүлеп һалам, башҡаларҙан да шуны көтәм... Ә бит һәр кемдең үҙ тормошо, үҙ мәшәҡәттәре, гел генә "өф" итеп йәшәп булмай. Һәм бына ошо һөйөү, йылылыҡ эҙләп өҙгөләнеү әҫәрҙәремә лә һағыш мөһөрө баҫҡандыр, моғайын. Юҡҡа ғынамы ни, "Йөҙ ҙә бер ғүмерем" китабына эпиграф итеп бер Америка психологының: "Был донъя һөйөүгә сарсаған, бөтәһе лә һөйөүгә мохтаж, ләкин уны тик бик аҙҙар ғына бирә ала", - тигән һүҙҙәрен ҡуймағанмын. Байтаҡ йәшәлде, хәҙер инде әйтә алам: мин үҙем донъяға ул һөйөүҙе бирә алдым. Улым менән ҡыҙымды ла ныҡ ятратып үҫтерҙем, әле

***✓ Берәй эште ташларға теләйем икән, иң төп дәлил: "Миңә ҡыҙыҡ түгел". Әгәр эшләүе ҡыҙыҡ түгел икән, аҡса ла, башҡа сәбәптәр ҙә тота алмай. Был йәһәттән мин тулыһынса бойондороҡһоҙ ижад кешеһе.***

# ҒҮМЕРЕМ...



Беренсе класта класташтарым "а" хәрефен өйрәнгәндә, мин парта аҫтына йәшереп, "Башҡортостан пионеры" гәзитен уҡый инем. Унан "Журналист булам" тигәнемде ишетеп ҡалған әлеге атайым 4 класс балаһына китап ҡалынлығындағы "Журналист" журналын яҙҙыра башланы. Мин ул журналды ошо йәшемдә лә аңлай алмайым. Уҡытыусыларым Һылыу Баҡый ҡыҙы Ураҡаеванан да, Роза Ахун ҡыҙы Яубаҫаровадан да ныҡ уңдым. Саҡ төҫмөрләнгән һәләтемде лә күрә һалып, үҫендереп ебәрҙеләр. "Башҡортостан пионеры" гәзитенә яҙыша башланым, йәш хәбәрсе булдым, шиғыр конкурсында еңеп, "Артек" пионер лагерында йәш хәбәрселәр сменаһында ял итеп ҡайттым. Атайымдың вафатынан һуң уның папка-папка ҡағыҙҙары араһында бала сағымдан алып төрлө гәзиттәрҙә сыҡҡан мәҡәләләрем, шиғырҙарымды ҡәҙерләп йыйып барғанын күреп, шул тиклем күңелем тулды...

**Оло тормошҡа ниндәй хыялдар менән аяҡ баҫтығыҙ? Ул хыялдарҙың ҡайһылары үтәлде, ҡайһылары үкенес булып ҡалды?**

- Бәләкәйҙән журналист булырға хыялландым. Шул хыялым тормошҡа ашҡас, үҙемде иң киткес бәхетле итеп тойҙом. Эш ни тиклем еңә ауыр булмаһын, көн һайын байрамға барған һымаҡ ҡыуанып бара торғайным. "Совет Башҡортостаны"нда ун һигеҙ йыл эшләнем. Әле хәҙер бер урында үтә оҙаҡҡа туҡталғаныма үкенә биреп тә ҡуям. Редакциянан башҡа тормошто күҙ алдына ла килтерә алмағанлыҡтан, хәтәр генә мөмкинлектәрҙән баш тартҡан саҡтарым да булды. Ләкин репортерлыҡ - ул йәштәр эше, гәзиттә эшләйһең икән, утыҙҙан үткәс йә шунда етәксе эштәргә күсергә, йәки гәзиттән китергә кәрәк, тип иҫәпләгәнгә күрә генә нәшриәткә күстем. Үҙем хушлашам, үҙем илайым. Шунда оҙаҡ йылдар бергә эшләгән ағайҙың: "Һине бынан кем ҡыуа, ғаризаңды йырт та ҡал", - тигәнен хәтерләйем. Шуға ҡарамаҫтан, киттем: "Мин менәрләгән кешенән интервью алғанмын, инде үҙемдән алыуҙарын теләйем", - тип яуаплағанымды иҫләп, көләп тә ҡуям. Нисек кенә булмаһын, ғүмер буйы үҙемә нык юғары талап ҡуйҙым, үҙ-үҙем менән ярыштым, бер урында күнелһеҙ булһа, мине бер нимә менән дә бәйләп ҡуймаҫлыҡ хәлгә килдем. Берәй эште ташларға теләйем икән, иң төп аргумент: "Миңә ҡыҙыҡ түгел". Әгәр эшләүе ҡыҙыҡ түгел икән, аҡса ла, башҡа сәбәптәр ҙә тота алмай. Был йәһәттән мин тулыһынса бойондороҡһоҙ ижад кешеһе. Шул уҡ ваҡытта "Башҡортостан" мине эшләргә өйрәтте, унан һуң башҡа бер урында ла эшләү ҡыйын булманы. Ул яҡтан, аяуһыҙ, хатта үтә талапсан уҡытыусыларым, тиҫтәләрсә тапҡыр күсерттереп, илатаилата эшкә өйрәткән уҡытыусыларым Хәсән Назаров менән Дәүләт Мәнһәҙиевҡа рәхмәт уҡымаған көнөм юҡ. Ғөмүмән, уҡытыусыларымдан ғүмер буйы уңдым, шуларҙың береһен, әҙәбиәт уҡытыусым - иң киткес кеше һәм педагог Фәрзәнә Фәйез ҡыҙы Абдуллинаны әйтеп китмәһәм, гонаһ булыр. Ә илле йәшемдә инглиз телендә сит илдәрҙә эшләргә һәм юғары уҡыу йорттарында уҡырға хоҡуҡ биргән бик ауыр имтиханға йыл ярым эсендә әҙерләгән уҡытыусым Лина Рәхим ҡыҙы Смакованы гениаль уҡытыусым тип иҫәпләйем. Тыйнаҡлыҡтан күренһә лә, әйтмәй булдыра алмайым, һикһән ике йәшлек уҡытыусым мине гениаль уҡыусым, тип маҡтай торғайны. Тырышлыҡ ике яҡтан да булмаһа, ысынлап та, унышҡа ирешеү мөмкин түгелдер.

**Мөхәббәт тигән тойғо урын таптымы яҙыусы яҙмышында? Һәм, ғөмүмән, ғүмерегеҙҙең ошо үлсәмендәге уйкисерештәрегеҙ менән бүлешһәгеҙ ине.**

- Мин кейәүгә "карт ҡыҙ" булып сыҡтым. Бөгөнгө күҙлектән 26 йәш ул артыҡ бер ни ҙә түгел, әммә ул заманда был йәштә инде "көләштәр" рәтендә саҡ-саҡ эләгеп торған булаһың. Миңә мотлаҡ башты юғалтырлыҡ мөхәббәт кәрәк ине. Хатта әхирәттәремдән дә һөйөү талап иткән кеше булараҡ, кейәүгә сығаһы кешем минең өсөн яратыуҙың иң бейек нөктәһе булырға тейеш ине.

Күренекле яҙыусы Сабир ағай Шәрипов менән "Совет Башҡортостаны" гәзитендә бер бүлектә эшләй инек. Һирәк-һаяҡ уның ҡәйнеше инеләп йөрөй. Ул да беҙҙең интернат-мәктәптән, тик бер класҡа түбәнерәк уҡыған. Ә мәктәптә бәләкәйҙәргә иғтибар ҙа итмәйһең бит. Әле ул авиация институтын тамамлаған, моторҙар эшләү заводында технолог булып эшләп йөрөй. Алдан уҡ әйтергә кәрәк, минең өсөн ир-егеттәрҙә тышҡы ҡиәфәт бик мөһим, ә Фәрғәт минең өсөн кешенең аҡылы мауыҡтырғысыраҡ булып сыҡты. Шулай итеп беҙ дуҫлашып киттек. Ул иң киткес сибәр ине һәм мин уға һушым китеп ғашиҡ булдым. Редакцияла бер апайҙың, мин кейәүгә сығырға йыйынғас, йәлләп ҡарап: "Уй, һылыу, ҡурҡмайһыңмы, усыңа ут алаһың бит", - тигәне хәтеремдә. Һәр йәһәттән килгән кеше ине ул, аҡыл да бар, телгә лә оҫта, буй-һын да бар. Ғаиләләр ҙә оҡшаған, ҡәйнәм менән ҡайным да балаларын уҡытыуға күп көс һалған, һигеҙ бала, барыһы ла уҡымышлы кешеләр.

Шулай итеп, беҙ өйләнешергә йыйындыҡ, сөнки Фәрғәтте көҙгөһөн армияға алырға тейештәр ине. Тик ул, үҙе өсөн янып йөрөгән ҡыҙҙары күп булғанға, аптырабыраҡ йөрөй булып сыҡты. Бер ҡыҙ хатта, минең балдағым да бар, һиңә үтә расходланырға кәрәкмәй, тип тә әүрәтә икән. Мин дә үҙ баһамды беләм, бер ваҡыт, нисектер: "Барыбер минән дә шәберәкте таба алмаясаҡһың", - тип әйтеп һалғанмын. Һуңынан, уларға килен булып барғас, бер еңгәһе, шулай итеп әйтә алған ҡыҙҙы күрергә килдек әле, тип көлгәйне. Нык матур итеп йәшәп киттек. Ул заводтан иртәрәк ҡайта ла, мине түҙемһеҙлек менән көтөп тора, көнө буйы эштә нимәләр булғанды, кемдән интервью алғанмын, донъяла ниндәй яңылыҡтар бар, төпсөнөп һораша, мөкиббән булып тыңлай. Әле килеп аңлайым, ул тормошта үҙен таба алмай йонсоған. Баштан уҡ янылыш һөнәр һайлаған. Беренсе мәктәп-интернатының шефы булған авиация институты ул саҡта мәктәптең иң һәләтле егеттәрен һөҙөп ала ла китә ине. Ул да шул ағым менән уҡырға инеп, хәҙер шул өлкәлә хеҙмәт итә ине. Ә бөтөн ҡыҙыҡһыныуы минең эшемдә булды. Ул йә юрист, йә башҡа гуманитар йүнәлеш белгесе булырға тейеш булған, уға кешеләр, яҙмыштар ҡыҙығыраҡ ине, ә үҙенең тормошондағы "кеше һәм машина" мөнәсәбәтенә һыя алманы. Бер нисә тапҡыр заводтан китергә ынтылып ҡараны, тик беҙ завод биргән фатирҙа йәшәй инек. Редакциянан фатир алғас, уға: "Үҙең теләгән урынға, мәҫәлән, юрфакка инеп, икенсе һөнәр ал һуң. Өс кенә йыл минең эш хаҡына йәшәп торорбоҙ әле", - тип әйтеп тә ҡараным. Шул осорҙа үҙгәртеп ҡороу башланды, ул эшләгән завод көрсөккә терәлде. Тик ул, нишләптер, үҙендә ундай көс тапманы. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелде, эсә башланы. Хәйер, әле аңлауымса, был дәүерҙең күп ир-егеттәре шул осорҙа һынды, "умыртҡа һөйәге һынған быуын булды", шул арҡала күптәр был тормоштан иртә китте, күп ғаиләләр ҡыйралды.

Икенсе яҡтан ҡараһаң, хата минең үҙемдә лә булған. Яныраҡ ҡына балалар менән дә һөйләшеп ултырабыҙ ҙа, шуны аңланым: минең яратыуымды шашып китмәй күтәрә алыр өсөн дә көс кәрәк. Ә ундай көскә эйә булғандар һирәк икән ул. Яратҡан кешемде мин артыҡ уҙындырып ебәрәм, уға барыһын да рөхсәт итәм, бар теләктәрен үтәйем, үҙемде ҡорбан итәм. Ирем менән минең мөнәсәбәттә лә тап шулай булды. Йәнә бер Америка психологының "Артыҡ нык яратҡан ҡатын-ҡыҙҙар" тигән китабы бар. Шуны уҡып сыҡҡас, бик күп урындарҙа үҙемде таныным. Яратыуың һине ҡолға, ә яратҡан кешеңде боғалаҡҡа әйләндерергә тейеш түгел. Бынан бер кемгә лә файҙа юҡ. Барыһы ла булды: кәмһетеү, эскелек, көнләшеү, хатта ҡул күтәреү... Ун туғыҙ йыл бергә йәшәгән ғүмерҙең яртыһын ғазап сигеү тип иҫәпләйем. Иремдән: "Һин миңә рәхмәт әйтергә тейешһең. Мин бит һине ошондай яҙыусы яһаным", - тигәнендә әсе дөрөҫлөк бар. Йыш ҡына үҙемдең ысынбарлығымдан ҡасыр өсөн дә яҙа инем. Шул ысынбарлыҡтың һарҡылып әҫәрҙәргә инеп киткән осраҡтары ла булды.

Нисек кенә булһа ла, психологик яҡтан уға нык бәйләнгән инем. Беҙҙә, ижад кешеләрен, йыш ҡына ҡатын, хужабикә була белмәйҙәр, шуға ғаилә тормоштары килеп сыҡмай, тип яҙырға яраталар. "Йылы ҡараш, тәмле аш, йыйнаҡ йорт булғанда, ирҙәр яҡшы була", - тиҙәр. Йылы аш та, ҡотло өй ҙә, йылылыҡ та артығы менән булды. Балаларҙы алып, өйҙән сығып киткәндә: "Ғәфү ит инде, - тинем. - Мин һине бәхетле итә алманым. Ир кеше өсөн ҡырҡ биш йәш ул бер нәмә лә түгел. Һин бөтәһен дә яңынан башлай, яңы ғаилә ҡора алаһың". Ул айыҡ ине: "Бәхетле булынған икән ул, тик аңлап ҡына етелмәгән", - тине. Йәл, нык йәл, әлбиттә. Тик кеше кешене бәхетле итә алмай икән, бәхетһеҙ итә ала. Нисек кенә булмаһын, ғаилә өсөн һуңғы сиккә тиклем алыштым, тип тулы хоҡуҡ менән әйтә алам. Унан башҡа йәшәй алырымды күҙ алдына ла килтерә алмай йонсоном. Тик бер ваҡиға тәүәккәлләргә этәргес булды. Минең кеүек үк яҙмышлы бик яҡын әхирәтем ҡот осҡос сиргә дусар булды. Ярай әле, диагнозын алдан белеп, операция яһай һалдылар. Операциянан һуң наркоздан сыҡҡанын көтөп баш осонда ултырам. Ул шул хәлендә лә түҙгеһеҙ һыҙлана. Йәнә ошо тормошомдо дауам итһәм, мин дә ошо хәлдә ҡаласағымды аңланым. Бөтөн булмышым шул мәлдә: "Юҡ, мин йәшәргә теләйем", - тип ҡысҡырған һымаҡ булды. Ауырыуынан айныу менән әхирәтем дә өр-яңынан тормош башланы, Аллаға шөкөрҙәр уҡыйым, тотош сәләмәтләнеп, балаһы менән ейәненә терәк һәм бәхет булып йәшәп ята. Мин быны фәһем булһын өсөн һөйләйем, үҙ-үҙеңде һәм янындағы кешеңде рухи һәм физик яҡтан емереү хәленә еткергәнсе сат йәбешеп йәшәргә ярамай икән. Һәр кемдең үҙенсә бәхетле булырға хаҡы бар.

(Дауамы 11-се биттә).

✓ *"Урал кем була?" - тинеләр. Бер аҙға һуҙылған паузанан һуң кемеһелер: "Композитор", - тине. Нимә аңлатҡанын белмәһәм дә, был һүҙ оҡшап ҡалды. "Эйе, мин композитор булам", - тинем.*



ИЖАДХАНА

**Музыка йөрәктәргә үтеп инергә тейеш, тигән бөйөктәрҙән берәү. Бөгөнгө геройыбыҙҙың музыкаһы иһә һәр башҡорт кешеһенең йөрәгендә йәшәй - бында бер тамсы ла шыттырыу юҡ. Берәй ерҙә яңылыш ҡына ҡолағыңа салынып ҡалһа ла, көйҙөң уныҡы икәнен шунда уҡ танийһың, уларҙың барыһын да ишетеп, хатта үҙең эстән генә көйләп йөрөйһөң. Шулай итеп, бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ш. Бабич исемендәге Республика йәштәр премияһы лауреаты, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының музыкаль бүлеге етәксеһе, композитор Урал Мирас улы ИҘЕЛБАЕВ менән уның ошо үҙенсәлекле ижады тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# КҮҢЕЛДӘН СЫҠҠАН КӨЙ...

## тамашаһының мотлаҡ табасаҡ



### Тамашаға әҙерләнәм

Ижад донъяһында юбилейҙарға арналған концерттар ят күренеш түгел хәҙер. Мин дә 30 йәшемә юбилей концерты эшләгәйнем. 2003 йыл ине һәм был мәлгә тамашасы иғтибарына тәҡдим итер әйберҙәр байтаҡ йыйылғайны. Киләһе концерт 2008 йылда үтте һәм 35 йәшкә арналды. Концертта минең көйҙәрҙе башҡарыусыларҙың барыһы ла сығыш яһай алманы, юғиһә, тамаша 4 сәғәттән дә оҙағыраҡҡа һуҙылыр ине. 10 йылдан һуң, быйыл, мин тағы ла ижадташ дуҫтарҙы һәм тамашасыларҙы концертҡа йыясаҡмын. Ул 2-3 февралдә, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтәсәк. Юбилей концерты тигәс тә, был концерттарҙың юбилярҙы сәхнәлә сәскәләргә күмеп ултыртып ҡуйыу менән һис уртаҡлығы юҡ. Минең өсөн концерт ниндәйҙер кимәлдә эшләнгән эштәргә, үткән юлға ҡарап, һығымталар яһау өсөн кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, аҙаҡҡы 10 йыл эсендә күп әҫәрҙәр яҙылған, шуға ла ике көнгә һуҙылған концерт яһарға тура килә. Тәүге көндә этник стилдәге әйберҙәр яңғыраясаҡ. "Урал легендалары" тип аталасаҡ һәм унда 20 йыл эсендә яҙылған этник көйҙәр менән бергә халыҡ көйҙәренә аранжировкаларҙы ла ишетергә мөмкин буласаҡ. Икенсе көндәге "Урал аҫылташтары" тигән концертҡа төрлө жанрҙағы көйҙәр гөлләмәһе тупланған. Унда коллективтар сығыш яһаясаҡ, спектаклдәрҙән, кинофильмдарҙан йырҙар, айырым эстрада йырҙары һ.б буласаҡ. БР Халыҡ уйын ҡоралдары оркестры ла ҡатнаша. Ҡасандыр мин "Аҡйондоҙ" төркөмөн етәкләй инем, халыҡ уны ла хәтеренә төшөрһөн, тип теләйем.

### Баһаны халыҡ бирә

Халыҡ мине йышыраҡ этник стилдә ижад итеүсе композитор итеп таный. Композитор көйҙәренән тыш, йырсылар йыш мөрәжәғәт итеү сәбәпле, башҡорт халыҡ йырҙарына аранжировкалар ҙа эшләргә тура килә. Улар алдарға бирмәҫ, бер йыр өҫтөндә эш ярты йылға, ҡайһы осраҡта тотош йылға һуҙыла. Сөнки халыҡ йыры һаҡсыл ҡараш талап итә. Бер ҡасан да йырҙы боҙорға ярамай - үҙем өсөн ҡуйған ҡәтғи талап ошо. Халыҡ йыры аҫылташ икән, ошо аҫылташты таҡы ла матурыраҡ балҡытырлыҡ итеп тирәҫ ҡуйыу минең бурысым. Йырсыларыбыҙ ситкә бәйгеләргә сыҡҡанда мотлаҡ ошондай йырҙарҙы алып сығырға тырыша, сөнки йырҙы ошо ерлектә ишетеп үҫмәгән сит тамашасыға халыҡ йырҙарын ҡабул итеүе ауырыраҡ. Аранжировкаларҙы, исемләп әйткәндә, Роберт Юлдашев менән күп эшләнек, "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбленең "Илкөйем" тигән композицияһын, Риф Ғәбитов менән Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленә "Тархандар" бейеүенә халыҡ көйҙәренән аранжировканы һ.б. атарға булыр ине. Режиссер Рияз Исхаҡовтың халыҡ йырҙарына төшөрөлгән 4-5 фильмында композитор булдым, улар араһында "Һөйөнтөҙ", "Ҡаһым түрә" бар. Иң аҙаҡҡы фильмдарҙан "Етегән"де атарға була, унда күпселек йырҙар - "Әйтеш", "Хан ҡыҙы" һ.б минең эшкәртеүҙә яңғырай.

Халыҡ стилендәге композитор әҫәрҙәренә килгәндә, уларҙың ҡайһыларын, мәҫәлән, "Салауат"ты хәҙер халыҡ көйө тиҙәр. Был күренеште халҡымдың ижадыма баһаһы тип ҡабул итәм дә ҡуям. Берәй 100 йылдан исемем онотолоп, ижадым халыҡ көйө булараҡ йәшәһә - ғәжәп бит! Бөгөн беҙ "Буранбай", "Азамат" һ.б. йырҙарҙы халыҡ йыры тиһәк тә, уларҙы ла ҡасандыр бер кеше ижад иткән.

### Эҙләнеүҙән туктарға ярамай

Ижадымдың тағы ла бер ҙур өлөшө театр менән бәйле. Спектаклдәргә көйҙәр яҙыуҙың ижад өсөн үҙенең ыңғай яҡтары күп. Һәр спектаклдең сюжеты бар, ул композитор өсөн сикләү түгел, киреһенсә, аныҡ бурыс, фантазияны ҡуҙғытып ебәреүсе сығанаҡ. Унан һуң, режиссер нимә күрергә теләүе менән мотлаҡ ҡыҙыҡһынам. Бөгөнгө көндә спектакль өсөн 150 тирәһе көй яҙылған. Һәр спектаклдең стиле, жанры булғанға күрә, көй яҙғанда былар ҙа иҫәпкә алына. Мәҫәлән, Сыңғыҙ Айтматовтың "Аҡ пароход"ындағы көйҙө башҡорт тамашаһыны ғына түгел, ә бөтөн төрки телле милләттәр халыҡ көйө итеп ҡабул итерлек булырға тейеш ине. Бөгөн уны "Ятаған" төркөмө "Нәркәс" менән берләштереп, уйнап йөрөй. Бына шулай ҡайһы бер көйҙәр спектакль сиктәренән сығып, үҙенең тормошо менән йәшәй башлай, был да ғәҙәти күренеш.

Шулай уҡ төрлө форматтағы 25-кә яҡын фильмда көйҙәрем яңғырай. Фильмға көй яҙыуҙың үҙенең үҙенсәлектәре бар, бында ла алдына аныҡ талап ҡуйыла. Режиссерға, тамашасыға күренмәһә лә, һәр проект өҫтөндә эшләгәндә үҙем өсөн нинән-яңы бурыстар билдәләйем, көйҙәр бер-береһен ҡабатламаҫҡа тейеш. Шулай уҡ бөтөн проекттарҙың да билдәле ваҡыты бар, был да минең өсөн яҡшы. "Тылсымлы тибеү" тип йөрөтәм уны, сәғәт 10-ға көй яҙылырға тейеш икән, таңғы 6-нан эшкә киләһең дә, сикле ваҡыт эсендә көй яҙаһың.

Юҡҡа ғына ижадсылар араһында "Илһам ҡошо" тигән һүҙбәйләнеш ҡулланылмай. Ҡайны саҡта үҙеңдең ҡасандыр яҙған әйберҙәреңде ишетеп, ул һинең үҙеңдең күңелеңде тетрәндереүе лә ихтимал. Тимәк, ниндәйҙер тылсымлы көс бар ул һәм һин ошо көс йоғонтоһонда ижад итәһең. Кемдер уны йондоҙҙар менән бәйләнеш тиер, бәлки, башҡаса атар - бына шуның тулҡынына көйләнә алһаң, бәхетлеһең. Балыҡ тотҡандағы кеүек, һинең ҡармағың - инструментың, тәжрибәң - белемең бар, әммә ҡармаҡҡа нимә эләгерен (эләкһә әле!) белмәйһең. Шуға ла ҡайны берҙә "кармаҡ"ҡа үҙемде лә аптыратырлыҡ "балыҡ" эләгеп торһа, бик рәхмәтле булыр инем. Ә бына эш күп булыуы, үҙеңде даими эшләргә мәжбүр итеү тап ошо илаһи көс менән бәйләнештә булыуға ярҙам итә. Әлбиттә, профессиональ композитор илһам килгәнде көтөп ултырырға тейеш түгел, тип өйрәттеләр беҙҙе. Мин былай тип әйтер инем: гел эшләргә, эҙләнергә кәрәк. Шул саҡта үҙең дә ижадтан ситләшмәйһең, мейең гел генә нимәлер уйлай, ә ижад иткән әйберҙәр араһында лайыҡлыны мотлаҡ буласаҡ. Һеҙгә ниндәй музыка оҡшай, тип һорағандарға мин гел шулай тип яуаплайым - ысын күңелдән яҙылғаны. Жанры, башҡарылыуы йәһәтенән ул төрлө булыуы ихтимал, әммә тыңлаусының күңел ҡылдарын ҡуҙғытырға тейеш.

### Һәләтте мөхит тә үҫтерә

Атайым үҙе һөйләүенсә, музыкант буласағымды минә 6 ай булғанда уҡ аңлаған. Бәлки, бер аҙ шыттыралыр, әммә хәл былайыраҡ була. Өйҙә икебеҙ генә ҡалғанда, мин илағас, тынысландырам тип, ниндәйҙер көйҙө көйләгән. Илауҙан туктап, ошо уҡ көйҙө мин дә ҡабатлап күрһәткәнмен һәм, ишеттеңме, тиған кеүек атайыма ҡарағанмын. "Үҫкәс, музыкант булыр был бала, тип уйланым шунда", - ти атайым. Миңә 4 йәштәр тирәһендә уйынсыҡ пианинола хатта бик етди рәүештә "Варшавянка" кеүек революцион көйҙәрҙе уйнай инек ағайым менән. Беҙ бәләкәй саҡта Черниковкала йәшәнек, өйөбөҙгә башҡорт яҙыусылары йыш килә ине. Шулай кемдер: "Үҫкәс, кем булаһығыҙ?" - тип һораны. Ағайым нимә тип яуаплағандыр, хәтерләмәйем. "Урал кем була?" - тинеләр. Бер аҙға һуҙылған паузанан һуң кемеһелер: "Композитор", - тине. Нимә аңлатҡанын белмәһәм дә, был һүҙ оҡшап ҡалды. "Эйе, мин композитор булам", - тинем. Уҡый-яҙа белмәгән саҡта уҡ ноталарҙы белә инем.

Бер көндө балалар баҡсаһына атай менән әсәй килеп, көндөҙгө йоҡонан уяттылар ҙа, мине сәнғәт институтына алып киттеләр. Пушкин урамы буйлап барҙыҡ. "Хәҙер бер ағай менән осрашабыҙ, берүк башҡортса һөйләш, ул башҡортса һөйләшкәндәрҙе ярата", - тинеләр юлда. Хәҙер был кабинетта композиция кафедраһы урынлашҡан, шул кабинетҡа индек. Унда Заһир Исмәғилев ултыра ине. Фортепиано эргәһенә саҡырып, нота белеүемде, ритм, ишетеү һәләтен тикшереп, был малайҙы уҡытырға кәрәк, тине. 5 йәш ине минә ул саҡта. Махсус музыка мәктәбендә, Н. Сабитов исемендәге 1-се музыка мәктәбендә уҡыным. Юлай ағай Ғәйнетдиновтың кәңәше менән сәнғәт училищеһын тамамланым. Сөнки бында музыка теорияһын Европа өлгөләрендә уҡыталар. Бөгөн ошонда алған белемем миңә этник музыканы Европа музыкаһы менән берләштерергә мөмкинлек бирәләр.

Үҙем ҡурайҙа уйнамайым, тик күп ҡурайсыларҙың минең көйҙәремде уйнауына бик шатланам. Былтыр Салауат һәйкәлендә 100 ҡурайсы йыйылып, сараны минең "Салауат" менән башлауын да тарихи ваҡиға тип ҡабул иттем. Ул Мостай Кәримдең "Салауат" пьесаһына 2004-2005 йылдар тирәһендә яҙылғайны. Башлап Азат Биксурин уйнаны спектаклдә. Эстон көйөн башҡорт көйө менән ҡушыуҙан үҙәктәрҙе өҙөрлөк һағышлы көй тыуғайны. Роберт Юлдашев та, Азат Биксурин да был көйҙө төрлө урындарҙа яратып уйнап йөрөй. Йәғни, "Салауат" та спектаклдән сығып, күптән үҙенең ҙямышы менән йәшәй. Тыуған ере, халҡының азатлығы өсөн көрәшкән Салауаттың ошо ерҙәрҙән йыраҡта йәшәргә мәжбүр ителеүе, ошо һыҙланыуҙы бирергә тырыштым һәм был килеп сыҡҡандыр, тип ышанам. Халҡыбыҙҙың яҙмышы тураһында уйланыуҙар шулай уҡ "Заманалар" тигән көйҙә сағылыш тапты. Аныҡ герой менән бәйле булмаһалар ҙа, аныҡ дәүер, тарих менән бәйле темалар минең ижадымда бик күп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Композитор Урал Иҙелбаев, ысынлап та, ғәжәйеп ижади яҙмышлы кеше ул. Драма әҫәрҙәренә, кинофильмдарға көйҙәр, балалар мюзиклдары, балалар балетына музыка, быға эстрада йырҙарын, академик әҫәрҙәрҙе лә өҫтәһәң - ижадының мең төрлө балҡышына һоҡланмайынса булмай. Үҙенә генә хас стиле булған композиторҙың ижады, үҙе әйтмешләй, ихлас йөрәктән сыҡҡанғалыр ҙа, тамашасыһының да күңеленә юлын таба.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

✓ Үҙебеҙҙең башҡорт теленә Аллаһы Тәғәлә шундай асҡыстар һалған, уның аша әллә күпме телдәрҙе еңел үҙләштереп була. Мәҫәлән, мин сит илдә йөрөгәндә кемдер берәүҙең "Сәнкью" тигәнен ишетһәм, уның урыҫ икәнлеген аңлайым.



# ЙӨҘ ҘӘ БЕР ҒҮМЕРЕМ...

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**"Кеше үҙе камил йән" тигән төшөнсәгә туҡталып китәйек әле...**

- Эйе, һәр әҙәм үҙе камил, бөтөн йән. Шунлыҡтан, бәхетте ирендән, балаларындан, башҡаларҙан эҙләү хата. Былары ул бәхет тигәндә тулыландыра торған нәмәләр генә. Бәхетле булыу һинең парлымы, парлы түгелме, баймы, бай түгелме, матурмы, матур түгелме тигән сиктәргә лә һыймай. Бер ваҡыт, сәләмәтлегем ҡаҡшап киткән йылдарҙа, йога менән шөғөлләндем. Һиндостандан килгән уҡытыусының дәресенә йөрөп алдым. Шунда уға һорау бирәбеҙ: "Йога нимә бирә?" Ул әйтә: "Бер нәмә лә бирмәй. Әҙәмгә кәрәк булған бөтөн нәмә лә уның эсендә бар, уға барыһы ла бирелгән. Бары беҙ үҙебеҙҙең аңһыҙлығыбыҙ менән ҡомһоҙлоҡ, көнсөллөк, хөсөт, алдаҡ, уҫаллыҡ тигән насар нәмәләр менән булмышыбыҙҙағы бәхет сығанағын инешебеҙҙе сүпләйбеҙ һәм бәхетһеҙлек халәтенә инеп алабыҙ. Йога бына шул юлды таҙартырға ярҙам итә. Эске донъяны тулы һәм камил итеп, тыныс һәм саф итеп алмайынса, тышҡы донъяның бер йәме лә ҡәҙерле булмаясаҡ". Ошо асылды илле йәштәргә етәрәк кенә төшөндөм.

Шул уҡ ваҡытта бер нәмә лә гел насар ғына булмай. Атайҙарының эсеүенә бергәләп ҡаршы тороу балаларым менән бер-беребеҙгә терәк булырға өйрәтте. Улар нимә яҡшы, нимә яман икәнен үҙ тәжрибәләрендә күреп үҫте. Ҡыҙым тормошта, ике өйләнебеҙ бар. Улым әле өйләнмәгән. Ул математик, аспирантура тамамланы. Улар бит инде ҡала балалары. Минең дә эш буйы, командировкалар, дежурстволар, аҙаҡтан ике йыл буйы Санкт-Петербургта улыным, ике ай һайын ун бишәр көнгә бара инем. Донъяны балалар бәләкәйҙән үҙҙәре көттөләр. Ҡыҙым тормошта ныҡ баҫып тора торған кеше, аяғы ерҙә, башы ҡуҡтә. Улым менән беҙ осонон ҡорап китеүсәнбеҙ. Шуға күрә йыш ҡына берәй нәмәне хәл итергә кәрәк булһа, "Әйҙә, апайың менән кәңәшләшәйек", тием.

Кейәүҙән дә уңдыҡ. Бик матур, кеше ҡәҙерен белә торған, мөхәббәтле ғаиләнән.

Улым менән ҡыҙым, башҡорт мәктәбе алыҫ булыу һәм йөрөтә алмау сәбәпле, рус мәктәбендә уҡынылар. Әммә икеһе лә башҡортса иркен аралаша ала. Кейәүебеҙ, Себерҙә үҫкән бала, башта башҡортсаны аңлай алмай аптырана ине, йылап ул да өйрәнде. Ейәндәремде үҙем үҫтерҙем бит инде, улар башҡортса тытылдап тора. Хатта бер мәл, ата-әсәләре русса һөйләшеп киткәс, ейәнсәрем Камилә һынсыл ҡарап ултыра биргән дә: "Һеҙ нимә? Өләсәйемде ихтирам итмәйһегеҙме?" - тип әйтеп һалған.

Балаларҙың туған телендә һөйләшмәүен һәм һөйләшергә теләмәүен мин ата-әсәләрҙең комплексы тип аңлайым. Ауылдан сыҡҡан кешеләр рус телен белмәүҙәрен үҙ тормоштарындағы бер ҡаршылыҡ һәм кәмселек итеп ҡабул итә. Был комплекс уларҙы оялырға, тартынырға мәжбүр иткән һәм автоматик рәүештә ул балаларға тапшырылған. Ғөмүмән, туған телде һаҡлау иң беренсе сиратта һәр ата-әсәнең үҙенән тора.

**Йәнһүҙтәрҙә шундай тәртип бар бит әле, йәмғиәт алдындағы ниндәйҙер бурыстарын үтәгәс, мәҫәлән, бала табып үҫтереп, ғаилә ҡороп, уны ниндәйҙер ваҡыт халҡы өсөн эшләткәс һ.б., кеше нимә теләй, шуны эшләй ала, йәнәһе. Һеҙ ҙә шуның кеүек, илле йәштәр тирәһендә сит телдәр өйрәнеп, сит илдәргә уҡырға китеп, хатта Европала йәшәп тә ҡайттығыҙ, шулай бит?**

- Эйе, шулайыраҡ булды. Ололарҙың үҙ өҫтөндә эшләүе һәм шәхес булараҡ үҫергә ынтылыуы - норма. Беҙҙә иһә ололар пенсияға сығырға ла, тыныслыҡҡа китергә генә теләй. Һеҙ әйткәнсә, илле йәшемдә инглиз теленән имтихан тотоп, йыл ярым эсендә Европа университетына барып уҡырлыҡ кимәлдә өйрәнә алдым был телде. Грамматикаһын белеп етмәйем, бәлки, һөйләмдәрҙе хаталы төҙөйөмдөр, әммә мине аңлайҙар ине, дәрестәрҙә яуап бирҙем, семинарҙарҙа ҡатнаштым. Бер йыл Амстердам университетының студенты булып, ҡәҙимге аралашып йәшәнем. Бер ауырлығы ла булманы. Телде шымартыр өсөн төркөмдәштәрем менән күп аралаштым, хатта анекдоттар һөйләп ташлай торғайным. Былар көлә. Аптырап һорайым: "Һеҙ анекдоттан көлһәгеҙме, әллә минәнме?" Тегеләр: "Икеһе лә бар инде", - тип артабан көләләр. Шулай ярты йыл тирәһенән һәпте-юк шымарғас, дуҫтарым француз, кореец, африканец, бер биш-алты кеше, кафела ултырабыҙ ҙа, шаяртам: "Иҫәр кеүек күренһәм дә, мин аҡыллы ғына кешемен ул", - тим. Шунда бер дуҫым, Африка шағиры әйтә ҡуйҙы: "Быны әле Амстердам күгендә ҡояш күренмәй, әммә беҙ бит болоттар арьяғында ҡояш барлығын беләбеҙ һәм был хәҡиҡәтте иҫбатлау кәрәкмәй. Шуның кеүек, һинең аҡыллы икәнеңде беҙ ғинуарҙа уҡ күргәйнек инде".

Шулай ҙа мин үҙемде рус мәҙәниәтенән дә айырғым килмәй. Нисек булғанда ла беҙ донъя кимәленә рус теле аша сығабыҙ. Ситтә мине "русская" тип йөрөтәләр ине һәм быны бер кире яғын да күрмәнем. Беҙ башҡорт, эйе, үҙ милләтебеҙ мәнфәғәттәрен яҡлап көрәшәбеҙ, әммә был ошо бәләкәй аренала ғына. Ә донъя кимәлендә, Европа кинлектәрендә бәләкәй милләттәрҙең иҫәбе-һаны юҡ һәм берәү ҙә һинең ваҡ проблемаларыңа иғтибар итмәй. Унда күп ғаиләләрҙә балалар өс йәки дүрт телдә иркен һөйләшә. Атаһә төрлө милләттән икән, ғаилә был телдәрҙән барыһын да өйрәнә һәм белә. Халыҡты милләт булараҡ кәмһетеү йәки башҡа сикләүҙәр хатта бәхәс темаһы булып та тормай.

Африкаға барыр алдынан икмәк-тоҙлоҡ булһа ла тип француз телен маташтырҙым. Ейәндәрем менән французса йәнһүрәттәр ҡарай инек. Үҙебеҙҙең башҡорт теленә Аллаһы Тәғәлә шундай асҡыстар һалған, уның аша әллә күпме телдәрҙе еңел үҙләштереп була. Мәҫәлән, мин сит илдә йөрөгәндә кемдер берәүҙең "Сәнкью" тигәнен ишетһәм, ҡарамайса ла уның урыҫ икәнлеген аңлайым. Рустарҙың артикуляцион аппараты, ауыҙ ҡыуышлығы бик күп өндәрҙе әйтергә ҡулайлашмаған. Ә беҙҙең башҡорт теле әйтеп бөтөргөһөҙ мөмкинлектәр аса. Хәйер, был айырым ҙур тема, ул хаҡта сәғәттәр буйы һөйләргә әҙермен. Ғөмүмән, тел мәсьәләләренә ҡағылышлы үҙ тәжрибәмдән сығып формалашҡан айырым фекерем бар. Ҡыҙыҡ булһа, был хаҡта башҡа ваҡытта һөйләшергә кәрәк булыр.

**Бөгөн һеҙ ауыл эшҡыуары...**

- Эшҡыуарлыҡҡа өйрәнеп маташыусы, тип әйтер инем. Был иҫ киткес ҡатмарлы, ауыр, көйөнөстәр, рухи һәм физик көсөргәнеш талап иткән тормош. Дөрөҫөн әйткәндә, әле беҙ, партнерым, ярҙамсым, терәгем булған улым менән үҙебеҙҙе юл сатында торған һымаҡ тоябыҙ. Дүрт йыл эсендә бик күп нәмә аңланыҡ, сиктән сығып арыныҡ. Ил аҙмышы, ауыл аҙмышы, тамырҙары ауылда булған халыҡ аҙмышы - гилемле, аңлы, ғәмле кеше булараҡ, был хаҡта уйламайынса мөмкин түгел. Тыуған ауылыма ҡайтып, пекарня асҡанда мин: "Ни өсөн башҡорт ауылдарында бизнес бармай?" - тигән һорауға яуап тапмаҡ булып башлағайным. Хәҙер мин был һорауға яуапты беләм. Әммә хәҙер, бәлки, мин маҡсатты дөрөҫ ҡуймағанмындыр, тип уйлайым. Эште уңышлы алып барған кешеләр ҙә бар бит. Улар нисек эшләй? Нисек уңыш ҡазанырға? Хәҙер шул турала уйлайны һәм эшләйһе бар. Был да мине көнө-төнө борсоған ҡатмарлы мәсьәлә. Был турала китап яҙырлыҡ материал туплағанмын, хатта яҙғанмын да. Тик унда әле шул тиклем төшөнкөлөк, сараһыҙлыҡ - хатта уны әлегә кеше күҙенә лә күрһәтерлек түгел. Дөрөҫөн әйткәндә, илдең хәле лә, беҙҙең (барыбыҙҙы ла күҙ уңында тотам) хәлебеҙ ҙә үтә ҡыуанырлыҡ түгел.

**Артабан һеҙҙең өсөн бизнес беренсе урында буласаҡмы, әллә яҙыусылыҡмы?**

- Сараһыҙлыҡ тойғоһо кисергәндә, үҙемде көсһөҙ тойғанда, мин һәр ваҡыт яҙырға тотонам. Шуныһы ҡыҙыҡ, иң ҡыйын ваҡытта яҙған әйберҙәрем һәр саҡ ныҡ оптимистик, күтәренке рухта була.

Йәнә лә, журналисмы, тәржемәсеме (әйткәндәй, һуңғы егерме йылда мин тап тәржемә эше менән тамаҡ туйҙырам, хатта пекарняны ла шул аҡсаға асырайым), икмәк бешереүсеме, эшҡыуармы - мин яҙыусы. Ул минең булмышым. Хатта концертта ултырғанда ла ҡайҙалыр мейелә, ә быны шулай яҙырға булыр ине, тип күҙ алдына килтереп ултыраһың. Шулай икән, үҙенәнүҙе аңлашылалыр. Яҙыр өсөн ысынбарлыкты белергә, фекер туплarға, яныrға, көйөргә кәрәк. Шуға күрә беҙ, яҙыусылар, иң ауыр мәлдәрҙә лә бер-беребеҙҙе, ярар, уның ҡарауы яҙырға ҡайһылай шәп материал булды, тип йыуатырға яратабыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был һөйләшеү Гөлсирә апайҙың йөҙ ҙә бер ғүмеренең береһе хаҡында булды, ахыры. Әҙибәнең үҙе кеүек, фәлсәфәүи килеп сыкты яҙма ла. Өс сәғәт сәй артында илатты ла, көлдөрҙө лә ул мине. Былаға аңлай алмаған ҡайны бер мәсьәләләрҙе төшөнөп, яуап таба алмаған һорауҙарҙың сиселешен белеп ҡалғандай булдым... Э-эй, аҡыллы апайҙарыбыҙ бар шул, Аллаға шөкөр, тип уйлайым ҡабат-ҡабат.**

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА
әңгәмә ҡорҙо.

ЯРҘАМ



## ТУЙ ТАБЫНЫНДА...
### мәҡәлдәр, әйтемдәр

- Ике йән бер булһа, ике сер бер була.
- Ике һыңар - бер пар.
- Ике ярты - бер бөтөн.
- Икмәк тәмле тоҙ менән,
  Йорт рәхәт ҡыҙ менән.
- Икмәк тәме тоҙ менән,
  Өйҙөң йәме ҡыҙ менән.
- Икмәк юғы ямандыр - ҡаты-ҡото кимертә,
  Ҡатын юғы ямандыр - ҡарт әбейҙе һөйҙөртә.
- Илдә - илле, береһенән береһе елле.
  Тик минең егетем иң ипле.
- Илдә матур күп булыр,
  Йән һөйгәне бер булыр.
- Ир аҡыллы булһа, ҡатын күндәм була.
- Ир аҡыллыһы өс йылғыһын алдан уйлар,
  Ҡатын аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар.
- Ир - ат, ҡатын- арба.
- Ир-ат өйҙә ултырһа ла, күңеле тышта,
  Ҡатын-ҡыҙ тышта йөрөһә лә, күңеле өйҙә.
- Ир аты менән, ҡатын ире менән маҡтаныр.
- Ир бала - йортҡа терәк,
  Ҡыҙ бала - йорт эсендә биҙәк.
- Ир - баш, ҡатын - муйын.
- Ир иткән дә ҡатын, ер иткән дә ҡатын.
- Ир - келәт, ҡатын - йоҙаҡ.
- Ир килтерә белһен, ҡатын еткерә белһен.
- Ир таба, ҡатын тота.
- Ирҙәр - имән тамыры,
  Ҡатындар - бойҙай ҡамыры.
- Иҫке күлдәк тәнгә яҡын,
  Үҙ ҡатының йәнгә яҡын.
- Кем менән даның сыҡһа,
  Шуның менән йәнең сыҡһын.
- Килен алғансы - үҙ улың,
  Килен алғас - кеше улы.
- Килен булһаң - ҡәйнәгә ярамаҫһың,
  Ҡәйнә булһаң - киленгә ярамаҫһың.
- Күҙ меңде күрер, күңел меңде һөйөр.
- Кәбән аҫтында сыскан үлмәй,
  Ир аҫтында ҡыҙ үлмәй.
- Кәләш алһаң төн ҡыҫҡара.
- Ҡатын алһаң - белеп ал,
  Алдын - артын ҡарап ал.
- Ҡатын алһаң - күреп ал,
  Тәү мәлендә ҡотон ал.
- Ҡатын алһаң, һайлап ал,
  Аяҡ - ҡулын бәйләп ал.

Фәнүр ШАҺИЕВ
әҙерләне.

(Дауамы бар).

***✓ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺОЛО БУТҠАҺЫ АША!

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сәтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - картмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән нормана күпкә юғары. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм тукымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьҫиренән йөрәк сире кисҡенләшеп - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларынан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

■ Тәмәке тартыу бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай. Айова штаты университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙын уйлау һәләте түбәнәйә. Тест ярҙамында ғалимдар баш мейеһе функцияларын тикшерә һәм фекерләү функцияһының боҙолоуын асыҡлай. Был ҡатын-ҡыҙ организмында бүленеп сыҡҡан эстроген гормоны менән бәйле һәм тәмәке ҡанда был матдә тупланыуҙың аҙайыуына килтерә.

■ Әгәр ҙә башығыҙ йыш ауырта икән, дарыуханаға барырға ашыҡмағыҙ. Тайвандың милли университеты табиптары белдереүенсә, баш ауыртыуын ябай массаж бөтөрә. Бынан тыш, массаж күнелһеҙ хәлдәрҙе оноторға мөмкинлек бирә. Ғалимдар фекеренсә, массаж депрессияны еңергә лә ярҙам итәсәк.

■ Антибиотиктар ҡабул иткән ваҡытта һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә Миссурилағы Медицина мәктәбе университеты белгестәре. Бактиһән, бындай дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау ишетеү һәләтенең насарайыуына килтереүе ихтимал икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ике препарат - канамицин һәм уның балалар өсөн тәғәйенләнгән аналогы гентамицин нигеҙендә үткәрә. Был ике препарат та ауырыуҙарға йыш тәғәйенләнә. Табип билдәләгән дозаны 10-20 процентка ғына арттырыу ҙа ишетеү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтимал, тигән һығымтаға килә ғалимдар.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**Ислам диненең айырым фәлсәфәүи йүнәлешен тәшкил иткән суфыйсылыҡ халҡыбыҙҙың тарихи үткәне менән туранан-тура бәйле. Аллаһы Тәғәләгә һығынып, донъяның барлыҡ ығы-зығыһынан, йәнде һәм тәнде ымһындырған әүрәткестәрҙән тулыһынса арынып, саф йәнлегә әүерелә алғандарҙы суфый тигәндәр. "Суфый" һүҙенең мәғәнәһе лә "саф йәнле" тигәнде аңлатыуы шул хаҡта һөйләй. Тарихи мәғлүмәттәр буйынса, суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәтен алға һөргән һәм үҙ мәҙрәсәһендә уҡытыуҙы ошо йүнәлештә ҡорған атаҡлы Зәйнулла Рәсүлевты ололап Нәҡшбәндиә тип атап йөрөткәндәр. Уның мәҙрәсәһендә генә 7 меңдән ашыу башҡорт зыялыһы һабаҡ алыуы билдәле. Ә шулай ҙа, кемдәр һуң улар суфыйҙар?**

# АЛДАТҠЫС ЛӘҘЗӘТТӘР...

## ымһындыра шул инде



Бик борон заманда күккә ашҡан бейек тауҙарҙағы ҡарурмандар араһында донъя ығы-зығыһынан арыған, донъяның фани икәнлегенә тамам төшөнгән, ҡалған ғүмерҙәрен Аллаһы Тәғәләгә арнаған, уға ғына ғибәҙәттә зекерҙәр ҡылған изге дәрүиш суфыйҙар йәшәгән, ти. Был урын бик бай булып, суфыйҙар ошондағы тәбиғәттә үҫкән төрлө ризыҡ менән генә туҡланып көн иткән. Эскән һыуҙары көмөштәй саф, балдай татлы, шифалы шишмәләрҙән икән.

Изге суфыйҙарҙы аяғандай, бында ҡыштың һалҡыны ла, йәйҙең көйҙөргөс томра эҫеһе лә артыҡ мазаһыҙламаған. Йомшаҡ ҡына иҫкән ел дә тик хозурлыҡ, тик сафлыҡ ҡына алып килеп торған. Суфыйҙар ғүмерҙәрен ғибәҙәттә үткәргәс, ҡәлебтәре (йөрәктәре) изге доғаларҙан сафланып, күңелдәре гонаһ-бысраҡтан таҙарынып, йөҙҙәре һәр ваҡыт рухи сафлыҡ, илаһи нур бөркөп торған.

Бер саҡ уларҙың береһенең башына шундай уй килгән: "Мин рухи яҡтан бигерәк бәхетлемен, ә батшаның бәхете нисегерәк була икән?" Шулай итеп, был суфыйҙың бер генә көн булһа ла батша булып ҡарау теләге уянған. Ошо ниәтен тормошҡа ашырырға булып, суфый, йәннәттәй төйәген ташлап, батша бәхете эҙләп сығып киткән. Үҙе юлда уйлана бара икән: "Йә, Хоҙай! Ҡолоңдоң теләктәрен ҡабул итеп, бер генә көн батшалар бәхетен татытып ҡарата һаңсы..." Шулай бара торғас, ҡарт суфый, үҙе лә һиҙмәҫтән, алтын-көмөш менән биҙәлгән һарай янына барып сыҡҡан. Ул ҡыуанаҡыуана, күҙҙең яуын алырҙай ҡыуаҡтар, сәскә түтәлдәренә күмелгән баҡса аша үтеп киткән. Туп-тура һарайға, унан аш бүлмәһенә ингән. Алдында быҒаса төшөндә лә күрмәгән татлы ризыҡтар менән һығылып торған өҫтәлде күреп, суфый шулай уйлаған: "Хаҡ Тәғәлә теләктәремде ҡабул итте, хыялымдағыны алдыма килтерҙе. Бер генә көн батша булып йәшәп ҡарайым әле", - тип шатланған.

ТӘҮБӘ

# ИҪЕРЕККӘ СӘЛӘМ БИРМӘ,

## сәләм бирһәң, сәм алма



**Араҡынан күргән ыҙаларымды яҙып үтәйем әле. Миңә генә ҡағылып, башҡаларҙы урап үтһен ине ул хәшәрәт. Шешәбикә менән дуҫлашыуым әсәйемә, ғаиләмә, туғандарыма, дуҫтарыма күпме ҡайғы килтерҙе.**

Бигерәк тә Өфөгә күсеп килгәс, ауырға тура килде. Араҡы ҡоло булып, эшһеҙ аптырап йөрөгән саҡтарҙы һаман да тетрәнеп иҫкә алам. Башта дуҫтар ярҙам итергә тырышып ҡараны, килеп сыҡманы. Бөгөн һәр кем башта үҙен ҡайғырта, шунһыҙ мөмкин дә түгел. Ул саҡтарҙағы араҡы шауҡымы ғаилә тарҡалыуына тиклем алып барып еткерҙе. Иҫкә төшһә, әле лә тәнем зымбырлап, йөрәгем сәнсеп ҡуя. Бигерәк тә ике баланың йүнле кейеме булмауы ҙҙаккә үтә ине. Аҙыкты ҡатын эшенән алып ҡайтырға тырыша, аҡса тигән әйберҙе бик һирәк күрә инек. Ул саҡта атайым тере ине әле. Улы өсөн бигерәк тә ул ҡайғырҙы. Атайымдан, ҡәйнәмдән ярҙам булмаһа, упҡын ситенән тәгәрәүгә күп ҡалмағайны, шикелле. Туғандар ҙа ярҙам ҡулы һуҙҙы. Ауылда йәшәгән апай менән еҙнәй, үҙҙәренең биш балаһынан арттырып, беҙҙең балалар өсөн кейем, картуф, ит ебәреп торҙо. Ярай әле ул саҡта балалар бәләкәй ине, уныбыны аңламайҙар, өлкән туғандарынан ҡалған кейемде кейеп үҫтеләр. Минең унда-бында эшләп тапҡан аҡсам араҡынан артмай.

Шулай бер көн эштән ҡайтыуға өй бушаған, ҡатыным арлы-бирле әйберҙәрен төйнәп, балаларҙы етәкләп, апаһына күсенеп киткән... Бер ай самаһы илке-һалҡы йөрөгәндән һуң, башың эшләмәгәс, ҡулың эшләһен, тип, "шабашник" булып киттем. Иң мөһиме, мин эсеүҙе бөтөнләй ташларға ҡарар иттем. Айыҡ тормошҡа аяҡ баҫҡас, кеҫәлә аҡса күренә башланы, элек күрмәмешкә һалынып үтеп киткән таныштар һаҡ ҡына һаулыҡ һораша башланы. Ҡатын да кире ҡайтты. Эштәр яйға һалынды, тип, ҡунаҡҡа барғанда ғына яңынан бер-ике рюмка тота башланым. Тик шуныһын белмәгәнмен: араҡы менән тәмәкене ҡайҙа ташлайһың, шул урындан яңынан күтәреп алып китәһең икән... Ярай әле, йылға яҡын эсмәй йөрөгән арала айыҡ тормоштоң яҡшы яҡтарын татып, күңелемә һеңдереп өлгөргәйнем. Таныш әбейгә йүгереп тигәндәй барып, яңынан ике йылға тәүбә ҡылдым. Шулай ике йыл үтте, артабан йылдар йылға йәбешеп, ғүмер алға китеп бара.

Тормошта һәр кеше үҙенең эшләнгән эшенә, ҡылығына үҙен аҡларҙай сәбәп таба белә. Эскеселәрҙең аңы был йүнәлештә угата шәп эшләй. Әле бына тәүбәгә килеп яҙып ултырам да, әммә эскелек арҡаһында күргәндәрҙән аяныслыҒын һөйләп тә, яҙып та аңлатып булмайҙыр, тигән фекергә килдем. Бахмурҙан сыға алмай хәл бөткәс, наркология диспансерында ла ятып сығырға тура килде бит хат-

✓ ***Алланы яратыу - аҡылдан, Бәйғәмбәрҙе яратыу - имандан, балаларҙы яратыу - тәбиғәттән, ҡатынды яратыу - мөхәббәттән килә, - тип яуап биргән уға Фатимаһы.***



Суфый иҫке-моҫҡо кейемдәрен ташлап, йыуына, батшаның затлы кейемдәрен кейә һәм ашарға керешә. Бүлмәгә ингән батша хеҙмәтселәре, был хәлде күреп, аптырашта ҡала.

- Һин кем булаһың? Бына-бына батшабыҙ һунарҙан ҡайтасаҡ... - тип, хеҙмәтселәр ҡысҡырырға тотонған.

- Мин бөйөк батшаның дуҫы, уның саҡырыуы буйынса ҡунаҡҡа килдем, - тигән суфый дәрәжә һаҡлап.

Батша хеҙмәтселәре уға ышанған, ашап бөткәс, батшаның ял бүлмәһенә оҙатҡан. Суфый батшаның йомшаҡ түшәгендә донъяһын онотоп, ләззәтле йоҡоға талған.

Ошо мәл арып-талып һунарҙан ҡайтып килгән батша вәзирҙәренең береһен һарайға сапҡын итеп ебәргән.

- Батшабыҙ дуҫын беҙгә ҡунаҡ итеп ебәргәс, уға тип әҙерләнгән ризыҡты ашаттыҡ, - тип ҡаршылаған хеҙмәтселәр вәзирҙе.

Вәзир батша бүлмәһенә барып ингән һәм хырылдап йоҡлап ятыусы суфыйҙы күреп туҙынған.

- Ҡамсы бирегеҙ, батшабыҙҙың бындай дуҫы юҡ, - тип ҡысҡырған вәзир.

Ҡарт тәнен ҡамсы яндырыуҙан тертләп уянып киткән. Барыһы ла суфыйҙы туҡмарға тотонған. Ҡаты туҡмалған ҡарт: "Был - минең донъя ләззәтенә алданыуым өсөн Хоҙайҙың яҙаһылыр. Кеше ни тиклем изгерәк, тәҡүәлерәк булһа, уның Хаҡ Тәғәләнән һораған теләктәре шул тиклем тиҙерәк ғәмәлгә аша, әгәр инде гонаһ ҡылһа, хатта гонаһы бәләкәй булһа ла, яҙаһы шул тиклем тиҙерәк үҙенә ҡайта...", - тип уйлап, донъяның ошондай ҡанундарын аңламағанлыҡтанмылыр, тәненең ҡаты ауыртыуына ҡарамай, ҡысҡырып көлә башлаған. Хеҙмәтселәр уны торған һайын ярһыбыраҡ һыҙырған. Ҡарт тегеләр һуҡҡан һайын ҡысҡырыбыраҡ көлә, ти. Улар суфыйҙы аңын юғалтҡансы туҡмап, һарайҙан ситкә, урман араһына илтеп ташлаған. Аҙаҡ иптәштәре суфыйҙы эҙләп табып, төйәктәренә алып ҡайтҡан. Иптәштәренең береһе ҡыбырҙай алмай ятҡан ҡарттың ауыҙына һөт ҡойоп: "Һин беләһеңме, ауыҙыңа кем һөт ҡойғанын?" - тип һораған. "Минең ауыҙға һөт ҡойҙороусы үҙен онотоп, бер генә көн батшалыҡ ләззәтен татырға теләгән өсөн яза биреүсе Алланан башҡа кем булһын", - тип яуап биргән суфый. Иптәштәре рәхәтләззәттә лә, ауырлыҡ килгәндә лә, Ғәләмдәр Раббыһына ҡарата үҙгәрешһеҙ саф мөнәсәбәттә ҡалған ҡартты күреп ҡыуанышҡан. Тап шундайҙарҙы суфыйҙар тигәндәр.

Тап ошо ваҡытта батша һарайына әйләнеп ҡайтҡан. Үҙе юҡта килеп, алдашып, уға тип бешергән ризыҡты ашаусыға йәне көйөп, ҡартты табып килтерергә бойорған.

Батша ярандары ҡартты табып, типкеләй-туҡмай һарайға килтергән. Батшаны күреү менән ҡарт элеккенән дә ҡысҡырыбыраҡ көлә икән. Батша уны үлтереү менән янаһа ла, тыйылмаған суфый. Яйлап-яйлап батшаның асыуы ғәжәпләнеүгә күсә башлаған. Әгәр ҙә үҙенә бының сәбәптәрен аңлатып бирһә, суфыйға үҙенең тәхетен дә ҡыҙғанмай бирәсәген әйткән батша.

- Күрәһегеҙме, мин бер генә көн үҙемә ошо матди донъяның барлыҡ алдатҡыс ләззәте менән күңелемә хушлыҡ табып йәшәргә теләгәнем өсөн Хаҡ Тәғәләнән ҡаты яза алдым. Ғазап сиктем, туҡмалдым. Көлөүемдең сәбәбе шулдыр: әгәр ҙә мин бер генә көн донъя алдатҡыстарына ымһынып, ялған рәхәтлек менән ләззәтләнгән өсөн ни хәтле туҡмалыу, ыҙаланыуға дусар ителһәм, һеҙҙең ғүмерегеҙ буйы Алланың барлығын да онотоп, донъя ләззәтенә алданып йәшәгәнегеҙ өсөн ни хәтле туҡмалыуығыҙҙы күҙ алдына ла килтерә алмауҙан ғәжиз булып аптырауҙан көләм бит. Әле миңә бүләк итергә теләгән тәхетегеҙҙән баш тартам. Мин бер генә минутҡа ла батша булырға теләмәйем, - тигән суфый.

Был ҡиссаның ниндәй халыҡтыҡы икәнен иҫләмәйем. Әммә үҙҙәрен донъя алдатҡыстарынан арындыра алыусы кешеләрҙе суфыйҙар булғандыр тип уйлайым. Суфыйсылыҡ - ул дини мөхәббәт, донъя тигеҙлеге һәм матурлыҡ фәлсәфәһе. Был фәлсәфә кешелек барлыҡҡа килгән замандарҙан алып беҙҙең көндәрҙә лә йәшәй. Суфыйҙар хәҡиҡәтте Хаҡ Тәғәлә тиеп атап йөрөткән. Хаҡ Тәғәлә мөхәббәт икәненә инанған.

Һинд фәйләсүфтәре Хаҡ Тәғәләнең өс төрлө өлөштән торғанын белгән:

- Сат - бөтөнбарлыҡ, матди донъя;
- Чит - аң һәм көстәге рух (энергия);
- Ананда - ләззәт, мөхәббәт, яратыу.

"Яратыу" һүҙе "барлыҡҡа килтереү" тигәнде аңлата. Тимәк, мөхәббәтһеҙ бер нәмә лә барлыҡҡа килә алмай. Тимәк, донъяны Аллаһы Тәғәлә яратҡан, барлыҡҡа килтергән икән, ул донъяны мөхәббәте менән бар иткән. Барлыҡ йән эйәләре, кешеләр ҙә мөхәббәт емеше.

Бер саҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр кейәүе Ғәлиҙән һораған:

- Алланы ратаһыңмы?
- Яратам, - тип яуап биргән кейәүе.
- Бәйғәмбәребеҙҙе ратаһыңмы?
- Яратам...
- Балаларыңды яратаһыңмы?
- Яратам...
- Ә ҡатыныңды яратаһыңмы?
- Яратам, - тигән кейәү кеше.
- Һин, тимәк, барыһын да яратаһың. Ә ҡайһылай итеп бынау хәтле мөхәббәтеңде эсеңә һыйҙыра алаһың? - тип һораған Бәйғәмбәр.

Кейәүе был һорауға яуап бирә алмаған. Ҡайтҡас, ҡатыны Фатиманан һораған.

- Алланы яратыу - аҡылдан, Бәйғәмбәрҙе яратыу - имандан, балаларҙы яратыу - тәбиғәттән, ҡатынды яратыу - мөхәббәттән килә, - тип яуап биргән уға Фатимаһы.

**Ғәле ХӘЙҘӘРОВ.**

та. Туғандар таныш табиптар менән һөйләшеп килешкәс, үҙ иркем менән барҙым. Башта ҡурҡыныс түгел ине, бөтә мәхшәр өс көндән һуң башланды. Күрше бүлмәләрҙә йәш кенә егеттәр наркоманлыҡтан дауалана. Аҡсаһы түләнгәс ни, уларҙың һәр береһен телевизоры, һыуытҡысы булған айырым палатаға урынлаштырғандар, теләгән ваҡыттарында ашарҙарына килтереп торалар. Тәү ҡарамаҡҡа, һап-һау әзмәүерҙәй ирҙәр, эштән арып, санаторийҙа ял итеп ята, тип уйларһың. Тик бикле ишектәр, һаҡсы менән саф һауала йөрөүҙәр генә үҙендең ҡайҙа эләккәнеңде иҫкә төшөрә. Ул егеттәрҙең эсендә ниндәй уйҙар ҡайнағанын улар үҙҙәре генә беләлер инде. Шул саҡта бөтөн донъя һиңә ҡаршы һәм һинең ауырығаныңа ғәйепле һымаҡ тойола.

Айыҡ тормош өсөн көрәшеү кешенән күп көс талап итә. Бигерәк тә, бөгөнгө көндә. Киноларҙа, телевидениела бит хәҙер күп кешеләрҙең эсеп тә, бай, һәйбәт йәшәүен йыш күрһәтәләр. Йәштәр уны шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул итә. Урам буйлап һыра тотоп йөрөүсе йәштәрҙе күреп йәлләйем. Был ғәҙәт модаға инеп бара инде, буғай. Ул йәштәрҙең күбеһе уҡып, һөнәр алыу урынына физик эштә йөрөүҙе хуп күрә. Сығып булмай торған ҡуласаға эләгә түгелме ундайҙар? Юғары уҡыу йорттарына, техникумдарға инә алмағандар өсөн төрлө курстар, һөнәрселек училищелары бар ҙаһа. Һөнәрле кешегә һәр саҡ ҡулай эш табыла. Башҡаларҙың уңышына көнләшмәй, ҡыуанып, сәмләнеп йәшәр саҡта, ваҡыттары заяға үтмәһен ине.

Йөҙ йәшен тултырып үлгән олатайымдың әйткәне ҡолағымда әле лә сыңлай кеүек:

*Иҫереккә сәләм бирмә,*
*Сәләм бирһәң, сәм алма.*
*Аңа яҡшылыҡ итмә,*
*Андин яҡшылыҡ көтмә.*

Аҡыл өйрәтә был, тип уйламағыҙ, фәһем булһын, тип яҙам. Йөҙйәшәр ҡарт белмәй әйтмәгәндер.

**Ғәббәс СӘҒИТЙӘНОВ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# БЕР КӘҢӘШ БАР

Ошо кәңәште мыйығығыҙға урап ҡуйығыҙ: әгәр ҙә эсеүҙе ташлауҙы үҙегеҙ теләмәһәгеҙ, һеҙгә бер кем дә ярҙам итә алмай - өшкөрөүҙең дә, үлән төнәтмәләренең дә, бал ҡортонан елкәгеҙҙе саҡтырыуҙың да файҙаһы юҡ. Гипноз да, нарколог та, һаулыҡ һаҡлау министры ла ярҙам итә алмай. Хәҙер элекке кеүек көсләп дауалау ҙа юҡ. Азатлыҡ! Аҡсаң булһа, миңә тиһә, ниңә араҡы менән ҡойонмағанһың, һөйөклө бисәңдән башҡа берәү ҙә бер һүҙ әйтмәҫ.

Эсеүҙе ташларға уйлаһаң, дарыуға аҡса сарыф итеп торма - бигерәк ҡиммәт улар хәҙер. Беләһегеҙме, дарыуҙарға ҡарағанда ла көслөрәк бер сара бар. Ул миңә ярҙам итте. Биллаһи. Ул... һеҙҙең үҙегеҙҙең һейҙегегеҙ. Ысын!

Кәңәшем шул: кеҫәгеҙҙә йыйылмалы стакан алып йөрөгөҙ. Ғәҙәт буйынса, иҫерткес эскегеҙ килә башлаһа, кеше күрмәгән урынға ышыҡланып ҡына үҙегеҙҙән сыҡҡан шыйыҡсаны стаканға бушатығыҙ ҙа - һоп! Иманым камил, шунда уҡ эсеү теләгегеҙ юҡҡа сығасаҡ. Теләк тә юҡҡа сыға, табиптар әйтеүенсә, һейҙектең һаулыҡҡа ла файҙаһы бар.

Әгәр ҙә эсергә ерәнһәң, уны араҡы йә шарап, һис юғы, самогон тип күҙ алдына килтер. Ҡыҫҡаһы, башыңды эшләт, тик бының турала ләм-мим - берәү ҙә белмәһен дә, һиҙмәһен дә. Шым ғына эсеп тик йөрө, һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәҫ. Бер айҙан араҡыға ғына түгел, һыраға ла әйләнеп тә ҡарамаҫһың - быны мин үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм.

**Сәмиғулла ҺАУБУЛДИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

"Тормошто эттәр кеүек ҡабул итергә" тырышып, ҡапыл аңыңдың даими рәүештә ҡайҙалыр ысынбарлыҡтан ситтә йөрөгәнен аңлайһың. Ҡурҡыныс түгел, күнегергә мөмкин. Бының өсөн төшкө аш мәлендә ашаған һәр ризығыңдың тәмен тойоғоҙ. Кем менәндер әңгәмәләшкәндә уның һәр һүҙен ишетергә тырышығыҙ. Музыка тыңлағанда һәр нотаны ишетегеҙ. Прогулкаға сыҡҡанда, һәр ағасты күрегеҙ. Ваҡыт үтеү менән шул рәүешле йәшәү еңелерәк була башлар.

Үҙегеҙгә: "Минең бөтөн нәмәгә ваҡытым етә", - тип әйтегеҙ. Ниндәй генә аффирмацияны алһаҡ та, уны даими ҡабатлаһаҡ, ул төпкө аңда нығынасаҡ. Тимәк, ҡайҙалыр ашыға башлағанда: "Бөтөн нәмәгә ваҡытым етә", - тип үҙегеҙҙе иҫкәртегеҙ.

Суфыйҙар юҡҡа ғына, беҙ йоҡлап тыуабыҙ, төштә йәшәйбеҙ һәм уянырға ла өлгөрмәй вафат булабыҙ, тимәй. Минеңсә, улар беҙҙең бер нәмәгә лә иғтибар итмәй йәшәүебеҙгә ишаралай. Беҙ бик йыш аңыбыҙҙы әллә ҡайҙарға ебәреп, тормош үҙәненән роботтар кеүек хәрәкәт итәбеҙ шул.

## Ни өсөн релаксация кәрәк?

Тормошта бөтөн нәмәне һөҙөмтә өсөн эшләйбеҙ. Әммә тәрән релаксация, медитация осрағында йәки доға уҡығанда улай түгел, бында бер ниндәй һөҙөмтә күҙалланмай. Йәғни, киләсәктә нимәлер файҙалы нәмә булыуы мөмкин, әммә әлеге ваҡытта ағымдағы мәлгә иғтибар тупларға кәрәк. Был осраҡта һөҙөмтә һәм бүләк булып процесс үҙе тора.

Әгәр тәрән релаксацияны көндәлек тормошобоҙға индерһәк, бер ни тиклем ваҡыттан һуң был күнекмәләрҙең асылы көндәлек тормошобоҙҙа сағыла башлаясаҡ: тынысыраҡ буласаҡбыҙ, интуициябыҙ көсәйәсәк. Һәр кемебеҙҙең үҙенең эске тауышын ишетеү мөмкинлеге бар, әммә әлегә ул бик көсһөҙ. Тормош шау-шыулы һәм ҡайнап торғанда уны ишетеүе бик ауыр. Тик тыныҡ тормош ығы-зығыһынан арыныу менән эске донъяны ишетә башлайбыҙ. Һәр кемдә интуиция бар, әммә беҙ уға иғтибар итмәйбеҙ.

Ғилми тикшеренеүҙәр раҫлауынса, сәләмәтлек өсөн аңға ял бирергә кәрәк. 1978 йылда физиолог Роберт Кейт Уоллас тиҫтә йылдарға һуҙылған тәжрибәһен тамамлай. Ул даими рәүештә медитация менән шөғөлләнгән кешеләрҙе тикшерә, уларҙың биологик йәшен өс параметр - ҡан баҫымы, ишетеү һәләте һәм алыҫтан күреү һәләтенең үҫеше буйынса үлсәй. Һөҙөмтәлә, медитация менән 5 йыл шөғөлләнеүселәр тиҫтерҙәренән биологик йәш буйынса 5 йәшкә йәшерәк була. Ә 5 йылдан артыҡ шөғөлләнеүселәрҙеке хатта 12 йыл тип билдәләнә, йәғни 60 йәштә медитация менән шөғөлләнеүселәр физиологик күҙлектән ҡарағанда 48 йәшлектәрҙән айырылмай. Көслө кешеләрҙең күпселеге ваҡыт-ваҡыт релаксация менән шөғөлләнә. Сөнки ял итергә ваҡыт тапмаусылар ялһыҙ йәшәй алмай. Быны күптән ҡағиҙә итеп алып, дөрөҫ йәшәргә өйрәнергә кәрәк булған, ләкин дөрөҫ йәшәй башламайбыҙ бит.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



**22 ЯНВАРЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.05 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Секретарша". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.35 "Паук". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
01.40, 03.05 "Чужой". Худ. фильм (16+).

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 1-2-я серии. Драматический сериал (12+).
2315 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Прекрасный принц и фея Люпина". Худ. фильм (6+).**
**11.00, 14.00 Итоги недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30, 23.15 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Няньки". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

**23 ЯНВАРЯ
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Секретарша". 3-я и 4-я серии. Сериал (16+).
23.35 "Паук". 3-я и 4-я серии (16+).
01.40, 03.05 "Чужие". Худ. фильм (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 3-4-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Волшебное деревце". Сериал.**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһак".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Йокерит" (Хельсинки).**
**22.00 "Вечерний телецентр".**
**23.00 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Дети Хуанг Ши". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (12+).**

**24 ЯНВАРЯ
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Секретарша". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Паук". 5-я и 6-я серии (16+).
01.40, 03.05 "Чужой-3". Худ. фильм (16+).

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 5-6-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Страна небывалого изобилия". Худ. фильм (6+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана".**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Он был не только антропологом..." (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башкорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-сага" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Залечь на дно в Брюгге". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

**25 ЯНВАРЯ
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.50 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Секретарша". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Паук". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
01.40, 03.05 "Чужой-4: воскрешение". Худ. фильм (16+).

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 7-8-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Удачливый Ганс". Худ. фильм (6+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Кожевников из рода Кожевниковых" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башкорттар" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 Баскетбол. Чемпионат России.**
**01.00 "Лунная афера". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (12+).**

**26 ЯНВАРЯ
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Своя колея". К юбилею Владимира Высоцкого.
23.40 "Афера под прикрытием". Худ. фильм (16+).
02.00 "Руби Спаркс". Фантастическая комедия (16+).
03.55 "Мисс переполох". Худ. фильм (16+).

**РОССИЯ 1**

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 02.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.20 "К 80-летию Владимира Высоцкого". Док. фильм (12+).
00.25 "Таблетка от слез". Мелодрама (12+).

**БСТ**

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Принцесса Мален". Худ. фильм.**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Ф.Буляков. "Эх, холостяки, холостяки..." (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан"**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байык" представляет..." (12+).**
**24.00 "Восьмерка". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 В.Дельмар. "Дальше тишина" (12+).**

**27 ЯНВАРЯ
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

05.35, 06.20 "Россия от края до края" (12+).
06.00, 10.00 Новости.
06.30 "Вертикаль". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Спорт".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.20 "Владимир Высоцкий. "И, улыбаясь, мне ломали крылья" (16+).
11.25, 13.35 "Живой Высоцкий" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Стряпуха". Комедия.
14.40 "Владимир Высоцкий. Последний год" (16+).
15.40 "Высоцкий. Спасибо, что живой". Биографическая драма (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Своя колея". Избранное (16+).
00.50 "Ганмен". Худ. фильм (16+).
03.00 "Осада". Худ. фильм (16+).
05.10 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

04.40 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00, 11.20 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.40 "Измайловский парк" (16+).
14.00 "Холодное сердце". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!". Ток-шоу
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Ожидается ураганный ветер". 4 серии. Криминально-драматический сериал (16+).
01.00 XVI Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орел". Трансляция.
03.50 "Личное дело". Сериал (16+).

**БСТ**

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Астерикс: Земля Богов" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 12.00 "Тәмле" (12+).**
**11.30, 20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык" представляет..." (12+).**
**17.00 Концерт Азата Бикчурина с Национальным симфоническим оркестром РБ (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Сәнгелдәк".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Путешествие в страну Шахерезады" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30, 02.15 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**24.00 "2:22". Худ. фильм (16+).**

**28 ЯНВАРЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Баламут". Худ. фильм.
08.15 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.20 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "В гости по утрам" с Марией Шукшиной.
11.30 "Дорогая переДача".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.15 "Надежда Румянцева. Одна из девчат".
14.15 "Королева бензоколонки". Комедия.
15.45 "Аффтар жжот" (16+).
17.30 "Русский ниндзя". Финал.
19.30 "Старше всех".
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "КВН-2018. Сочи" (16+).
00.45 "Французский транзит". Триллер (18+).
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

**РОССИЯ 1**

04.50 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00, 14.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.20 "Алла в поисках Аллы". Мелодрама (12+).
16.15 "За полчаса до весны". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий (12+).
01.30 "Право на правду". Сериал (12+).

**БСТ**

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Сборник советских мультфильмов.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.15 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**12.55 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Тюменский Легион" (Тюмень).**
**15.15 "Дарю песню" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Параллельные миры" (12+).**
**18.15 Вечер памяти народного и заслуженного артиста БАССР Фарита Бикбулатова (12+).**
**19.45 "Первая Республика" (12+).**
**20.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Виктор". Худ. фильм (16+).**
**02.45 В.Уильямс. "Трамвай "Желание" (12+).**

✓ *Мәскәүҙәге Дон зыяратында сәйәси репрессия ҡорбандары булған башҡорт интеллигенцияһының 14 вәкиленә мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы уҙҙы.*



*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# КҮБӘЛӘК МЕНӘН БЕРГӘ...



**Ҡала балалары ҡышҡы каникулдарында төрлө Яңы йыл тамашалары ҡарап кинәнә. Улар өсөн барыһы ла әҙер - тик бар, күр, ял ит кенә, үҙҙәренә бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәй. Ә ауылда йәшәүсе бәләкәстәр, ғәҙәттә, ололар менән бер рәттән үҙҙәренең ялын үҙҙәре ойоштороуҙа ҡатнаша. Бөрйән районы Ҡотан ауылында шаһит булдыҡ ошоға.**

Яңы йылға арналған мәктәп байрамдары үтеп киткәс тә, ауылдың ололары ла, балалар үҙҙәре лә ялдарын файҙалы һәм күңелле итеп үткәреүҙе хәстәрләне. Яңы йылдың тәүге көнөндә үк ауылдың ағинәйҙәре Зөһрә Хөснөтдинованың өйө алдына шыршы ҡуйып, мул өҫтәл әҙерләп, төрлө уйындар үткәреп, балалар өсөн байрам ойошторҙо. Күңелле йырҙарға күңелдәре булғансы бейеп, Ҡыш бабайҙан күстәнәстәр алып таралышты Ҡотан балалары был йәмле саранан. Шуныһы ла әһәмиәтле, тик уйын-көлкөгә генә ҡоролманы әлеге байрам. Уны ойоштороусылар: "Бала саҡ иң матур мәл, уның ҡәҙерен белегеҙ. Атай-әсәйҙәрегеҙҙе яратығыҙ, ололарҙы хөрмәт итегеҙ. Яҡшы уҡып, тәрбиәле, игелекле, эшһөйәр, илһөйәр булып үҫегеҙ. Һеҙ - Башҡортостаныбыҙҙың киләсәге, милләтебеҙҙең ышанысы, илебеҙҙең ныҡлы терәге буласаҡ кешеләрһегеҙ. Үҫеп етеп, төрлө тарафтарға таралғас та, тыуған ауылыбыҙҙы, районыбыҙҙы онотмағыҙ. Киләсәктә һеҙҙең менән ғорурланып йәшәргә яҙһын беҙгә, Алла бирһә", тип нәсихәттәр әйтеп, байрамды тағы ла әһәмиәтлерәк итте.

Шулай уҡ ауыл халҡы һәм ҡунаҡтар мәҙәниәт йортонда мәктәп уҡыусылары менән уның директоры Ольга Попова һәм художество етәксеһе Гөлсинә Йәнбирҙина әҙерләгән башҡорт халыҡ әкиәте буйынса "Үгәй ҡыҙ Гөлбикә" спектаклен ҡарап ҡыуанды. Ролдәрҙе башҡарыусыларҙың һәр кеме ихлас, оҫта, тырыш. Уларҙың ҡыйыулыҡтары ла күҙгә ташлана. Тамашасынан оялып, күҙ йәшереп тормайҙар, тауыштары ла көр һәм көслө яңғырай. Әкиәт төрлө уйындар менән бергә үрелеп барҙы. Шуға күрә залда ултырыусы балалар ҙа тамашаның әүҙем ҡатнашыусыларына әйләнде, ваҡиға уртаһында ҡайнаны. Байрамдың тик башҡорт телендәге йырҙар оҙатыуы аҫтында барыуы ла иғтибарҙы йәлеп итте. Ҡотан ауылында балалар урыҫ телен дә һыу кеүек "эсә", әммә әлеге сарала, күп урында күҙәтелгәнсә, ике телде бергә бутап түгел, ә саф башҡортса һөйләне улар. Үҙенең булмышынан яҙмаған, телен, милләтен, тарихын ихтирам иткән балалар үҫә был ауылда.

Һәр ауылдың мәҙәни үҙәге - клуб, мәҙәниәт йорто. Эш уның ҙурлығында түгел, иң мөһиме, халыҡты ылыҡтырып, рухи хазиналар өләшеүсе урын була алыуында. Зауыҡ тәрбиәләүсе үҙәктең яҡшы ремонтлы, заманса йыһазландырылған, музыка ҡоралдары менән тәьмин ителгән булыуы мөһим, әлбиттә, ләкин йыр-моң яратыусы Ҡотан ауылы халҡы ел өрөп торған тәҙрәле, күптән инде алыштырыуҙы көткән ултырғыстар ҡуйылған, тоноҡланған шаршаулы мәҙәниәт йортона бик тә теләп йөрөй. Шулай уҡ улар бында китапханаға ла килә, буш ваҡыттарында йыйылып, бильярд та һуға. Күңел дәртле булғанда, бындай ғына ваҡтөйәккә иғтибар итмәйһең шул. Ана бит, Яңы йыл байрамы сараларын ҡарарға хатта күбәләк тә осоп килгән. Ҡыш уртаһында күбәләкме? Аптырайһы түгел, сөнки үҙенсәлекле Бөрйән ерендә була торған хәл был.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (5) дүшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:01 | 17:31 | 19:01 |
| 23 (6) шишәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 16:03 | 17:33 | 19:03 |
| 24 (7) шаршамбы | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:05 | 17:35 | 19:05 |
| 25 (8) кесе йома | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |
| 26 (9) йома | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |
| 27 (10) шәмбе | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 28 (11) йәкшәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 16:13 | 17:43 | 19:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# БАЙМАҠТАР УҘҘЫРМАЙ



**Ауыл мәктәбе уҡыусылары араһында рус шашкаһы буйынса ил беренселегендә Башҡортостан вәкилдәре лә уңышлы сығыш яһаны. Ярыштар Силәбе өлкәһендәге Печинкино ауылында сәләмәтләндереү үҙәгендә үтте.**

Ҡыҙҙар һәм егеттәр рапид һәм блиц программаларында дүрт йәш төркөмөндә ярышты. Миҫал өсөн Пермь крайынан, Башҡортостандан, Бүрәт, Саха-Яҡут республикаларынан, Иркутск, Ҡурған, Ырымбур, Төмән, Свердловск һәм Силәбе өлкәләренән 19 команда көрәште. Халыҡ-ара шашка федерацияһының матбуғат хеҙмәте хеҙмәткәре Рөстәм Шәйәхмәтов хәбәр итеүенсә, Башҡортостандан турнирҙа республиканың ауыл райондары араһында шашка хәрәкәте лидеры - Баймаҡ районы ҡатнашты. Республика командаһына Төркмән ауылы уҡыусылары Азамат һәм Айгүзәл Әхмәтовтар һәм Илнар Ҡолмөхәмәтов инде. Команданың тренеры Азат Әхмәтов. Ярыш йомғаҡтары буйынса, Азамат Әхмәтов яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште. Ул 2007-2008 йылдарҙа тыуған ир балалар араһында блицта икенсе булды. Илнар Ҡолмөхәмәтов был дисциплинала бишенсе урын алды. 8 йәшкәсә һәм унан йәшерәк ҡыҙҙар араһында Айгүзәл Әхмәтова блицта бишенсе һәм рапидта етенсе булды. Өҫтәп үтергә кәрәк, баймаҡтар ауыл мәктәптәре араһында бөтә Рәсәй беренселегендә 2014 йылдан бирле ҡатнашып, һәр саҡ миҙалдар менән ҡайта.

# МӘСКӘҮ ЗЫЯРАТЫНДА...



**Мәскәүҙәге Дон зыяратында сәйәси репрессия ҡорбандары булған башҡорт интеллигенцияһының 14 вәкиленә мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы уҙҙы.**

Ошондағы 1-се дөйөм ҡәберҙә XX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостан Республикаһының һәм Совет Рәсәйенең ойошторолоуына ҙур өлөш индергән дәүләт, хәрби һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең кәүҙәһе ята. Улар - Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Муллайән Халиҡов, Афзал Таһиров, Харис Йомағолов һәм башҡа күренекле шәхестәр. Мемориаль таҡтаташтың дизайнын республиканың Хәйбулла районында тыуып үҫкән, әлеге көндә Мәскәүҙә йәшәгән архитектор Лилиә Әбделмәнова эшләгән. Гранит плитәлә исем-шәрифтәр яҙылған, уның осонда ҡурай сәскәһе тора. Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта уҡыған Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы етәксеһе Азат Бадранов хәбәр итеүенсә, мемориаль таҡтаташты асыуҙа Мәскәү студенттары, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллеге хеҙмәткәрҙәре Олег Маликов һәм Марат Мирхәйҙәров, шулай уҡ Федерация Советы ағзаһы Рафаил Зиннуров ҡатнашты. Һәләк булғандарҙы бер минутлыҡ тынлыҡ менән иҫкә алдылар. Сара һуңында мулла мәрхүмдәр иҫтәлегенә доға ҡылды.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# АЛТЫН БИТЛЕК



**"Алтын битлек-2018" Рәсәй милли театр премияһының рәсми сайтында спектаклдәрҙең күрһәтелеү ваҡыты тураһында мәғлүмәт баҫылды.**

"Алтын битлек" номинанты Башҡорт дәүләт академия драма театры "Антигона" спектакле менән ҡатнаша. Ул 22 мартта киске һигеҙҙә Пушкин исемендәге Театрҙың төп сәхнәһендә күрһәтеләсәк. Башҡорт театры драмаһы 7 номинацияға тәҡдим ителгән: "Ҙур формалағы иң яҡшы спекталь", "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһында режиссер Фәрит Бикчәнтәев, "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында Лилиә Ғәлина, "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында Олег Ханов, "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында Гөлмирә Исмәғилева, "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында Алмас Әмиров, "Иң яҡшы рәссам эше" номинацияһында Альберт Нестеров. "Алтын битлек" премияһын тапшырыу 15 апрелдә Ҙур театрҙа буласаҡ.

# ҠУРАЙҒА ҠЫҘЫҒАЛАР ШУЛ!



**Американдар башҡорт ҡурайы менән ҡыҙыҡһына. Был турала билдәле музыкант, ҡурайсы, дирижер, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин хәбәр итте.**

Ул Алматыла Ҡаҙағстан этнографияһының 200 йыллығына арналған "XXI быуатта традицион музыка" халыҡ-ара ғилми конференцияһында ҡатнашты.

Рәмил Ғәйзуллиндың доклады "Башҡорт халҡының тынлы уйын ҡоралдары" тип аталды. Сарала шулай уҡ Төркиә, АҠШ, Венгрия, Үзбәкстан, Бөйөк Британия, Молдова, Ҡырғыҙстан, Рәсәй ғалимдары ҡатнашты. Мәскәү консерваторияһынан да уҡытыусы-ғалимдар бар ине. "АҠШ-тан ғалим-тикшеренеүсе Пост Дженифер үҙ сығышында ҡурай тураһында әйтеп үтте. Ләкин минең докладымды тыңлағандан һәм тәүге тапҡыр ҡурайҙы күргәндән һуң, беҙҙең милли уйын ҡоралыбыҙға ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Ул мине Аризона университетына конференцияға саҡырҙы", - тип һөйләне Рәмил Ғәйзулллин. Конференция барышында оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде, Ҡаҙағстандың сәнғәт оҫталары һәм конференция ҡунаҡтары ҡатнашлығында гала-концерт уҙҙы.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 ғинуар "Ғәфү ит мине"** (И. Герман), мелодрама 16+

**21 ғинуар "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 12+

**23 ғинуар "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**24 ғинуар "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+

**25 ғинуар "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма 16+

**26 ғинуар "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 ғинуар "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма 12+

**26 ғинуар "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 ғинуар "Игра в прятки"** (Н. Шувалов) 0+

**21 ғинуар "Большой секрет"** (А. Рахманкулова) 0+ Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

**20, 21 ғинуар "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 ғинуар** ҡурайсы, республика конкурстары лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Илшат Ишморатов "20 йыл бергә!"** тип аталған концертына саҡыра. Башлана 18.00

**25 ғинуар "Һин бәхетле? Ә мин?.."** музыкаль роман. Төп ролдәрҙә: Башҡортостандың халыҡ артистары Олег Ханов менән Әлфиә Юлсурина.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 ғинуар "Көйһөҙ кейәү"** (Н. Гоголь), комедия 16+

**26 ғинуар "Бернарда Альба йорто"** (Ф. Гарсия Лорка), драма16+

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# БАШҠОРТ ЯУГИРҘАРЫ ДАНЫН...

## ситтәр ҙә баһалай

**Үткән аҙнала республиканың рәсми делегацияһы Нидерландтарҙы Наполеон ғәскәрҙәренән азат итеүгә 205 йыл тулыуға арналған сараларҙа ҡатнашты.**



Билдәле булыуынса, оккупацияланған Голландияны Наполеон баҫҡынсыларынан рус армияһы ҡотҡара һәм ошо рәүешле Нидерландтар ирекле короллек статусын кире ҡайтара ала. Бында башҡорт һыбайлыларының роле ҙур була. Ошо ваҡиға айҡанлы Голландия ҡасандыр илдәренә ирек яуларға ярҙам итеүселәрҙең вариҫтарын үҙҙәренә саҡырҙы. Бынан тыш, тарихи ваҡиғалар урынында - Гелдерланд провинцияһының Эйссел йылғаһы ярында азат итеүселәрҙең иҫтәлегенә матур монументаль композиция асылды. Мемориалда ике һыбайлы - генерал Бенкендорф һәм башҡорт атлыһы һынландырыласаҡ.

Рәсәйҙең Нидерландтар короллегендәге ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Александр Шульгин башҡорт яугирҙарына ҡуйылған һәйкәлдең мөһимлеген, шулай уҡ был ваҡиғаның тағы ла күп кенә картиналарҙа сағылыуын билдәләне. Был мемориал ошо ерҙәрҙе азат итеүсе башҡорттарҙың тарихына ҡыҙыҡһыныу уята, тине илсе үҙенең сығышында. БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Рәсәй ғәскәрҙәре сафында Нидерландтар өсөн ирек яулаған ҡаһарман башҡорт атлыларының батырлығын хөрмәтләп иҫкә алыуҙары өсөн рәхмәтен белдерҙе һәм Нидерландтарҙың ижади коллективтарын Башҡортостанда 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһына саҡырҙы.

Фестиваль Башҡортостандың Рус дәүләт академия драма театры һәм Голландияның "Гексагон" ансамбле артистары ҡатнашлығында "Буран" әҙәби-музыка спектакле менән асылды. Мәҙәни сарала шулай уҡ Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, "Карауан" төркөмө артистары сығыш яһаны.

"Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы" документаль һәм нәфис фотолар күргәҙмәһе ойошторолдо, унда республиканың билдәле оҫталарының 40 фотоһы ингән. Эштәр Башҡортостан тәбиғәтенә, мәҙәниәтенә, кешеләренә һәм халыҡтарҙың йолаларына арналды. "Ағиҙел" художество кәсептәре берекмәһенең биҙәү-ҡулланма сәнғәте изделиелары күргәҙмәһе башҡорт милли орнаменттарын ҡулланып тегелгән әйберҙәр, милли стилләштерелгән кейем-һалым, һауыт-һаба тәҡдим итте. "Амантай" ҡулланма халыҡ сәнғәте ижади оҫтаханаһы етештергән уҡ-һаҙаҡтар ҙа урындағы халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар 1813 йылда илде Наполеон армияһынан азат итеүҙә башҡорт яугирҙарының ролен тикшерҙе.

ӘҘӘБИӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## СИТТӘН ТОРОП КОНКУРС



**Башҡортостанда Зәйнәб Биишеваның юбилейына "Халыҡҡа һәм ҡеүәтле ергә ҡарата һөйөүҙә" республика әҙәби конкурс иғлан ителде. Уны Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана уҙғара.**

Конкурс Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге Башҡортостан Республикаһы Дәүләт премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 110 йыл тулыуға арналған. Бәйгелә 10-17 йәштәге мәктәп уҡыусылары һәм республиканың үҙәкләштерелгән милли китапхана системалары хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша ала. Конкурста өс номинация тәҡдим ителгән: "Үҙ һүҙеңде ҡаты әйт" - Зәйнәб Биишеваның шиғри мираҫы, "Кеше - ул ҡояш!" - Зәйнәб Биишеваның проза әҫәрҙәре, "Йәшәү - ул көрәш" - Зәйнәб Биишеваның драма әҫәрҙәре. Ситтән тороп ойошторолған конкурс 2018 йылдың 31 ғинуарында тамамлана. Ошо уҡ йылдың 8 февралендә бәйгегә йомғаҡ яһала.

## ӘКИӘТТЕ БАШҠОРТСА УҠЫ!



**Льюис Кэрроллдың "Алиса в стране чудес" тигән китабы башҡорт телендә "Әлисәнең Сәйерстандағы мажаралары" исеме аҫтында донъя күрҙе. Уны билдәле башҡорт яҙыусыһы Гүзәл Ситдиҡова тәржемә иткән.**

Стилле итеп биҙәлгән китап (рәссамы Джон Тенниел) Американың Кэрролл Йәмғиәте менән берлектә бойомға ашырылған ҙур нәшриәт проектының бер өлөшө булып тора. Уны Ирландияла "Evertype" нәшриәте донъя халыҡтары телдәрендә баҫтырып сығарған. Башҡорт телендәге тәржемә Британия китапханаһы каталогына индерелгән. "Миңә профессор, мөхәррир-консультант Виктор Яковлевич Фет был проектта ҡатнашырға тәҡдим итте. Ул ошо данлыҡлы әкиәтте быҒаса тәржемә ителмәгән телдәрҙә нәшер итеү маҡсатында тәжрибәле лингвистар эҙләүен яҙғайны. Был ирекмәнлек нигеҙендә башҡарылған түләүһеҙ хеҙмәт булды", - тип аңлатты Гүзәл Ситдиҡова. Башҡортсаға әйләндерелгән китап Гүзәл Ситдиҡованың үҙендә һәм яҙыусы бүләк иткән Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала бар.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылында йәшәүсе

**Ҡунысбаева Нурия Мөхтәр ҡыҙы**



55 йәшлек күркәм юбилейын билдәләй. Үҙен китапханасы һөнәренә бағышлаған ҡәҙерлебеҙ әлеге көндә Иҫәнғол башҡорт гимназия-интернатында эшләй. Ул бында китапхана эшенән тыш, юғары синыф уҡыусыларының класс етәксеһе лә. Был ғына ла түгел, Нурия Мөхтәр ҡыҙы йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша. Районды "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе вазифаһын да оло яуаплылыҡ менән башҡара. Уны яҡындары, дуҫтары, коллегалары көслө рухлы, уңған, кешелекле, изге күңелле, оло йөрәкле итеп белә. Ике балаға ғүмер бүләк иткән нурлы әсәгә киләсәктә лә ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер, яҡындарының һәм балаларының йылыһын тойоп, уларҙың игелеген-изгелеген күреп, яңы тыуған һәр көнгә ҡыуанып, һөйөп-һөйөлөп йәшәүен теләйбеҙ.

*Гел шулай ҡояштай балҡы,*
*Һин бит беҙҙең өйөбөҙ йәме.*
*Йөҙөңдә балҡыған шатлыҡтан*
*Донъябыҙ ҙа нурлы һәм йәнле!*

*Тик бәхеттәр юлдаш булһын, әсәй,*
*Ҡайғы-хәсрәт күрмә бер ҙә,*
*Һинең наҙыңа, йылыңа сорналып,*
*Фатихаңда йәшәйек беҙ ҙә.*

**Ҡотлау менән улың Вәлиулла, киленең Розалиә, ҡыҙың Лилиә, ейәндәрең Ильяс һәм Мораҙым һәм ҡоҙа-ҡоҙағыйың Әхмәт менән Рәмзиә Раҡаевтар.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҮТӘ БАШҺЫҘ БУЛҺАҢ...

## башһыҙ ҡалырһың

Үтә башһыҙ булһаң башһыҙ ҡалырһың, үтә булдыҡһыҙ булһаң, ашһыҙ ҡалырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡайһы саҡта беҙ кемделер түбәнһетеү өсөн икенсе берәүҙе күтәрәбеҙ...

**(Ф. Ларошфуко).**

Үҙҙәре ышанып етмәһә лә һинең турала гел насарҙы һөйләгән, һине күрә алмаған дошмандар һәм һинең турала бар яҡшыны белеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәгән дуҫтар араһында нисек йәшәмәк кәрәк?!

**(А. Ривароль).**

Кеше ысындан да маймылға оҡшаған шул: юғарыға үрмәләгән һайын арт һынын ғына күрһәтә.

**(Ф. Бэкон).**

Кешеләрҙең йәшәү шарттарын яҡшыға төҙәтегеҙ - ул саҡта кешеләр был шарттарға лайыҡлы булырға тырышасаҡ.

**(Х. Флэтчер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡайҙалыр Көнсығышта йәшәгән бер байҙың ун ҡатыны булған. Бай үҙенең ҡатындарын яратҡан, хәстәрләгән, уларҙың һәр теләген, һәр ихтыяжын үтәгән. Ә ҡатындарының барыһы ла үҙҙәренең уҫаллығы һәм һаранлығы менән дан тотҡан. Улар үҙ-ара пыр туҙып талашыуҙан бушамаған. Ә ирҙәре алдында фәрештә булып ҡыланған, ике йөҙлөләнгән.**

**Бына Көнсығышта ҡоролош алышына. Күп ҡатын менән йәшәгән ирҙәр әхлаҡһыҙ тип иғлан ителә. Әлеге байҙы ла хөкөм итеп, һөргәнгә оҙаталар, ә ҡатындарына ирек бирәләр. Ҡатындар төрлөһө-төрлө яҡҡа таралыша, ҡайһыһылыр яңынан кейәүгә сыға. Ләкин яңы никах уларға бәхет килтермәй. Сөнки гел талашҡа өйрәнгән ҡатындар яңы тормошта ла шул ғәҙәтен ҡуймай. Һөргөндәге ир ҡатындарының, балаларының яҙмышын уйлап, йыш ҡына күҙ йәштәре түгә, ти. Бына шулай сираттағы тапҡыр ҡайғырып ултырғанда бер ҡарт иргә шулай тип мөрәжәғәт итә: "Ниңә бик ҡайғыға ҡалдың әле?" "Ҡатындарымды уйлайым. Мин улар тураһында ҡулдан килгәнсә хәстәрлек күрҙем, барыһын да яраттым. Ә мине шуның өсөн әхлаҡһыҙ тип атанылар. Тимәк, мин хәҙер ожмахҡа эләкмәйем бит инде..." "Юҡҡа ҡайғыраһың, - ти ҡарт. - Мин һинең ғаиләңде нисек яратҡаныңды, хәстәрләгәнеңде яҡшы беләм. Мөхәббәт менән йәшәгән кешенең урыны, әлбиттә, ожмахта. Ә бына ҡатындарың ожмахҡа эләкмәҫ, сөнки улар һине яратманы, ике йөҙлөләнде генә. Мөхәббәтһеҙ йәшәүҙән дә оло гонаһ юҡ". Ошо һүҙҙәрҙән һуң ир кеше ҡатындары өсөн тағы ла ныҒыраҡ ҡайғырып, илап ебәрҙе, ти. Уның күҙ йәштәре, әлбиттә, уның игелекһеҙ ҡатындарын тамуҡтан һаҡлап алып ҡалды, ти".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 91/01